ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

20-26 июнь (һөтай) 2025

№24 (1168)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Һин дә ҡартайырһың,**
Мардан...



2-3

**Солоҡсолоҡ...**
башҡорттарҙың төп шөғөлдәренең береһе



7

**Яуаплылыҡ та, ғорурлыҡ та...**
Яныбай Хамматов ейәнсәре булыу...



8-9

**Әбйәлил буҙаһына ни етә!**



13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 25 июнгә тиклем 2025 йылдың икенсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә республиканың һәр ҡалаһында-ауылында яҙыла алаһығыҙ, хаҡы - 995 һум 76 тин. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласаҡ икәнен дә онотмағыҙ.***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*

# РУХИӘТ ҺАҠСЫҺЫ УЛ



**"Киске Өфө" - ул минең өсөн рухи аҙыҡ, күңелемде, йөрәгемде йылытҡан баҫма. Был гәзитте уҡығанда үҙ халҡыңдың тарихы, мәҙәниәте, ғөрөф-ғәҙәттәре, милли геройҙары тураһында беләһең, улар менән ғорурланаһың.**

"Киске Өфө"нө сыға башлаған йылдарҙан алып уҡыйым. Республика яңылыҡтары, ауыл тормошо, милли байрамдар, халҡыбыҙҙың яулаған уңыштары һәм борсоған мәсьәләләр тураһында мәғлүмәт еткерә ул миңә.

Милли баҫманың төп ҡиммәте - телде һаҡлау, йәш быуында туған телгә, илгә һөйөү тәрбиәләү. "Киске Өфө"ләге ниндәй генә рубриканы алма, уларҙағы материалдар башҡорт халҡының асылын аса, республикалағы яҡшы яңылыҡтарҙы яҡтырта, тәнҡиткә лә ишаралай, тарихи хәтеребеҙҙе яңырта. Шулай уҡ ул ололарға ихтирам, изгелек, тырышлыҡ, тыуған ергә тоғролоҡ кеүек сифаттар тәрбиәләй. "Киске Өфө" гәзитен мин халҡыбыҙҙың рухи хазинаһын, быуындан-быуынға күскән ҡиммәттәрен һаҡлаусы, халыҡ хәтерен тергеҙеүсе баҫма тип ҡабул итәм һәм йыл һайын яҙылам.

"Киске Өфө"нөң тағы бер мөһим үҙенсәлеге - уның халыҡты берләштереү, милли үҙаңды уятыу, илһөйәрлек рухын нығытыуҙағы роле. Гәзитте уҡып, мин үҙемде башҡорт милләтенең айырылғыһыҙ бер өлөшө итеп тоям, милли асылымды тағы ла нығыраҡ аңлайым.

"Киске Өфө" - ул беҙҙең өсөн маяҡ, рухи терәк. Ул киләсәк быуынға милли рухыбыҙ асылын тапшыра. Шуға күрә мин уны даими уҡып барам, унан рух, дәрт алам. Ул - беҙҙең күңел көҙгөһө, рухи ҡиммәттәребеҙҙең һаҡсыһы.

**Таңһылыу МӘЖИТОВА,**
**Мәләүез районы Үрге Юлдаш ауылы ағинәйе.**

*БАШ ҠАЛАМ*

# БАЛАЛАРҒА...

## майҙансыҡтар бик кәрәк



**Өфө тураһында күп итеп яҙырға була, сөнки баш ҡалабыҙ көндән-көн ҙурая, үҫә. Уның үҙәгендә лә төрлө эштәр әүҙем алып барыла, шулай уҡ ҡалаға ҡараған, әммә Өфөнән ситтәрәк урынлашҡан район биләмәләрендә лә эштәр гөрләй.**

Күптән күҙәтеп барыуым түбәндәге фекерҙәрҙе төйнәргә булышлыҡ итте лә инде. Мәҫәлән, ҡала хакимиәте өфөләргә һәм ҡала ҡунаҡтарына ял итеү, спорт менән шөғөлләнеү өсөн төрлө мөмкинлектәр тыуҙыра. Балалар һәм спорт майҙансыҡтары, велосипедта йөрөү өсөн махсус юлдар, йәйәүлеләр өсөн тротуарҙар төҙөкләндерелә һәм яңылары булдырыла, руль артындағылар тураһында ла онотолмай. Ләкин ҡайһы берәүҙәрҙең ошо матурлыҡты юҡ итергә тырышыуы күңелде ҡыра. Яңыраҡ М.Ғафури исемендәге парктағы спорт майҙансығында урынлаштырылған ҡоролмаларҙы емереп-ҡырып киткәндәр. Кемдең ҡулы баралыр бындай эшкә?

**(Дауамы 2-се биттә).**

*АФАРИН!*

# ТАҒЫ БЕР ЧЕМПИОН!



**Ҡырмыҫҡалы районынан спорт мастерлығына кандидат Илнар Садиҡов ҡатнаш көрәш буйынса Рәсәй чемпионы исемен яуланы, тип хәбәр итә муниципалитет хакимиәте.**

17 йәшлек Илнар Садиҡов финалда Чечен Республикаһынан килгән дәғүәсеһен еңде. "Был иһә спортсының юғары әҙерлек кимәлен һәм команданың тырышлығын күрһәткән ҙур ҡаҙаныш", - тип яҙалар хакимиәттең социаль селтәрҙәге төркөмөндә. Бынан алдараҡ Башҡортостан көрәшселәре Каспийскиҙа уҙған халыҡ-ара турнирҙа наградаларҙың тулы комплектын яуланы. Унда 21 йәшкә тиклемге юниорҙар араһында грек-рим көрәше буйынса турнир үтте, биш илдән бөтәһе 100-ҙән ашыу спортсы ҡатнашты.

12+

✓ *Кем белә, әлеге ошо төркөм тәкдиме юҡтан бар булмағандыр бит. Шуға күрә был мәсьәләгә киләсәктә тулыһынса оптимизм менән ҡарарға ла өмөт юҡ, сөнки илдәге беҙ күнеккән пенсия системаһы үҙ мөмкинлектәренән ваз кисте.*



*БАШ ҠАЛАМ*

# БАЛАЛАРҒА...
## майҙансыҡтар бик кәрәк



**(Башы 1-се биттә).**

Шулай уҡ ҡайһы бер райондарҙағы ойошмалар, биналар алдындағы ихата, майҙандарҙың рәткә килтерелмәүе лә күҙгә салынып, кәйефте ҡыра. Мәҫәлән, Октябрь проспектында урынлашҡан Балалар филармонияһы алдындағы күтәрмәнең "хәле" бик ауыр. Күптән төҙөкләндереүҙе көткән был урынға иғтибар итһәләр ине лә бит. Ә Нефтехимик мәҙәниәт һәм ял итеү паркы янындағы скверҙа урынлашҡан фонтанды төҙөкләндереүҙең тамамланыуын түҙемһеҙләнеп көтәбеҙ. Парк янында йәшәгәндәр өсөн тағы ла бер матур ял урыны буласаҡ был.

Шулай уҡ "Өфө муйынсағы" уникаль проектының иң матур өлөшөнөң береһе "Ҡариҙел һуҡмағы" ла оҙаҡламай үҙенең ял итеүселәрен ҡабул итәсәк. Ейәнем менән был һуҡмаҡ буйлап йөрөргә бик яратабыҙ. Уның төрлө урындарын йөрөп ҡарап сыҡтыҡ, барыһы ла матур, уңайлы. Ысынлап та, был уникаль проект, республиканың башҡа ҡалаларында ла бындай проекттар тормошҡа ашырылһа, бик яҡшы булыр ине.

Улым ғаиләһе менән Ағалы-ҡустылы Кадомцевтар урамында йәшәй. Ғөмүмән, был тирәлә балалар, үҫмерҙәр тәрбиәләгән ғаиләләр бик күп. Ләкин бәләкәстәргә лә, йәштәргә лә уйнау һәм спорт менән шөғөлләнеү өсөн майҙансыҡтар етерлек түгел. Мәҫәлән, улымдың йорто янындағы балалар майҙансығында тик тимерҙән эшләнгән "боронғо" бәүелсәк кенә тора. Шулай уҡ совет заманынан ҡалған турниктар бар, ләкин улар күберәген балаҫ элеп ҡағыу өсөн ҡулланыла. Ошо районда волейбол, баскетбол уйнау майҙансыҡтары эшләһәләр, ни тиклем файҙа булыр ине. Телеүҙәккә яҡын Пушкин урамындағы махсус тимер селтәр (сетка) менән ҡапланған баскетбол һәм мини-футбол майҙансығын күреп йөрөйөм һәм унда күмәкләп уйнаған йәштәргә ҡарап һоҡланам.

Һүҙ ыңғайында, Ватанды һаҡлаусылар урамында 2023 йылда уҡ ҡуйылған, әммә ошоға тиклем тоҡандырылмаған уттарҙы ҡасан күрербеҙ икән, тип һорағым килә. Шулай уҡ ҡала хакимиәтенең пландарында Спорт туҡталышынан алып "Башҡортостан" сауҙа үҙәгенә тиклем йәйәүлеләр һәм велосипедта йөрөүселәр өсөн махсус юлдар эшләү ҡаралмағанмы икән, тигән һорау ҙа күңелде өйкәп тора. Бик тә кәрәк был юлдар.

**Әминә СӨЛӘЙМӘНОВА.**

*БЫНАҒАЙЫШ!*

# ҺИН ДӘ ҠАРТАЙЫРҺЫҢ, МАРДАН...

**Тик торғанда, һүҙ юҡта һүҙ булһын, тигәндәй килеп сыҡты был йүнһеҙ хәбәр. Кемгәлер йәшәүе бошонҡо булып китеп, күңел асып алырға итәләрме, әллә киләсәктә буласаҡ хәлдәрҙе фаразлаусы шоу-клоун ролен башҡарыуҙарымы - һәр хәлдә, ҡырмыҫҡа иләүенә таяҡ тығып болғаусы әҙәмдәр табылып ҡына тора. Бынан улар ниндәйҙер ләззәт кисерәме, тормошондағы бушлыҡты ямаймы, әллә шулай итеп пиар эшләүҙәреме - әйтеүе ҡыйын.**




"Соловьев. Live" мәғлүмәт каналы алып барыусы Сергей Мардан (Ключенков) ауыҙынан сыҡты был хәбәр ошо көндәрҙә: "Әйҙәгеҙ, шайтаныма булһын, бөтөрәйек был пенсияны. Бала тапһындар, тәрбиәләһендәр - тимәк, ҡартлығында ашарына булыр. Ә балаһы юҡ икән - дөмөгөр". Нисек инде? Оҡшаймы ватандаштарға ҡарата бындай мөнәсәбәт? Һәм бит уны хуплаусылары ла табылып тора. Мәҫәлән, олигарх, миллиардер, "Царьград" компанияһы башлығы Константин Малофеев та былай ти: "Ысынлап та, нишләп әле 30 йәшлек граждандарыбыҙға бер ун йылдан дәүләт пенсияһына өмөт булмауын әйтмәҫкә? Был йәштә, әйҙә, улар үҙҙәре хәл итһен: аҡса туплай башларғамы, ҡартлыҡ көндәрендә таянырлыҡ балалар үҫтерергәме..."

Бынағайыш, бындай мәжбүри-көслөк юлы менән улар демография проблемаһын хәл итергә була, тип уйлай, күрәһең. Тик был изге ниәтте кеше хоҡуҡтарын боҙоу юлы менән юҡҡа сығарыу мөмкин икәнен аңлай микән улар? Йәки, әйтәйек, һаулыҡ һәм етешһеҙ тормош-көнкүреш хәлдәре буйынса бала таба алмаусылар ул ваҡытта ни эшләргә тейеш? Икенсенән, был мәсьәләне тап бөгөнгө көндә ҡуҙғытыуҙың кисекмәҫтән кәрәге булдымы икән ни? Илдәге иҡтисади-социаль проблемалар, ата-әсәләрҙең тәрбиәләп буй еткергән уландары ҡайғыһы - ошондай шарттарҙа кеше яҙмыштарына тулыһынса битарафлыҡ, төкөрөп ҡарау түгелме был? Ошо урында Мардан идеяһын тәнҡитләп сығыусы меңәрләгән кешенең фекерҙәрен килтереп тормау хәйерлерәк булыр: үҙ башына яуған рәнйеү ташҡынынан ҡаушай төшкән Мардан ғәфү үтенергә мәжбүр булды ла ул, тик шулай ҙа уның идеяһын күтәрмәләп алыусы әлеге Малофеев, блогер Поздняков ише "антипенсионерҙар" килеп сыҡты.

Ирекһеҙҙән һорау тыуа: улар, бәлки, ысынлап та, пенсия системаһының күңелһеҙ киләсәге "хәбәрселәре"-лер? Социаль фонд менән ил ҡаҙнаһын "ҡырып-һепереп" пенсия түләүгә тотоноп тороуға ризаһыҙлыҡтар юҡҡа ғына йышая төшмәгәндер бит. "Московский комсомолец" гәзите хәбәрсеһе Кирилл Иванов әйтмешләй, "антипенсионерҙар" идеяһы илдә ошо теманы әүҙем күтәрмәләүсе билдәле бер элиталы төркөмдөң позицияһын сағылдыра. Шул уҡ ваҡытта хәбәрсе, элиталы төркөм фекере был мәсьәләгә әле власть ҡарашы түгел, тип тынысландырырға тырыша.

Кем белә, әлеге ошо төркөм тәкдиме юҡтан бар булмағандыр бит, уның "һөлдәһе" һәр ваҡыт ҡайҙалыр баш осонда, һауала эленеп торғандай, шуға күрә был мәсьәләгә киләсәктә тулыһынса оптимизм менән ҡарарға ла өмөт юҡ, сөнки илдәге беҙ күнеккән пенсия системаһы үҙ мөмкинлектәренән ваз кисте. Ә сит илдәрҙәге кеүек граждандарға үҙ киләсәктәренә капитал туплап барыу өсөн лайыҡлы эш хаҡы кәрәк. Балалар үҫтереп-тәрбиәләү, уларҙы уҡытып сығарыу ҙа аҡсаһыҙ мөмкин түгеллеген беләме

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Бүздәк районында булды. "Махсус рәүештә өс предприятиеға барҙым. 3-4 йыл эсендә уларҙың барыһы ла ныҡ үҙгәргән. Айырыуса металл прокатлау предприятиеһы ҡыуандырҙы. 500 миллион самаһы инвестиция һалғандар, яңы майҙансыҡтар асҡандар. Көн тәртибендә мәҙәниәт йортон реконструкциялау һәм мәктәп төҙөү тора. Районда идара итеү командаһы көслө. Башлыҡ, йәш булһа ла - төплө етәксе, шуға күрә бында эштәр яҡшы бара", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Бүздәктәге социаль объекттарҙы ремонтлау буйынса йөкләмәләр бирҙе. Тәү сиратта был урындағы ауыл хужалығы колледжына, район мәҙәниәт йортона һәм таҙартыу ҡоролмаларына ҡағыла. Радий Хәбиров республика Хөкүмәтенең беренсе вице-премьеры Урал Килсенбевҡа ошо объекттарҙы "Профессионалитет" программаһына йәки 2026-2027 йылдарға төҙөкләндереү буйынса төбәк программаларына индереү мөмкинлеген ҡарарға, шулай уҡ быға район эшҡыуарҙарын йәлеп итергә ҡушты.

✓Өфөләге вуз-ара студенттар кампусы майҙансығында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Евразия йөрәгенә сәйәхәт - 2025" экспедицияһы ағзалары менән осрашты. Халыҡ-ара төбәк интеграцияһы үҙәге ойошторған сара Мәскәүҙә старт алды. Унда ҡатнашыусылар 51 көн дауамында Рәсәй, Тажикстан, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан һәм Үзбәкстан аша 8000 километрҙан ашыу юл үтергә ниәтләй. Программаға ярашлы, улар урындарҙа фәнни сессиялар, бизнес-форумдар, мәҙәни саралар һәм белем биреү осрашыуҙары үткәрә. Экспедицияла ҡатнашыусылар Башҡортостанда 14-17 июндә булды.

✓21 июндә Өфө районында Башҡортостан йылҡысылары форумы үтә. Сарала тармаҡты үҫтереү, аттарҙың тоҡомсолоҡ, спорт һәм продуктив сифаттарын камиллаштырыу мәсьәләләре ҡараласаҡ, йылҡысылыҡҡа дәүләт ярҙамы саралары тикшереләсәк. Бынан тыш, йылҡысылыҡ тармағында кадрҙар әҙерләү, йылҡысылыҡ продукцияһын етештереүҙә биологик хәүефһеҙлек, уны экспортҡа сығарғанда ҡуйылған төп талаптар мәсьәләләрен күтәреү ҙә планлаштырылған. Форум Жуково ауылында "Жуковский" ат спорты комплексы биләмәһендә ойошторола.

✓Боҙҙа мотоуҙыш буйынса 20 тапҡыр донъя чемпионы, Өфө мотоуҙышсыһы Николай Красников юл фажиғәһендә һәләк булған. "Башинформ" сығанаҡтары хәбәр итеүенсә, спортсы төнгө сәғәт 3-тәр тирәһендә Кушнаренко районында, Р-240 автомобиль юлының 69-сы километрында, үҙенең "Лада Гранта" автомобилендә китеп барғанда ҡаршыға килгән "Газель" һәм "Ситрак" йөк машиналары менән бәрелешкән.

✓ Балаң ниндәй генә изгелекле, тәрбиәле булмаһын, ҡартайған көнөндә ата-әсә уға һәм уның ғаилә ағзаларына көс төшөрөп, үҙен артыҡ тамаҡ ролендә күргеһе килмәйәсәк барыбер...



был әфәнделәр? Бөгөн иһә, Росстат иҫәбенсә, Рәсәй буйынса 98 мең тип тәкрарланыусы уртаса эш хаҡына ла хатта пенсиялыҡ тупланма йыйып барыу мөмкин түгел, сөнки түктауһыҙ үҫә барыусы хаҡтар арҡаһында тартып-һуҙып көн итеүе еңелдән түгелләген яҡшы беләбеҙ. Унан һуң, ҡарттарҙы балаһы, уның ғаиләһе ауыҙына ҡаратып, тилмертеп ултыртырға итәләрме? Балаң ниндәй генә изгелекле, тәрбиәле булмаһын, ҡартайған көнөндә ата-әсә уға һәм уның ғаилә ағзаларына көс төшөрөп, үҙен артыҡ тамаҡ ролендә күргеһе килмәйәсәк барыбер...

Уйламай хәбәр һөйләүсе бушбоғаҙҙар бының ҡартлыҡты мыҫҡыллау, кәмһетеүгә бәрәбәр икәнен аңламай икән, улар үҙҙәре лә бер заман бөкөрәйер бит...

Өлкән быуын вәкилдәренең тормош кимәлен төрлө илдәр буйынса сағыштырыу өсөн бер нисә илдең пенсия системаһын алып ҡарайыҡ, булмаһа: иң юғары пенсия Данияла - 2 400 евро (йәғни 2 907 АҠШ доллары). Норвегияла пенсия күләме 2 500 доллар, Швейцарияла 2 100 доллар, Японияла 1 700 доллар, Австрияла 1693 доллар. Был пенсиялар дәүләт өлөшөнән һәм индивидуаль пенсия программалары өҫтәмәһенән тора. Был ҡәҙәрем аҡса туплап барыу өсөн эш хаҡының күпме булыуын күҙ алдына килтереүе ҡыйын түгел, әлбиттә. Күренеүенсә, уларҙа ла дәүләт пенсионерҙарҙы тәьмин итеүгә өлөш индерә, ләкин береү ҙә дәүләт пенсияһын бөтөрөп, Мардан менән Малофеев кеүек, өлкән быуынды социаль тәьминәттән мәхрүм итергә саҡырмай. Дөрөҫ, ҡайһы бер сит илдәрҙә лә эшләп йөрөүселәр менән хаҡлы ялдағылар араһындағы нисбәтте һаҡлау өсөн пенсия йәшен кисектереү сараһы күрелә йә пенсия взностары ставкаһы арттырыла, ләкин уның эҙемтәләре илдәге демография мәсьәләһенең ни дәрәжәлә киҫкен тороуына бәйле һәм йыш ҡына һиҙелерлек социаль тетрә-неүҙәргә килтереп еткермәй.

Малофеевтың тәҡдиме Федерация Советына ла барып ишетелгән икән. Конституция закондары буйынса комитет рәйесе быға ҡаршы РФ Конституцияһының 39-сы статьяһын килтерә: илдә йәше, теге йәки был сире, инвалидлығы, ҡараусыһын юғалтыуы сәбәпле йәки балаларын тәрбиәләү өсөн һәм закон менән ҡаралған башҡа осраҡтарҙа һәр граждан социаль йәһәттән тәьмин итеү ҡаралған. Ә Дәүләт Думаһының Ғаиләне яҡлау, атайлыҡ, әсәлек һәм балалыҡ мәсьәләләре буйынса комитет рәйесе урынбаҫары Татьяна Буцкая белдереүенсә, әлеге әфәнделәр тарафынан пенсия мәсьәләһе урынһыҙ күтәрелә; дәүләт беҙҙең граждандар мәнфәғәтен яҡлай һәм кешеләр яҙмышы менән уйнарға юл ҡуйылырға тейеш түгел.

Ә шулай ҙа илдә пенсия системаһын яңыртып ҡороу кәрәк буласаҡ, ти Г.В.Плеханов исемендәге университеттың дәүләт һәм муниципаль финанстар кафедраһы профессоры Юлия Финогенова. Сөнки бөгөн илдә бер пенсионерҙы тәьмин итеү өсөн ике, хатта өс эшләп йөрөүсе тап килә.

Әлеге ваҡытта Хөкүмәт теләк буйынса тупланма пенсиялар системаһын ҡарай башланы. Ләкин иҡтисадсылар фекеренсә, был система халыҡтың күпселек өлөшө өсөн проблеманы хәл итеү булмаясаҡ, сөнки, әйтеп кителеүенсә, эш хаҡтары түбән. Тимәк, өҫтәмә килем кәрәк. Ә инде айырым кешеләрҙең ҡартлыҡтарын тәьмин итеү өсөн үҙаллы рәүештә аҡса туплап барырға хәлдәренән килә икән, улар даими рәүештә һәр төрлө финанс ойошмалары - идаралыҡ компаниялары, брокерҙар, дәүләттеке булмаған пенсия фонды йәки страховкалау компаниялары аша эш итә ала. Ләкин, тип иҫкәртә финанс белгестәре, был юлды әлегә ышанысьлы һәм тотороҡло тип әйтеүе ҡыйын.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# ИЗРАИЛГӘ НИ ЕТМӘЙ?

**Үткән аҙнала Яҡын Көнсығышта башланып киткән хәлдәр бөтөн донъяны хафаға һалды: Израиль премьер-министры Биньямин Нетаньяху Иран ядро программаһына ҡаршы операция башлауы хаҡында иғлан итте һәм 13 июнь төнөндә 200-ләгән истребитель менән Ирандың ядро программаһы объекттарын, шул иҫәптән юғары хәрби начальниктар штабын утҡа тотто. Һөҙөмтәлә Ислам революцияһы һаҡсылары корпусының (КСИР) командующийы менән Ҡоралы көстәр генераль штабының начальнигы һәм атомсы физик-ғалимдар һәләк булды.**



Тегеран Израилгә йөҙләгән ракета ебәреп, яуап уты асты. Бынан һуң 15 июнгә ҡарай төндә Израилдең иллеләгән истребителе Ирандың Тегерандағы ядро проекты объекттарына тағы һөжүм итте. Өс көн эсендә Израиль армияһы Ирандың 720 хәрби объектын утҡа тотто.

Ике ил араһындағы конфликт халыҡ-ара кимәлдә төрлө ҡараш тыуҙырҙы, ләкин күпселек, мәҫәлән, Рәсәй, Сәғүд Ғәрәбстаны, Британия, Япония, Оман, Индонезия, Венесуэла, Куба, Никарагуа, Һиндостан кеүек илдәр Израиль агрессияһын ғәйепләне һәм Ирандың ядро программаһын дипломатик көйләү юлы менән хәл итергә саҡырҙы.

АҠШ президенты Дональд Трамп шулай уҡ Иранға ядро килешеүе төҙөүҙе тиҙләтергә тәҡдим итте. Уның Израилдә АҠШ ҡоралының күп булыуы һәм унда улар менән нисек эш итергә яҡшы беләүҙәре хаҡындағы белдереүе иҫкәртеү кеүегерәк тә яңғыраны. Ул ғына ла түгел, Fars менән Mehr мәғлүмәт агентлыҡтары яҙып сығыуынса, әгәр ҙә Иран Яҡын Көнсығыштағы Америка базаларына һөжүм итә ҡалһа, "АҠШ-тың Ҡоралы көстәре быуаса күрелмәгән кимәлдә һеҙгә ябырыласаҡ", тип тә өҫтәне һәм АҠШ-тың Израиль һөжүменә бер ниндәй ҙә мөнәсәбәте булмауын белдерҙе. "Ҡараҡтың бүрке яна", тигәнсәрәк килеп сыға түгелме был? Сөнки АҠШ-тың Франция менән бергә Израилде яҡлап сығыш яһауы һәм уға Иран һөжүмен кире ҡағыуҙа булышлыҡ итеүе мәғлүм.

Уның ҡарауы, Трампҡа был араларҙа АҠШ-тың эске проблемалары менән ныҡлабыраҡ шөғөлләнеү хәйерлерәк булыр ине лә бит... 14 июнь, Трамптың ниәтләүенсә, икеләтә байрам булырға тейеш ине: беренсенән, АҠШ армияһы үҙенең 250 йыллыҡ юбилейын билдәләһә, ошо уҡ көн Аҡ йорт хужаһына 79 йәш тулды. Ләкин был көн әлеге Израиль - Иран конфликты, шулай уҡ 50 штатта Трамп сәйәсәтенә ҡаршы илде тетрәткән күп меңле митингылар, болалар башланып китте. Протестҡа ҡатнашыусылар Америка президентының миграция сәйәсәте арҡаһында илдән ҡыуылыуы ихтимал йөҙәрләгән мең кеше мәнфәғәтен яҡлап урамдарға сығырға мәжбүр булған. Митингылар бөтөн ил буйынса - Нью-Йорк менән Чикагонан алып, Сан-Франциско менән Мар-а-Лагоға тиклем барҙы. Урамға сыҡҡан халыҡ президенттан сәйәси йүнәлеште үҙгәртеүен, йә булмаһа властан китеүен талап итә. Йәш ағыҙыусы газ, резина пулялы ҡорал ҡулланып, ҡала полициялары протест белдереүселәр сығышын аяуһыҙ баҫтыра. Тәүге ҡорбандар, йәрәхәттәр алыусылар, һыбайлы полиция аттарының тояҡтары аҫтында ҡалыусылар күбәйә бара. Ниһайәт, резина пулялар ямғырынан ҡасып, митингысылар тирә-яҡҡа һибелә. Дональд Трамп Америка властарының хөсөтсөләр тарафынан ойошторолған һул радикалдар сығышы менән килешергә йыйынмауын белдерҙе һәм Пентагонға, юстиция, эске хәүефһеҙлек министрлыҡтарына илдәге тәртипһеҙлек эҙемтәләре буйынса саралар күрергә ҡушты...

Яҡын Көнсығыш конфликтына килгәндә иһә, күҙәтеүселәр фекеренсә, Рәсәй был юҫыҡта төп аралашсы роленә дәғүә итә. РФ Президенты Владимир Путин Иран президенты Масуд Пезешкиан һәм Израиль премьеры Нетаньяху менән телефон бәйләнешенә сыҡты һәм ике яҡты ла һөйләшеп килешеүҙәр юлына ҡайтырға саҡырҙы. Федерация Советының вице-спикеры Константин Косачев, Израиль менән Иран араһында килеп тыуған хәл өсөн яуаплылыҡтың ҙур өлөшө АҠШ намыҫында, тип белдерҙе, сөнки тап Вашингтон әлеге хәлдәрҙе иҫкәртеү мөмкинлеген биргән Иран ядро программаһының оҙайлы килешеүҙәрен өҙөүҙә ғәйепле. Шуға күрә лә конфликтты артабан йәйелдермәү өсөн Ҡушма Штаттар үҙ өҫтөнә айырыуса ҙур яуаплылыҡ алырға тейеш. Әйткәндәй, Трамптың Иран верховный лидеры Али Хаменеины юҡ итеү буйынса Израиль планына тыйыу һалыуы ана шул яуаплылыҡты таныуылыр ҙа, бәлки. Мәғлүмәт сығанаҡтарының береһе белдереүенсә, бәхеткә, был йәһәттән Ирандың сәйәси етәкселәрен эҙәрлекләү хаҡында әлегә һүҙ бармай.

Рәсәй Президенты Владимир Путин менән АҠШ лидеры Дональд Трамп телефондан аралашҡанда Иран ядро программаһы буйынса һөйләшеүҙәр юлына ҡайтыу мөмкинлеге хаҡында фекер алышты. Иран үҙенә ҡарата агрессия туҡтатылған хәлдә Израилгә һөжүмде шулай уҡ туҡтатырға әҙер булыуын белдерҙе. Ә бына Израиль Тегеран ядро программаһына ҡағылышлы килешеүҙәргә өлгәшеүҙе теләмәй, тип белдерә Ислам республикаһының сит ил эштәре министры Аббас Аракчи.

Әйткәндәй, һуңғы яңылыҡтарҙа Украинаның һәләк булған 1212 һалдаттарының кәүҙәһен ҡабул итеп ала башлауы хаҡында хәбәр ителә.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Әбйәлил, Баймаҡ һәм Бөрйән урмансылыҡтары биләмәһенә транспорт менән инергә ярамай. Башҡортостан Урман хужалығы министрлығының матбуғат секретары Найлә Зарипова хәбәр итеүенсә, хәҙер был саралар 6 июлгә тиклем ғәмәлдә ҡала. "Сикләү урман үҫентеләрен ҡуртымға алыу һәм һатыу-һатып алыу килешеүенә ярашлы урмандарҙы һаҡлау, тергеҙеү буйынса сараларҙы тормошҡа ашырған юридик шәхестәргә һәм граждандарға ҡағылмай. Әммә туристарға һәм һунарсыларға ҡәтғи ҡағыла. Был осорҙа урман фонды биләмәләрендә тикшереү ойошторола", - тип белдерҙеләр ведомствола.

✓Ағиҙел ҡалаһы хакимиәте башлығы Денис Ирназаров ҡалала уҙған һыу аҫты һунары буйынса "Миҙгелде асыу - 2025" республика фестивале һөҙөмтәләре менән уртаҡлашты. Өс көн барған ярышта 105 балыҡсы, Рәсәйҙең 12 төбәгенән 35 команда ҡатнашты. Һыу аҫты һунарында Ҡаҙан ҡунағы Артур Ғариповҡа уңыш йылмайған. Ул Ағиҙел йылғаһында 50 килограмлыҡ йәйен тотҡан. Әйткәндәй, 50 килограмлыҡ йәйендән тыш, рекордсылар исемлегендә һаҙан (12,7 кг), суртан (4,4 кг), ҡорман (1,9 кг), табан балыҡ (1,5 кг) һәм ҡарабалыҡ (1,7 кг) бар.

✓2025-2026 уҡыу йылына Башҡортостан колледждарында 24 меңгә яҡын бюджет урыны әҙерләнгән. Мәғариф һәм фән министрының беренсе урынбаҫары Светлана Антипина Республика менән идара итеү үҙәгенә интервьюһында ошо турала белдерҙе. Уның әйтеүенсә, документтар тапшырыу ваҡыты 15 августа тамамлана. Әгәр урта махсус уҡыу йорттарында өҫтәмә урындар ҡалһа, һайлап алыу 25 ноябргә тиклем бара. Юғары уҡыу йорттарында иһә 25 июлгә тиклем ҡабул итәләр.

✓Башҡортостанда "Ҡала тренеры" программаһына ғаризалар ҡабул ителә башланы. Республика Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары - спорт министры Руслан Хәбибов үҙенең телеграм-каналында ошо турала хәбәр итте. Вице-премьер һүҙҙәренсә, һайлап алыуҙы үткән һәр ҡатнашыусыға 1 миллион һум күләмендә аҡсалата сертификат тапшырыла. "Аҡсаны торлаҡ (йорт йәки фатир), өй һалыу өсөн ер участкаһы һатып алыу, ипотеканы ҡаплау, шәхси йорт төҙөү өсөн тотонорға мөмкин", - тип билдәләне Руслан Хәбибов. Ғаризаларҙы спорт өлкәһендә дәүләт көйләүе идаралығында тапшырырға мөмкин (Өфө ҡалаһы, Совет урамы, 18-се йорт, 4-се бүлмә).

✓"Башинформ" агентлығының конференциялар залында Башҡортостан Республикаһы Башлығы Хакимиәте етәксеһе вазифаһын башҡарыусы Азат Бадранов журналистарҙы һөнәри байрамы менән ҡотлап, тармаҡ хеҙмәткәрҙәренә дәүләт наградаларын тапшырҙы. Илебеҙ өсөн ҡатмарлы осорҙа дөрөҫлөк ҡоралы, мәғлүмәт хәүефһеҙлеге ҡалҡаны һәм фронт менән тыл араһында күпер булып хеҙмәт иткәндәр лайыҡ булды Башҡортостан Республикаһының дәүләт наградаларына.

✓ *Ситтән килеүселәрҙең төп маҡсаты - эш (22,4 меңдән ашыу кеше, 73 процент), шәхси саҡырыу буйынса (4,3 меңдән ашыу, 14,2 процент), уҡыу (2 мең самаһы, 6,7 процент), шулай уҡ хеҙмәт, эшҡыуарлыҡ, туризм һәм башҡа маҡсаттар.*



*ҠЫҪҠАСА*

# ИҪКӘРТЕҮ КӘРӘК!

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Республика терроргә ҡаршы комиссияһының һәм оператив штабтың берлектәге ултырышын үткәрҙе.** Ултырышта инфраструктура һәм сәнәғәт объекттарын террор хәүефенән һаҡлау мәсьәләһе тикшерелде. Радий Хәбиров төбәктә объекттарҙы терактарҙан, шул иҫәптән пилотһыҙ аппараттарҙан һаҡлау буйынса тейешле саралар күрелеүен билдәләне. Ул әлеге хәлдә иҫәпкә алып, өҫтәмә саралар әҙерләргә ҡушты. Шулай уҡ ултырышта йәштәр араһында терроризм идеологияһын һәм неонацизм идеяларын таратыуға юл ҡуймау тураһында һүҙ барҙы. Ошо эш өсөн яуаплы белгестәрҙең һөнәри әҙерлек кимәлен күтәреү мөһим, тип билдәләне республика етәксеһе. Мәғариф һәм йәштәр министрҙары һүҙҙәренсә, уҡытыусылар һәм йәштәр ойошмалары активистары өсөн белем биреү программалары әҙерләнгән. Бынан тыш, Башҡортостанда мәктәп уҡыусылары һәм студенттар араһында, шул иҫәптән федераль эксперттар ҡатнашлығында иҫкәртеү саралары даими үткәрелә.

✓**Башҡортостанда МХО-ла ҡатнашыусыларға һәм ветерандарға, шулай уҡ уларҙың ғаиләләренә ярҙам саралары 54-кә еткерелде. Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә республика Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары - спорт министры Руслан Хәбибов ошо турала белдерҙе.**

- "Ватанды һаҡлаусылар" дәүләт фондының республика филиалы менән берлектә хәрби хеҙмәткәрҙәр һәм уларҙың туғандары менән өҙлөкһөҙ эш алып барыла, - тип билдәләне Руслан Хәбибов. - Яңы саралар исемлегенә теш протездары менән тәьмин итеү, физкультура-һауыҡтырыу хеҙмәттәренә сертификаттар биреү, планлы дауаханаға һалыуҙы көтөү ваҡытын ҡыҫҡартыу, ярҙам сараларын алыу өсөн ғаризалар һәм документтар ҡабул итеү буйынса бушлай күсмә хеҙмәтләндереү өҫтәлде.

✓**Башҡортостан һаулыҡ һаҡлауҙың беренсел звеноһын яңыртыуҙы дауам итеү өсөн федераль аҡса алыуы мөмкин.** Яҡын арала Рәсәйҙең Һаулыҡ һаҡлау министрлығы төбәктәргә дотация бүлеү буйынса ҡарар ҡабул итергә тейеш, тип хәбәр итте республика етәксеһе Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһе барышында. "Беҙ Рәсәй Һаулыҡ һаҡлау министрлығының беренсел звеноны яңыртыуҙы дауам итеү өсөн финанслау йәһәтенән аҙаҡҡы ҡарарын көтәбеҙ", - тине Радий Хәбиров. Билдәле булыуынса, Башҡортостан Башлыҡы бер нисә тапҡыр беренсел медицинаны үҫтереүҙе властарҙың өҫтөнлөклө бурысы булып тороуы хаҡында әйткәйне. Былтыр ғына республикабыҙҙа туғыҙ объектҡа капиталь ремонт үткәрелгән, 135 модулле конструкция ҡуйылған, дүрт меңдән ашыу берәмек медицина ҡорамалы һәм 206 автотранспорт һатып алынған. 2025 йылға алты поликлиниканы сафҡа индереү, туғыҙ объектты капиталь ремонтлау һәм 134 модуль конструкцияһын ҡуйыу планлаштырылған. Быйыл шулай уҡ 4,6 меңдән ашыу берәмек медицина ҡорамалы һәм 99 енел санитар автомобиль һатып алынырға тейеш.

✓**Башҡортостанда етем балаларҙың опекундарына һәм попечителдәренә түләүҙәр 16,6 процентҡа арта.** Ошо маҡсатҡа республика бюджетында 87 миллион һум аҡса ҡаралған. Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы киләһе пленар ултырышта тейешле закон ҡабул итергә йыйына. 1 июндән пособиены яңыса иҫәпләйәҙәр. Шулай итеп, 3 йәшкә тиклемге балаларға айына - 10 855 һум, 3 йәше тулғандарға 10 439 һум түләйәҙәр. Һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән 3 йәшкәсә балаларға - 13 027 һум, 3 йәштән өлкәндәргә иһә 12 526 һум. Башҡортостанда ошо категорияға ҡараған 9 681 бала бар. Уларҙың 94 проценты ғаиләләрҙә йәшәй.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# ЯҢЫ МӨМКИНЛЕКТӘР



**Евразия ғилми-белем биреү үҙәгенең вуз-ара студенттар кампусының Геном үҙәгендә "21-се мәктәп" асылды. Тантанала Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров һәм Рәсәй Һаҡлыҡ банкы президенты, идара рәйесе Герман Греф ҡатнашты.**

"21-се мәктәп" - һанлы технологиялар мәктәбе 18 йәше тулған, һайлап алыу этаптарын уңышлы үткән кандидатҡа бушлай ИТ-һөнәр алыу мөмкинлеген бирә. Өфөлә Һаҡлыҡ банкы "21-се мәктәп+" проектын Башҡортостан хөкүмәте менән берлектә тормошҡа ашыра.

- Бөгөн беҙҙә оло ваҡиға һәм "21-се мәктәп"те асыу яңы мөмкинлектәр булдыра,- тип билдәләне республика етәксеһе. -Беҙҙең һәләтле йәштәр өсөн был бик кәрәк ине. Киләсәктә бында 5 меңдән ашыу егет-ҡыҙҙар белем алырға мөмкин".

Рәсәй Һаҡлыҡ банкы президенты, идара рәйесе Герман Греф һүҙҙәренсә, Башҡортостан - көслө фәнни, интеллектуаль төбәк, сәнәғәте үҫешкән. "Һеҙҙең кампуста Фәндәр академияһы, университеттар, индустриаль партнерҙар араһында тығыҙ партнерлыҡ. Беҙҙә әлегә тиклем йөнле системалар инженерияһы менән бәйле бер генә мәктәп тә юҡ ине. Өфөлә ғилми һәм етештереү ҡеүәте менән бәйле белгеслек үйланылған", - тип билдәләне Герман Греф.

Әлеге ваҡытта "21-се мәктәп" илебеҙҙең 14 ҡалаһында эшләп килә. Шулай уҡ 2024 йылдың ноябрендә Сеченов университетының һәм "21-се мәктәп"тең берлектәге кампусы асылды. Киләһе йылдарҙа илдең тағы бер нисә төбәгендә мәктәп кампустары үҙ ишектәрен асырға тейеш.

башлап ебәргән һәм Евразия ҡатын-ҡыҙҙар форумын ойошторған изге традицияны дауам итеүгә бик ҡыуаныслы. Беҙ бергә йыйылып, тәжрибә, белем менән уртаҡлашыуҙың ҡатын-ҡыҙҙар өсөн ни тиклем мөһим икәнен аңланыҡ".

# МИНСК-ӨФӨ ДУҪЛЫҒЫ

**Өфөлә булып үткән "Минск һәм Өфө: туғандашлыҡ - үҫештең яңы драйверы" бизнес-форумында Белоруссия вәкилдәре менән ике яҡлы хеҙмәттәшлек тураһында 10 документҡа (килешеүҙәр, саралар планы, контракттар) ҡул ҡуйылды.**

Өфө хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев һәм Минск ҡала башҡарма комитеты рәйесе Владимир Кухарев 2026-2028 йылдарға Өфө менән Минск араһында муниципаль-ара мөнәсәбәттәрҙе үҫтереү һәм киңәйтеү буйынса саралар планына ҡул ҡуйҙы. Минскиҙың Партизан районы хакимиәте башлығы Николай Поляков һәм Өфөнөң Калинин, Октябрь, Совет, Киров райондары хакимиәттәре башлыҡтары 2025-2027 йылдарға сауҙа-иҡтисади хеҙмәттәшлек тураһында килешеү төҙөнө. Бынан тыш, Белоруссия Сауҙа-сәнәғәт палатаһының Минск бүлексәһе һәм Башҡортостан Сауҙа-сәнәғәт палатаһы, "Минск" иҡтисади зонаһы етәкселеге һәм Башҡортостан кластерҙары ассоциацияһы, Белоруссияның дәүләт академия бейеү ансамбле һәм Өфөнөң "Мираҫ" йыр һәм бейеү ансамбле араһында хеҙмәттәшлек тураһында килешеүҙәр, Минск һәм Өфө туристик-мәғлүмәт үҙәктәре араһында мәғлүмәт хеҙмәттәшлеге тураһында килешеү төҙөлдө, Өфөнөң коммерция предприятиеһына Белоруссиянан резина плитәләр килтереү тураһында контрактҡа ҡул ҡуйылды.

# БӘХЕТ БИЛӘМӘҺЕНДӘ

**Өфөнөң "Торатау" конгресс-холында V "Ҡатын-ҡыҙ бәхете биләмәһе" Бөтә Рәсәй академияһы сараһы үтте. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республиканың барлыҡ ир-егеттәре исеменән мөхәббәт, ихтирам һәм сикһеҙ рәхмәт һүҙҙәрен еткерҙе. Шулай уҡ ҡатнашыусыларҙы Ау Yola төркөмө үҙенең Homay хиты менән сәләмләне.**

Быйыл форум тәүге тапҡыр халыҡ-ара кимәлгә сыҡты. Унда Мексика, Дубай, Белоруссия, Үзбәкстан, Омандан ҡунаҡтар һәм эксперттар ҡатнашты. Ике көн дауамында "Сәләмәтлек биләмәләре" майҙансыҡтары эшләне, унда балалар һәм өлкәндәр өсөн бушлай консультациялар үткәрелде, төрлө темаға лекциялар, түңәрәк өҫтәлдәр, оҫталыҡ дәрестәре һәм воркшоптар, медицина консультациялары һәм психолог консультациялары тәҡдим ителде. Быйыл күргәҙмә зоналары "Мәҙәни код" эгидаһы аҫтында эшләне. Кескәйҙәр өсөн "Бала саҡ биләмәһе" ойошторолдо, лекциялар ваҡытында әсәйҙәр балаларын ошонда ҡалдырып торҙо. "Бер ниндәй ҙә ауырлыҡтарға ҡарамаҫтан, сираттағы тапҡыр Башҡортостанда ошондай сара уҙғарыла, - тип билдәләне "Бәхет биләмәһе" хәйриә фондының попечителдәр советы рәйесе Каринэ Хәбирова. - Оҙаҡ ваҡыт беҙҙең менән булған һәр кемгә рәхмәт белдерәм. Беҙҙең проекттың Валентина Ивановна Матвиенко

# ЭШСЕ ҠУЛДАР СИТТӘН КИЛӘ

**2025 йылда Башҡортостанда 56 меңдән ашыу сит ил граждандары миграция иҫәбенә ҡуйылған.**

Был хаҡта Дәүләт Йыйылышы комитетының йәмәғәт хәүефһеҙлеге, хоҡуҡ тәртибе һәм суд мәсьәләләре буйынса ултырышында Эске эштәр министрлығының миграция мәсьәләләре идаралығы етәксеһе урынбаҫары Гүзәл Баймырҙина хәбәр итте. Уның һүҙҙәренсә, 15 меңдән ашыу сит ил граждандары миграция иҫәбенән алынған.

Күпселек сит ил граждандары визаһыҙ илдәрҙән килгән: Үзбәкстан, Тажикстан, Ҡаҙағстан, Әзербайжан, Беларусь, Әрмәнстан, Ҡырғыҙстан.

Виза талап ителгән илдәрҙән күберәк кешеләр Һиндостан, Ҡытай, Төркиә, Мысыр, Төркмәнстан, Иран, Германия, Вьетнамдан килгән. Килеүселәрҙең төп маҡсаты - эш (22,4 меңдән ашыу кеше, 73 процент), шәхси саҡырыу буйынса (4,3 меңдән ашыу, 14,2 процент), уҡыу (2 мең самаһы, 6,7 процент), шулай уҡ хеҙмәт, эшҡыуарлыҡ, туризм һәм башҡа маҡсаттар. Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрының беренсе урынбаҫары Юрий Мельников әйтеүенсә, һуңғы өс йылда виза талап ителгән илдәрҙән эшсе мигранттарҙы йәлеп итеү артҡан, сөнки уларҙы күҙәтеү һәм һаҡлау булыуҙарын белеү еңелерәк.

Быға тиклем "Башинформ" законһыҙ миграцияны ойошторған өсөн 15 йылға тиклем ирегтән мәхрүм итеү янауы тураһында хәбәр иткәйне.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостандың сығарылыш уҡыусылары араһында рус теленән Берҙәм дәүләт имтиханына йомғаҡ яһалды, тип хәбәр итте мәғариф министры Илдар Мәүлитбирҙин үҙенең телеграм-каналында. Быйыл бөтәһе 15578 уҡыусы һынау тотҡан. Рус теленән Берҙәм дәүләт имтиханында 11 кеше 100 балл йыйған, былтырғы уҡыу йылында ла шунса һан. Ә 1859-ҙы 81 һәм унан юғарыраҡ балл алған. Министр әйтеүенсә, был әлегә аныҡ һөҙөмтәләр түгел, сөнки апелляциянан һәм өҫтәмә көндәрҙә имтихан тапшырғандан һуң йөҙ балға яҙған уҡыусыларҙың һаны артыуы ихтимал.

✓"Мәләүез минераль ашламалары" акционерҙар йәмғиәте "Азот" компаниялар төркөмөнә инә һәм төрлө тәғәйенләнештәге аммиак селитраһының өс төрөн сығара һәм үҙ продукцияһын Рәсәй төбәктәренә һәм яҡын сит илдәргә оҙата. 2024 йылда, мәҫәлән, ҡулланыусыларға 325 мең тонна продукция һатылған. Килем күләме 6,5 миллиард һумдан ашыу тәшкил иткән. Компания социаль проекттарҙа әүҙем ҡатнаша. Предприятие ярҙамында Мәләүездә бер нисә арт-объект ҡуйылған, "Сылбырлы реакция" хәйриә уҙышы үткәрелә. Быйыл Еңеүҙең 80 йыллығына 80 ағас ултыртылған.

✓Башҡортостандан Константин Лобанов спорт көрәше буйынса Рәсәй чемпионы исемен яуланы. Келәм батырҙары араһында спорт көрәше буйынса Рәсәй асыҡ чемпионаты Смоленскиҙа үтте. Унда 4 илдән 350-нән ашыу спортсы миҙалдар һәм донъя чемпионатына юллама өсөн көс һынашты. Октябрьский ҡалаһынан Константин Лобанов ил чемпионы исеменә лайыҡ булды. "В" дивизионында ул 130 килограмға тиклемге категорияла алтын миҙал яуланы. "С" дивизионында (70 килограмм) бронза наградаһы Илмир Ғәйнетдинов алды.

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин указы менән илебеҙ журналистикаһы өлкәһендәге хеҙмәттәре һәм күп йыллыҡ емешле эше өсөн "Башинформ" мәғлүмәт агентлығының әҙәби мөхәррире Алик Шакировҡа "Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған журналисы" тигән маҡтаулы исем бирелде. Бынан тыш, ошо уҡ указ менән Өфө Көрәш һарайы директоры урынбаҫары Александр Григорьев "Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған физик культура хеҙмәткәре" тигән маҡтаулы исемгә лайыҡ булды. БДМУ-ның кафедра мөдире Нәзирә Шәрәфетдинова "Рәсәй Федерацияһы юғары мәктәбенең атҡаҙанған хеҙмәткәре" маҡтаулы исем менән билдәләнде.

✓Өфө роллеры Демид Ручко Һарытауҙа уҙған фристайл буйынса ярышта яңы рекорд ҡуйҙы. Республиканың Спорт министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, Демид ике дисциплинала - юғары тиҙлекле һәм команда слаломында еңеүсе исеменә лайыҡ булды. Шулай уҡ Виктория Пузырникова (юғары тиҙлекле слалом), Эмиль Шәмсетдинов һәм Маргарита Краснова (команда слаломы) алтын миҙалдар яуланы. Ульяна Бурунова (роллер кросс) көмөш награда алды.

ҺӨЙӨНСӨ!

# ЙӨРӘК АУЫРЫУЛЫЛАР...

## заманса дауаханалы булды

**Рәсәй Президенты Владимир Путин видеобәйләнеш режимында илебеҙ төбәктәренең яңы һаулыҡ һаҡлау объекттарын асыу сараһында ҡатнашты. Улар араһында Өфөләге Республика кардиология үҙәгенең яңы хирургия корпусы ла бар.**




Билдәләнеүенсә, дөйөм майҙаны яҡынса 35 мең квадрат метр тәшкил иткән күп ҡатлы бина 2019 йылдың июлендә төҙөлә башланы. Бында диагностика кабинеттары менән ҡабул итеү бүлексәһе, поликлиника, реанимация менән 10 операция бүлмәһе, рентгенохирургия һәм кардиохирургия бүлексәләре, административ блок һәм дарыухана-бүлеү пункты урынлашҡан. Объекттың хаҡы 10,7 миллиард һум тәшкил иткән, аҡса Башҡортостан бюджетынан бүленгән.

Рәсәй Президенты төбәктәрҙең барлыҡ етәкселәренән ФАП-тарҙы иғтибарҙан ситтә ҡалдырмауҙарын һораны. "Ҡан тамырҙарына, йөрәккә ошондай ҡатмарлы операциялар яһалған Республика кардиология үҙәгенең ун ҡатлы хирургия корпусы - республикала ла, тотош илдә лә медицина үҫеше күҙлегенән бик мөһим, әлбиттә. Әммә фельдшер-акушерлыҡ пункттары тураһында онотмағыҙ, был бәләкәй ауылдарҙа йәшәгән миллионлаған граждандарыбыҙға ҡағыла, сөнки уларҙа фельдшерҙан башҡа медицина хеҙмәткәрҙәре юҡ. Шуға күрә ремонт эштәрен дауам итергә, яңы ФАП-тар төҙөргә, белгестәр йәлеп итергә, улар өсөн тейешле шарттар булдырырға кәрәк, тәү ситатта торлаҡ яғынан, һеҙ был хаҡта ла яҡшы беләһегеҙ", - тине Владимир Путин.

- Республикабыҙҙа ике меңдән ашыу ФАП иҫәпләнә. Рәсәй Федерацияһының Һаулыҡ һаҡлау министрлығы ярҙамында һуңғы алты йылда уларҙың 500-өн алмаштырҙыҡ. Улар берҙәм һанлы контурға индерелде. Тимәк, хәҙер төпкөл ауылдағы ФАП-та беҙ электрокардиограмма эшләй һәм шунда уҡ төбәктең ҡан тамырҙары үҙәгенә ебәрә алабыҙ. Хөрмәтле Владимир Владимирович, белеүегеҙсә, корпустың майҙаны 35 мең квадрат метр, 10 операция бүлмәһе бар. Был иһә оҙаҡ һәм сәләмәт йәшәү өсөн өҫтәмә өмөт, - тип билдәләне Радий Хәбиров.

Әйткәндәй, медицина фәндәре докторы, профессор, Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған табибы Вил Тимербулатов Өфөлә кардиология үҙәге корпусын асыуҙың әһәмиәтен шулай тип баһаланы.

- Йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары менән сирләү һәм, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, үлем осраҡтары Рәсәй Федерацияһы буйынса 1-се урында тора һәм беҙҙә лә шундай уҡ күрһәткестәр. Шуға күрә был ваҡиғаның әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ. Ауырыуҙарҙың күбеһе консерватив медикаментоз дауалауға мохтаж, ләкин хирургик коррекция талап ителгән ауырыуҙар ҙа бар, - тип аңлатма бирҙе "Башинформ"ға Вил Тимербулатов. - Ҡасандыр беҙ дөйөм корпус составында кардиохирургия бүлеген астыҡ, әммә был бүлек, әлбиттә, дөйөм алғанда кардиохирургия һәм кардиореанимация талаптарына тап килмәне. Сөнки операцияны бик яҡшы башҡарыу ғына түгел, ә ауырыуҙарҙы ҡарау ҙа мөһим. Уларҙы һауығыуға, реабилитация стадияһына еткерергә кәрәк. Уйланылған һәм тормошҡа ашырылған был аҙым бик етди һәм, ғөмүмән, кардиохирургияның ғына түгел, ә, дөйөм алғанда һаулыҡ һаҡлауҙың үҫеше. Шуға күрә ауырыуҙар хәҙер заманса кардиохирургия үҙәге шарттарында юғары технологиялы, махсуслаштырылған ярҙам алыу мөмкинлегенә эйә. Был бик мөһим мәл.

Бынан тыш, үҙәк заманса, һуңғы һүҙ менән әйткәндә, йөрәккә генә түгел, ә башҡа ҡатмарлы кардиохирургик операциялар башҡарыу өсөн ҡоралдар һәм шарттар менән йыһазландырылған. Унда эре ҡан тамырҙарына операциялар башҡарыласаҡ, улар - аорта, дуға ҡан тамырҙары, күкрәк аортаһы, ҡорһаҡ аортаһы, эре һеңер аҫты артериялары һәм башҡалар. Йәғни операцияларҙы башҡарыу диапазоны байтаҡҡа киңәйгән. Шуны ла билдәләп үтергә кәрәк, ҡатмарлы операциялар эшләү өсөн кардиохирургия диспансеры кадрҙары ла әҙерләнгән. Сөнки беҙҙең кардиохирургтар, ҡатмарлы операциялар яһауҙан тыш, йыл һайын йөрәк күсереп ултыртыуҙы ла башҡара. Был ваҡиға республиканың һаулыҡ һаҡлау системаһы һәм, дөйөм алғанда, ил өсөн ҙур етди ваҡиға, беҙҙең кардиодиспансер һәр ваҡыт Рәсәй Федерацияһының алдынғы ун кардиохирургия үҙәге иҫәбендә, булды. Ә хәҙер ул тәүге бишәү иҫәбенә яҡынлашасаҡ.

"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**Ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан бик күп арҙаҡлы шәхестәребеҙ бар. Бөгөн балалар, йәштәр улар хаҡында бигүк хәбәрҙар түгел. Башҡорт мәктәбендә фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһендәр әйҙә.**

## Аскин Ғәйфетдин Ғәфиәт улы

Ғ.Ғ. Аскин - Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан яугир. Советтар Союзы Геройы. Ул 1924 йылдың 10 октябрендә Өфө кантоны (хәҙерге Башҡортостан Республикаһы Нуриман районы) Сураш ауылында тыуған. Ата-бабалары - көҙәй ырыуы башҡорттары. Ауыл мәктәбен тамамлағас, ФЗО-ла уҡып, эшсе һөнәренә эйә була. 1941 йылдың ғинуарынан 1942 йылдың июленә тиклем Өфө нефть эшкәртеү заводында оператор ярҙамсыһы булып эшләй.

1942 йылда Ҡыҙыл Армия сафтарына саҡырыла. 1943 - 1945 йылдарҙа Дала (Степной), Воронеж, 2-се, 3-сө һәм 1-се Украин фронттарында барған алыштарҙа ҡатнаша.

"Советтар Союзы Геройы" исеме Аскин Ғәйфетдин Ғәфиәт улына СССР Юғары Советы Президиумының 1945 йылдың 27 июнендәге Указына ярашлы бирелә. 43-сө гвардия артиллерия полкы (1-се Украин фронтының 5-се гвардия армияһы, 15-се гвардия уҡсы дивизияһы) орудиеһы командиры, гвардия сержанты Ғәйфетдин Аскин 1945 йылдың 12 ғинуарында Висла йылғаһы янындағы Сандомир плацдармында, Пеценув ауылы районында барған ҡаты алыштарҙа, 21 ғинуарҙа, Оппельн ҡалаһынан төньяҡтараҡ Одер йылғаһы аша сыҡҡанда айырыуса батырлыҡ күрһәтә. 12 ғинуарҙа ул өс пулемет һәм 40 дошман һалдатын юҡ итһә, 21 ғинуарҙа уның етәкселегендәге расчет Польша территорияһында Одер йылғаһын тәүгеләрҙән булып аша сыға һәм бер нисә дошман атакаһын кире ҡағыуға өлгәшә. 25 ғинуарҙа батареяның шәхси составы, ҡамауға эләгеп, тулыһынса тиерлек һәләк була. Батыр башҡорт яугиры Ғәйфетдин Аскин, бер орудиенан икенсе орудиеға күсеп йөрөп, бер үҙе түңәрәк оборона тота, беҙҙең уҡсылар подразделениелары килеп еткәнгә тиклем бер нисә контратаканы кире ҡағыуға өлгәшә. Ул дошмандың 4 станковый пулеметын һәм 60-ҡа яҡын һалдатын юҡ итә.

1945 йылда демобилизациялана. Һуғыштан һуңғы йылдарҙа Ғәйфетдин Аскин тыуған яҡтарына ҡайта һәм Нуриман районы Үкәрле ауыл советы рәйесе булып эшләй, һуңынан Нуриман МТС зонаһы буйынса КПСС-тың Нуриман районы комитеты секретары итеп тәғәйенләнә, ошо вазифаны 1957 йылға тиклем башҡара. Ул байтаҡ йылдар Нуриман районы Советы башҡарма комитетында яуаплы вазифаларҙа эшләй. Аҙаҡҡы йылдарҙа үҙенең тыуған ауылында - Башҡортостандың Нуриман районы Сураш ауылында йәшәй. 2007 йылда вафат була.

Наградалары һәм маҡтаулы исемдәре:

"Алтын Йондоҙ" миҙалы (27.06.1945); Ленин ордены (27.06.1945); ике I дәрәжә Ватан һуғышы ордены (04.05.1945; 06.04.1985); Ҡыҙыл Йондоҙ ордены (08.02.1944) һәм боевой миҙалдар.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөлә сәләмәтлек һуҡмаҡтарының береһе - "Ҡариҙел һуҡмағы"н төҙөкләндереүҙең яңы этабы башланды. Баш ҡала хакимиәтенән хәбәр итеүҙәренсә, эшкә "Өфөҡаласвет" хеҙмәткәрҙәре тотонған. Улар кабель һалыу өсөн траншеялар ҡаҙа, артабан уңайлы һәм хәүефһеҙ йөрөү өсөн заманса яҡтыртыу системаһын ҡуясаҡтар. "Был амбициоз проект "Аврора ынйыһы" менән "Аҡбуҙат һуҡмағы"н берҙәм йәйәүлеләр майҙанына тоташтырасаҡ", - тип асыҡлыҡ индерә мэрия вәкилдәре.

✓Машинаны дөрөҫ ҡуймау, йыйыштырылмаған сүп-сар, законһыҙ сүплектәр һәм сауҙа - ошо һәм башҡа хоҡуҡ боҙоуҙарҙы махсус камералар теркәп барасаҡ. Хәбәр итеүҙәренсә, Рәсәйҙә йәмәғәт урындарына ҡуйылған камералар һаны ҡырҡа артасаҡ. 2024 йылда бындай системаларға заказдар 2,5 тапҡырға күберәк булған, ә контракттарҙың дөйөм хаҡы 1,5 миллиард һумға еткән. "Тиҙҙән водителдең ОСАГО-һы булыу-булмауын тикшерә торған камералар ҙа ҡуйыласаҡ. Уларҙы һынау тамамланыу өҫтөндә", - тип иҫкәртә хоҡуҡ һаҡлаусылар.

✓Баш ҡала башлығының беренсе урынбаҫары Сергей Кожевников белдереүенсә, "Йәшел Башҡортостан" акцияһы сиктәрендә ете йылда Өфөлә 14 меңдән ашыу ағас һәм ҡыуаҡ ултыртылған. Шулай уҡ йыл һайын урамдарға күсереп йөрөтмәле сәскәләр менән декоратив көршәктәр ҡуйыла. Өфөнөң 450 йыллығына "Родина" кинотеатры, "Башҡортостан" дәүләт концерт залы һәм М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры эргәһендә ландшафт дизайны элементтары менән йәйге скверҙар барлыҡҡа килде. Октябрь һәм Салауат Юлаев проспекттары буйлап, шулай уҡ Ғафури скверында, Рудольф Нуриев урамында сәскә түтәлдәре булдырылған.

✓Яңыраҡ Өфөлә Бельгия сәйәхәтсеһе Клод Бруир булып китте. Ул велосипедта Брюссель ҡалаһынан Шанхайға улына ҡунаҡҡа китеп бара. Европаны үтеп, Рәсәйгә килеп еткән бельгий кешеһе артабан Ҡаҙағстан аша Ҡытайға сыҡмаҡсы. Шулай итеп, 19 аҙнала 12 мең километр уҙып, 31 августа Шанхайға барып етмәксе ул. Өфөлә ул "Мең велосипедсы көнө"ндә ҡатнашҡан. Йәнә ул ҡурайсы Азат Биксурин менән осраша. Музыкант ҡунаҡ алдында ҡурай яһап, оҫталыҡ дәресе үткәрә һәм сәйәхәтсегә бер ҡурайын бүләк тә итә. Шул рәүешле махсус һауытта башҡорт ҡурайы Ҡытайға китте.

✓Башҡортостан фехтовальщиктары Минскиҙа Союз дәүләтенең асыҡ чемпионатында команда ярыштарында бер юлы 6 миҙал яуланы. Рәсәй командалары составында Аделина Заһиҙуллина һәм Анастасия Иванова - алтын, Аделина Бикбулатова бронза миҙалдар алды, тип хәбәр итте республиканың спорт министры Руслан Хәбибов. Икенсе һәм өсөнсө урындарҙы, шулай уҡ командалар составында, Тимур Сафин, Егор Баранников һәм Искәндәр Булатов яуланы.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Һатыуға тыйылған БАД-тарҙы рекламалаған сайттар суд ҡарары булмайынса ла ябыласаҡ. "Көнөнә өс тапҡыр ошо тамсыларҙы эс, сир белмәйенсә йөҙгәсә йәшәрһең" тип йөрөүселәрҙең дә эшмәкәрлегенә сик ҡуйыласаҡ.*



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Ҡуян ябалағы

**(Белая сова)**



Көньяҡ Уралдың далалы һәм урманлы далалы райондарында ҡышлаусы һирәк ҡош. Ҡайһы бер йылдарҙа ҡуян ябалағы республикала күпләп осрай, был уларҙың сиктәш төбәктәрҙән осоп килеүе менән бәйле. Мәсәлән, 1911-1912, 1926-1927 йылдарҙың йәйендә ғалимдар тап ошондай осраҡтарҙы теркәгән. Ҡуян ябалағы ҡалаларға ла осоп килә. 1959 йылда Өфөнөң Аксаков урамындағы 4-се йорттоң мейесе мөрйәһендә ҡуян ябалағын тоталар. Бөгөнгә көндә уның ҡарасҡыһы Өфө фән һәм технологиялар университетының зоология музейында һаҡлана.

Эре ҡош. Йәйелгән килеш ҡанаты 1,5 метр киңлеккә етә. Оло ата ҡоштар аҡ төҫтә, инәһе һәм йәш ҡоштарҙың ҡара ҡауырйәҙы бар. "Ҡолаҡ"тары юҡ, күҙҙәре - һары. Енел оса.

Тундра зонаһында ерҙә оя ҡора. Поляр төн тыуғас та көньяҡҡараҡ күсә, шуға ҡышын уны илдең бөтөн ерҙәрендә лә күрергә була. Тәүлек әйләнәһенә әүҙем. Ағастарға ҡунмай, уны ерҙә йәки кәбәндәрҙә ултырғанын күҙәтергә мөмкин.

## Һомай, һаҡалтай ябалаҡ

**(Бородатая неясыть)**



Эре, ҙур башлы ябалаҡ, күгелйем-ҡара төҫтә. Һары күҙҙәрен ағас олонондағы дуңғәләктәргә оҡшаш ҡара түңәрәктәр ҡаймалаған. Суҡышының аҫҡы яғында ҡара тап бар, уны "һаҡал" тип йөрөтәләр. Кисен һәм төнөн һунар итә. Тауышы матурлығы һәм көсө йәһәтенән өкөнөкөнән ҡалышмай, "вууу" тип ҡыҫҡырыуы алыҫҡа ишетелеп тора.

Һаҙлыҡтарҙа оя ҡора, әгәр ҙә туҡланыр өсөн ризыҡ бар икән, был төбәктә йыл әйләнәһенә йәшәй. Ҡарт ағастарҙың олононда оя ҡора.

Үҙе эре ҡош булһа ла, ваҡ кимереүселәр менән туҡлана.

Башҡортостанда 1990 йылдарҙан башлап теркәлгән, Борай, Күгәрсен, Баймаҡ райондарында осраған. Беҙ уны иһә Балаҡатай районында күрҙек. Оло ҡош бала ҡошто эйәртеп йөрөй ине. 2006 йылдың октябрендә Магнитогорск-Сибай тимер юлы буйында ултырғанын күрәләр.

Һаҡалтай ябалаҡ Башҡортостандың Ҡыҙыл китабына ингән.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ДЕПУТАТ АҢЛАТА

# ЗАКОНДЫ БЕЛ ҺӘМ КҮҘӘТ!

**Гәзит уҡыусылар иғтибарына яңы ҡабул ителгән һәм ҡабул ителәсәк законлар буйынса РФ Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Закир улы БАЙҒУСҠАРОВ аңлатма бирә.**



## Һалым ҡайтармаһы бар

**Дәүләттән сираттағы ярҙам: пенсионерҙар һәм балалы ғаиләләр өсөн һалым ташламалары ҡарала.**

Эшләмәгән пенсионерҙар дауалау өсөн һалымды кире ҡайтара алмай, сөнки пенсияға НДФЛ һалынмай. Күптәр пенсионерҙар һәм балалар өсөн дәүләттән 20 мең һум самаһы аҡса алыу мөмкинлеге тураһында белмәй. Законға ярашлы, ололарҙың эшләгән улы йәки ҡыҙы ата-әсәһе өсөн һалым ташламаһын алыу хоҡуғына эйә.

Быныһ өсөн тыуыу тураһында таныҡлыҡ (туғанлыҡты раҫлау өсөн), медицина учреждениеһында күрһәтелгән хеҙмәттәр тураһында белешмә, медицина препараттарын һатып алыу өсөн рецепт, чектар кәрәк. Бөгөнгә 150 мең һумдан иң ҙур ташлама күләме 19 500 һум тәшкил итә. Ҡиммәтле дауалау өсөн (эндопротезлау, онкология) тулы сумманың 13 проценты, хатта ул 150 меңдән артһа ла, ҡайтарыла.

Шул уҡ тәртип менән 18 йәшкә тиклемге балалар (әгәр ҙә улар көндөҙгө уҡыу формаһында белем алһа, 24 йәшкә тиклем) өсөн түләнгән һалымдарҙы ла кире ҡайтарырға була.

Документтарҙы онлайн тапшырыу мөмкинлеге бар. Быныһ өсөн һалым түләүсенең рәсми кабинетында теркәлеп, шәхси пароль алырға кәрәк. Артабан "һалым ташламаһын алыу" бүлегенә инергә һәм инструкциялар буйынса онлайн тапшырырға мөмкин. Шулай уҡ 3-НДФЛ декларацияһын тултырып, документтарҙың төп нөсхәләре менән Федераль һалым хеҙмәтенә шәхсән мөрәжәғәт итергә лә була.

## Хәүефһеҙ түгелдәр

**Һуңғы йылдарҙа бер ниндәй контролһеҙ БАД-тар (биологик әүҙем өҫтәмәләр) күпләп һатыла. Ауыҙ һыуын ҡоротоп маҡталған дарыу төймәләре, ирмәк һауыттағы шыйыҡсалар бар сирҙәрҙе еңәсәк, тауҙарҙы аҡтарырҙай көс-ҡеүәт бирәсәк, тип ышандыралар.**

Белгестәр хәүефһеҙ тойолған БАД-тарҙың күңелһеҙ эҙемтәләргә илтеүе хаҡында туктауһыҙ киҫәтә, тейешле контроль булмаһа, халыҡ һаулығына етди хәүеф янай, тип саң ҡаға килде. Ниһайәт, уларҙы ишеттеләр!

Ошо көндәрҙә Рәсәй Дәүләт Думаһы биологик актив өҫтәмәләрҙең сифат критерийҙарын билдәләү тураһында закон ҡабул итте. Документҡа Рәсәй Президенты В.Путин ҡул ҡуйҙы.

Законға ярашлы, 2025 йылдың 1 сентябренән БАД-тарҙың сифат критерийҙарын, шулай уҡ уларҙы ҡулланыу һәм теркәү үҙенсәлектәрен Хөкүмәт билдәләйәсәк. Был өҫтәмәләрҙе һаулыҡ өсөн хәүефле матдәләр, мәсәлән, пестицидтар, агрохимикаттар, мал аҙығы өҫтәмәләре һәм дарыуҙарҙың айырым төрҙәре ярҙамында әҙерләргә ярамай. БАД-тар һәм уларҙы ҡулланыу буйынса күрһәтмәләр исемлеге барлыҡҡа киләсәк. Уны диагнозға ҡарап ҡына ҡулланырға мөмкин буласаҡ. Бынан ары табиптар сифат һәм хәүефһеҙлек талаптарына яуап биргән биологик актив өҫтәмәләрҙе генә тәғәйенләй аласаҡ.

Һатыуға тыйылған БАД-тарҙы рекламалаған сайттар суд ҡарары булмайынса ла тиҙ генә ябыласаҡ. Таныш-тоноштар араһында "көнөнә өс тапҡыр ошо тамсыларҙы эс, сир белмәйенсә йөҙгәсә йәшәрһең" тип йөрөүселәрҙең дә эшмәкәрлегенә сик ҡуйыласаҡ.

## Мутлашыусыларға ҡаршы

**Граждандарҙы интернет, телефон аша аҡса урлаусыларҙан яҡлауға йүнәлтелгән ике федераль закон ҡабул ителде. Ҡануниәттәге был үҙгәрештәр мутлашыусыларға һәм уларға ярҙам итеүселәргә ҡарата енәйәт яуаплылығын көсәйтә.**

Мутлашыусылар банк иҫәптәрен енәйәт схемаларында фаш итмәҫкә тырыша. Шуға күрә улар дроппер, йәғни аралашсы ҡуллана. Дропперҙар үҙ исемендәге банк картаһы йәки электрон аҡса янсығы тураһындағы мәғлүмәтте мутлашыусыларға һата. Ә мутлашыусылар төрлө алдау схемаларын ҡулланып, ябай кешеләрҙән дропперҙың иҫәбенә аҡса күсертә. Алданыусы полицияға мөрәжәғәт иткәс, аралашсының шәхесе асыҡлана, әммә улар енәйәтселәр тураһында бер нәмә лә әйтә алмай.Мутлашыусылар шул рәүешле эҙ яҙлыҡтара.

РФ Енәйәт кодексының 187-се статьяһына индерелгән үҙгәрештәргә ярашлы, шәхси банк картаһын мутлашыусыға һатыусы, улар күрһәтмәһе буйынса банк операцияһы атҡарыусы 3 йылға тиклем иркенән мәхрүм ителеүе ихтимал. Ә бына дропперҙар йәлеп итеү, банк картаһы мәғлүмәтен һатып алыу, уларҙы артабан икенсе кешегә тапшырыу, банк операциялары атҡарыу өсөн 6 йылға тиклем иректән мәхрүм итеү язаһы ҡарала.

Йыш ҡына дропперҙар сифатында бәлиғ булмағандарҙың ҡатнашыуын иҫәпкә алып, РФ Граждандар кодексының 846-сы статьяһына ла үҙгәрештәр индерелде. Хәҙер балаларға банк картаһы тик ата-әсәләренең яҙма ризалығы булған осраҡта ғына бирелә. Был саралар балаларҙы законһыҙ эшмәкәрлеккә йәлеп итеүҙән һаҡларға, шулай уҡ ата-әсәләргә балаларының финанс операцияларын контролдә тоторға мөмкинлек бирәсәк.

Ҡабул ителгән законлар граждандарҙың аҡсаһын яҡлауға һәм мутлашыу өсөн яуаплылыҡты көсәйтеүгә йүнәлтелгән. Бәлиғ булмағандарҙы енәйәтселәр ҡоралына әүерелмәҫкә һәм электрон түләүҙәр өлкәһендә хәүефһеҙлек тәьмин итергә ярҙам итәсәк.

## Аҙ килемле ғаиләләргә

**Ҡайһы берҙә осрашыуҙарҙа "Депутаттар балалы ғаиләләргә ярҙам итеү сараларын ("Әсәлек капиталы", йөкләлөк буйынса айлыҡ түләүҙәр, торлаҡ һатып алыуға 450 мең һум күләмендә бушлай ярҙам, балаларға пособиелар һ.б.) бик күп ҡабул итте. Шул рәүешле кешеләрҙе эшләргә түгел, ә дәүләт иҫәбенә йәшәргә өйрәттте", тип тә әйтәләр. Был хаҡта башлыса оло йәштәгеләр һөйләй, сөнки элек бындай түләүҙәр булманы, һәр кем ғаиләһен тик үҙе тәьмин итте.**

Яңыраҡ халыҡ көнитмешен еңеләйткән тағы бер закон ҡабул иттек. 18 йәшкә тиклем ике һәм унан күберәк балаһы булғандарға (бала көндөҙгө уҡыу формаһы буйынса белем алһа - 23 йәшкә тиклем) яңы түләүҙәр булдырылды. Эшләүсе ата-әсәләрҙең (уллыҡҡа алыусыларҙың, опекундарҙың, попечителдәрҙең) 2025 йылдағы дөйөм килеменән тотолған физик шәхестәрҙең килеменә һалымдар (артабан - НДФЛ) түләнгән һәм ғаиләнең йән башына уртаса килеме төбәктә билдәләнгән йәшәү минимумынан 1,5 тапҡырға артмаған осраҡта түләү алыуға хоҡуғы буласаҡ. Бындай ата-әсәләргә 2025 йыл өсөн түләнгән 13 процент НДФЛ-дың 7 проценты кире ҡайтарыла.

Миҫал өсөн ике бәлиғ булмаған бала (йәки береһе студент) үҫтереүсе ғаиләне алайыҡ. 2025 йылда ата-әсәнең йәки береһененең уртаҡ килеме 1 миллион һум тәшкил итә, ти. Уларҙан йылына 13 процент НДФЛ тотола, был - 130 мең һум. 2025 йылда Башҡортостанда йәшәү минимумы 15 782 һум күләмендә билдәләнгән. 1,5 тапҡырға ҙурыраҡ күләм был ғаиләнең һәр ағзаһы өсөн 23 673 һум тәшкил итә. Тимәк, уларға 70 мең һумды кире ҡайтарырға мөмкин. Сөнки ғаилә ағзаһына айлыҡ килем 1,5 тапҡыр йәшәү минимумынан түбәнерәк (ғаилә килеме айына 83 333 һум тәшкил итә, һәр береһенә - 20 833 һум). Һөҙөмтәлә, улар 2025 йылда НДФЛ-ды 13 процент түгел, ә 6 процент түләйәсәк.

Был ярҙам менән түбән эш хаҡы арҡаһында ярҙамға мохтаждар файҙалана ала. Ата-әсәләрҙең йәки уларҙың береһе рәсми рәүештә эшләүе мотлаҡ. Закон 2026 йылдың 1 ғинуарынан көсөнә инә.

**Гүзәл БИКМӘТОВА**
**әҙерләне.**

✓ ***Күп кенә солоҡто айыу эшлектән сығара. Умарта ни тиклем юғарылыҡта эленеп тормаһын, тайыш табан өсҡә йылп итеп менеп китә лә, бал ҡорттарын үлтереп, бал ашарға керешә.***



"КИСКЕ ӨФӨ" ҠАМУСЫ

# СОЛОҠСОЛОҠ...

## башҡорттарҙың төп шөғөлдәренең береһе



**Бер мәл бал ҡорттары менән уғата ҡыҙыҡһынып киттем. Беренсенән, бал ҡорттары, солоҡ ағастары үҙҙәре үк миндә оло ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Икенсенән, бал ҡорттары тотоу иктисади йәһәттән дә бик файҙалы эшмәкәрлек.**

Тәрән тамырлы һәм бал ҡорттары оя ҡорған ағас солоҡ тип атала. Солоҡ ағасы тамырынан өсҡә ҡарай бер ярым йәки ике сажин самаһы оҙонлоҡта була. Башлыса, ҡарағай, имән, йүкә, ҡарама ағастары солоҡсолоҡ өсөн бик ҡулай була. Башҡортостанда мин бер юлы ике-өс солоҡ урынлашҡан мөһабәт ҡарағайҙарҙы осратҡаным булды. Солоҡ һүҙе, минең уйымса, йә сармат, йә славян һүҙе булырға тейеш. Был шөғөлдөң боронғолоғон дәүерҙәр аша беҙгә килеп еткән ҡулъяҙмалар иҫбат итә. Солоҡто һаҡлау тураһында Ярославтың һәм Изъяславтың Новгород халҡы өсөн ҡабул иткән 1016 йылғы законы ла күп нәмә тураһында һөйләй. Шул законға ярашлы, солоҡто урлау оло гәйеп һаналған һәм уның өсөн тейешле язаһы ла булған. Әйткәндәй, батша Алексий Михаил улы ла 10-сы бүлектең 218, 219 статьяларында солоҡто һаҡлау буйынса үҙ ҡарарҙарын индергән. Башҡорттар араһында бишәр йөҙ, йә иһә меңәр солоғо булған ғаиләләр бихисап. Башҡорттар ҙа үҙҙәренең солоҡтарын күҙ ҡараһы һымаҡ һаҡлай.

Солоҡсолоҡ менән шөғөлләнеү өсөн башҡорттар әллә ни күп көс һалмай. Иң мөһиме - таҙа һәм ҡоро солоҡтарҙың ваҡытында әҙер булыуы. Ҡош-ҡорттан, хайуандарҙан солоҡтарҙы һаҡлау кәрәк, шулай ҙа. Күп кенә солоҡто айыу эшлектән сығара. Умарта ни тиклем юғарылыҡта эленеп тормаһын, тайыш табан өсҡә йылп итеп менеп китә лә, бал ҡорттарын үлтереп, бал ашарға керешә. Әммә тәмле тамаҡ та бындай осраҡта ҙур зыян күрә: бал ҡорттарынан аяуһыҙ тешләнеп, айыуҙың бөтә тәне сей йәрәхәттәр менән тула. Башҡорттар һөйләүенсә, ҡайһы саҡ ағас башына бал ашарға үрмәләгән айыуға шул тиклем күп бал ҡорттары һырый, хатта бахыр януар тиҙ генә аҫҡа төшөп, үкерә-үкерә ерҙә аунарға, йә иһә йылғаға сумырға мәжбүр. Бал ҡорттарынан шул рәүешле ҡотолғандан һуң, айыу йәнә ағасҡа үрмәләй һәм балды ашап бөтмәйенсә, солоҡто ташлап китмәй. Уның был мутлығын солоҡтоң хужалары ғына туҡтата ала - ғәҙәттә, бур айыуҙы үлтерергә тура килә.

Айыуҙы үлтереү өсөн башҡорттар әллә күпме ысулдар уйлап тапҡан. Мин был ысулдарҙың иң билдәлеләрен генә һанап үтеп китәм:

- Солоғо булған ағас янына айыу эйәләнә, ағастың иң башына йыуан төпһә бәйләп элеп ҡуялар - өсҡә менеп барған айыу, ҡамасаулаған төпһәне бер ҡыйынлыҡһыҙ ситкә этәреп ебәрә һәм йәнә алға ынтылырға маташа. Тик төпһә, айыу уны нисек этеп ебәргән булһа, бәүелеп, шулай уҡ кире урынына барып тора. Айыу, асыуланып, төпһәне йәнә ситкә этәреп ебәрә. Шул уҡ көс менән кире әйләнеп ҡайтҡан төпһә айыуға тейә һәм уның асыуын йәнә ҡабарта. Йыуан төпһә барыбер айыуҙы ергә йығып төшөрә һәм, ғәҙәттә, тәмле-тамаҡ алған йәрәхәттәренән йән бирә. Йәки башҡорттар ергә ағас ҡаҙыҡтар ҡағып сыға һәм уларҙың өҫтөнә ҡолап төшкән айыу шунда уҡ йән бирә.

- Солоҡло ағасҡа менгән сакта айыуға алдан ослап ҡуйылған ағас таяҡтар ҡамасауламай. Бал ашап туйған айыу аҫҡа төшә башлай һәм аяҡтары менән осланған ағас таяҡтарға эләгеп, йәрәхәтләнә. Йәрәхәттәрҙән ҡанға батҡан, йә иһә ауыртыуҙарға түҙә алмай, өҫтән төшкән айыу ахыр сиктә йән бирә.

- Ҡағылыу менән үҙенән-үҙе атҡан ҡулайламалар ҙа бал яратыусы айыуҙар өсөн хәүеф тыуҙыра. Ләкин был ҡулайламалар ҡайһы саҡ йәҙә ата һәм хәйләкәр айыу, эштең ниҙә икәнлеген аңлап ҡалып, артабан һаҡлыҡ менән генә йөрөргә тырыша.

Солоҡҡа шулай уҡ тумырҡалар ҙа ҙур зыян килтерә. Башҡортостанда бер бөжәк балды ғына түгел, бал ҡорттарын да бергә ашай. Немец телендә был бөжәк горниссе тип атала. Был бөжәктәрҙең башында бәләкәй генә мөгөҙҙәр ҙә бар. Горниссе нимәһе менәндер һағыҙаҡтарға ла оҡшаш, ләкин улар күпкә ҙурыраҡ. Башҡорттар һөйләүенсә, был бөжәктәр атты ла үлтерә ала (Автор күгәүендәрҙе күҙ уңында тотҡандыр ахыры - тәрж.) Бал ҡорттарына уларҙың бигерәк тә зыяны ҙур. Был бөжәктәрҙе юҡ итер өсөн ямғырлы төндә ояларын табып, унда эҫе һыу ҡойорға йә яндырырға кәрәк. Кешегә лә зыяны бар был бөжәктең - ул тешләгән урын шешеп сыға һәм оҙаҡ ваҡыт уңалмай. Улар үҙҙәренең ояларын стена буйына йә түшәм аҫтында яһауһан, әммә күпселеге бал ҡорттарын ҡыуып сығарып, солоҡтарҙа, ағас ҡыуыштарында йәшәй. Быйыл йәй улар минең дачамда торған ике солоғомдо эштән сығарҙы.

Башҡорттар балды һәм балауыҙҙы ҡалаға, йәрминкәләргә алып барып һатыусан. Башҡортостандың үҙенән генә меңәрләгән бот самаһы бал ситкә һатылып ебәреләләр, минеңсә. Башҡорттар балдан эсемлек тә яһай: уның өсөн улар ҡороттан әсеткә эшләй һәм уның өҫтөнә утта йылытылған бал ҡоя. Был масса тиҙ арала әсеп тә ҡуя.

**Петр РЫЧКОВ.**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



# БАШҠОРТТАР

## Һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

Шулай уҡ башҡорттарҙа XVIII быуат һуңында, XIX быуатта тикшеренеүселәр яҙып ҡалдырған айыуға һунарҙың тағы бер ҡыҙыҡлы ысулы күҙәтелә. Уны П.С. Паллас былай тип һүрәтләй: "Ҡайһы берәүҙәр оҙон ағасҡа йыуан арҡандар менән таҡта бәйләп ҡуя. Ул сүбәк менән ныҡлап нығытыла. Айыуға унда ултырып бал ашау унайлы күренә һәм ул, тәү сиратта, таҡта менән ботаҡ бергә бәйләнгән сүбәкте өҙөүҙе тейешле таба. Быны эшләү менән таҡта эленгән ботаҡ ағастан айырылып, ботаҡҡа бәйләнгән арҡанда бәүелә башлаясаҡ.



Әгәр айыу шунда уҡ ҡоламаһа, уны барыбер ике хәүеф һағалаясаҡ: йә бейеклектән ҡолап төшөү, йә тынис ҡына ултырыу. Беренсе осраҡ өсөн ағас аҫтында осло ҡаҙыҡтар ҡағылған, икенсе осраҡта инде айыуҙы уҡтан йәки икенсе ҡоралдан атып үлтергәндәр" **(һүрәт)**.

XIX быуаттың икенсе яртыһынан башҡорттар араһында тимер тәрилкә (тарелочный) ҡапҡандар киң таралыу ала. Улар хайуандың, йәнлектең төрөнә ҡарап, төрлө ҙурлыҡта һәм төрлө ҡеүәттә була.

Яланлы көньяҡ Башҡортостанда баҙарҙарҙа тимер тәрилкә ҡапҡандар менән бер рәттән, йомран тотоу өсөн айырым тоҙаҡтар һатыла. Улар тимерҙән эшләнә һәм диаметры 7-8 сантиметр булған торбаны хәтерләтә. Эске яҡтан йыуан тимерсыбыҡтан алты, остары эскә ҡаратып бөгөлгән ырғаҡ нығытыла. Бындай тоҙаҡтарҙы йомран өңөнөң ауыҙына урынлаштыралар. Торбаға ингән йомран ырғаҡтарға эләгеп, унан сыға алмаған.

Ау ярҙамында бары тик ҡуяндарҙы аулағандар. Был ысул төрлө райондарҙа билдәле булһа ла, уны һирәк ҡулланғандар.

Йәнлектәрҙе, хайуандарҙы башҡорттар уҡтан йәки икенсе ҡоралдан атып та алғандар. XIX быуатҡа тиклем йәйә һәм уҡ башҡорттарҙың иң киң таралған һунар ҡоралы булып тора. Йәйә ике төрлө була: ябай ян һәм ҡатмарлы әҙернә. Ябай ян ҡайын йәки ҡараманан эшләнә, ҡатмарлыһы ике ярты өлөштә: ҡайын һәм шыршы ағасынан, тыштан ҡайын туҙы йәбештереп яһала. Кереш киндер бауынан йәки тарамыштарҙан эшләнә. Башҡорт йәйәләре ҙур булмай (1,5 метр оҙонлоҡта) һәм бик ныҡ бөгөлмәй. Һунар уҡтары төрлө төрҙә була. Улар араһында ябай ағастан һәм осло яғы бер аҙ киңәйтеп һәм яҫыланып эшләнгәндәре, уҡ башаҡтары йыуанайтып эшләнгәндәре бар. Улар тупаҡай тип атала һәм ҡайһы бер ваҡытта уларға һөйәк атлама (обойма) ултыртыла.

(Дауамы бар).

ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...

# АҪАБАЛЫҠ ҺӘР САҠ ҺАҠЛАНҒАН

## Өфө ҡәлғәһе тарихы буйынса тағы бер сығанаҡ



Мертваго, XVIII быуаттың икенсе яртыһында төбәкте колониялаштырыу башҡорттарҙың мәнфәғәтен боҙоп алып барыла, тип һыҙыҡ өҫтөнә ала. Айырым алғанда, дворяндар һәм крәҫтиәндәр ер һатып алғанда килешеүҙәрҙә "сирек һәм дисәтинәләр иҫәбе менән түгел, ә ул ҡәлғәләрҙә билдәләнгән межалар һәм тәбиғи ыҙандар буйынса" тәҙөүгә өлгәшә. Йәғни ер бүлеүгә документтар тәҙөгәндә анығ майҙан күрһәтелмәй. Ә был күсеп килеүселәрҙең ерҙе артығы менән биләүенә мөмкинлек аса. Бер үк ваҡытта, улар төбәктә игенселекте үҫтереүгә булышлыҡ итте, тигән һылтау менән ерҙе һатып алыусыларҙың колониялаштырыу процесы аҡлана, ти ул.

Мертвагоның Өфө ҡәлғәһенә 1584-1598 йылдар араһында нигеҙ һалыныуы тураһындағы һығымтаһы нигеҙле күренә. Был танылған ғалим-академиктар П.П. Пекарский менән М.Н. Тихомировтың хеҙмәттәрендә лә раҫлау таба, улар 1586 йылды Өфөнөң башланғыс датаһы тип атай. Авторҙың, Өфө ҡәлғәһе Мең улысы башҡорттарының ризалығы менән уларҙың аҫаба ерендә төҙөлдө, тигән күрһәтмәһе бик мөһим. Был материалдарҙа, батша хөкүмәте сәйәсәтенең яңы этабы 1730 йылдан һуң башлана, тип телгә алына. Күрәһең, автор яңы осорҙоң башланыуын 1735 йылда Ырымбур экспедицияһының эшмәкәрлеге һәм 1736 йылдың 11 февраленән указ сығарыу менән бәйләй. Ул бында колониялаштырыу, ерҙе ирекле һатыу-һатып алыуҙы законлаштырыу, крепостар, заводтарға нигеҙ һалыу, хәрби хеҙмәткәрҙәр һәм крәҫтиәндәр күбәйеүен күҙ уңында тота. Шул уҡ ваҡытта, төп халыҡтың ерҙәрен тартып алыу сәйәсәте үткәреүгә ҡарамаҫтан, хөкүмәт XVIII быуаттың икенсе яртыһында башҡорттарҙың аҫаба хоҡуғын раҫланы, тип бик ғәҙел билдәләй.

**Ирек АҠМАНОВ,**
**тарих фәндәре докторы, профессор.**
**(Дауамы. Башы 22-се һанда).**

*✓ Олатайым да бик ышаныслы, өләсәйемә тоғро, ярҙамсыл ир булды. Әсмәне, тартманы. Кәрәк булһа, өләсәйемдең өйгә ҡайтыуын көтмәне, әйберен үҙе ямап ала, иҙәндәрен һөртөп, ашарға бешереп көтә ине.*



**Һәр яҙыусының үҙ тематикаһы, йөҙгән үҙ даръяһы, гиҙгән үҙ биләмәһе булыусан. Мәҫәлән, Ноғман Мусин тигәндә - ҡалын-ҡалын урмандарҙы, Рәшит Солтангәрәев тигәндә - ҡара алтын табыусыларҙы, Һәҙиә Дәүләтшина, Зәйнәб Биишева тигәндә - башҡорт ҡатын-ҡыҙының үткәндәге еңел булмаған тормошон күҙ алдына килтерәбеҙ, Ғәли Ибраһимовтың, Булат Рафиҡовтың, Әхиәр Хәкимовтың исемдәрен ишеткәндә - тарих сыңдары, һөңгө, ҡылыс, ат тояҡтары тауыштары ишетелә башлай…**
**Яныбай Хамматов, тигәндә ыңғайы бер күҙ алдына мәғдәнсе, ете ҡат ер аҫтындағы таш, ҡом ҡатламдарынан алтын, көмөш, баҡыр эҙләүсе рудасы, старатель образы күҙ алдына баҫа. Яҙыусы үҙе лә ғүмере буйына архивтарҙа, боронғо яҙмалар һаҡланған китапханаларҙа, шул рудасы, шул старатель һымаҡ эҙләнеп, халҡыбыҙ тарихының, аҫыл заттарыбыҙға бәйле сығанаҡтарҙың иң-иңдәрен табып, уларҙы романдар, повестар рәүешенә килтереп, халҡыбыҙға бүләк итте. Бына уның милләтебеҙгә килтергән бүләктәре:**

*"Бөртөкләп йыйыла алтын" романы;*
*"Аҡман-тоҡман" романы;*
*"Йәшенле йәй" романы;*
*"Юрғашты" романы;*
*"Руда" романы;*
*"Йондоҙҙар нисек ҡабына" романы;*
*"Төньяҡ амурҙары" романы;*
*"Тыуған көн" романы;*
*"Башҡорттар китте һуғышҡа" романы;*
*"Комбриг Мортазин" романы;*
*"Ҡара яу" романы;*
*"Ағиҙел Иҙелгә ҡоя" романы;*
*"Салауат" романы;*
*"Һырдаръя" романы;*
*"Башҡорт ханы" романы;*
*"Ҡаһарманлыҡ" повесы;*
*"Иҙел башы" романы;*
*"Хәсрәтле бала саҡ" автобиографик әҫәре;*
*"Тормош һабаҡтары" автобиографик әҫәре;*
*"Арҡайым" повесть-фаразы, һ.б.*

**Ағымдағы йыл арҙаҡлы ил ағаһы, һуғыш ветераны, егермегә яҡын тарихи романдар яҙып ҡалдырған күренекле башҡорт яҙыусыһы, билдәле йәмәғәт эшмәкәре, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Яныбай Хамматовтың тыуыуына 100 йыл тулыуы менән дә үтә лә әһәмиәтле. Әҙиптең ейәнсәре Алһыу Әнүәр ҡыҙы менән ҡорған әңгәмәлә Яныбай Хамматовтың рухи мираҫын вариҫтарына тапшырған олатай булараҡ тәржемәи хәленә туҡталырға тырыштыҡ.**

# ЯУАПЛЫЛЫҠ ТА, ҒОРУРЛЫҠ ТА…

**Алһыу Әнүәр ҡыҙы, олатайығыҙ, күренекле башҡорт яҙыусыһы Яныбай Хамматовтың тыуыуына 100 йыл тулыуҙы уның вариҫтары нисек ҡаршылай, шәхсән үҙ тормошоңда өлгәшкән иң ҙур уңышың ниндәй тип иҫәпләйһең?**

- Беҙҙең ғаилә өсөн был юбилей йылы - бик яуаплы һәм бик мөһим осор. Юбилейға әҙерлек биш йыл элек башланды. Иң ҙур эш - олатайымдың әсәйем баҫырға әҙерләгән автобиографик әҫәре. Әйтерһең дә, әсәйем үҙенең иртә китеүен һиҙеп, бөтә эштәрен ташлап, олатайымдың китабын эшкәртә башланы, бик ашығып эшләне һәм 2021 йылдың уртаһында, барыһын да әҙерләп, нәшриәткә тапшырҙы. Бер нисә ай үткәс, яҡты донъянан китте. Был китап Яныбай Хамматовтың 100 йыллығына сығарылды.

Мин олатайымдың архивтарында материалдар эҙләнем, иҫке видео, аудиотаҫмаларҙы табып, заманса компьютер аша үткәрергә тырыштым, фотоларын йыйып, компьютерға күсерҙем, олатайымдың әлеге көндәрҙә Түбәнге Кама ҡалаһында йәшәгән һеңлеһенә барып, иҫтәлектәрен йыйҙыҡ. Белорет ҡалаһында урынлашҡан Яныбай Хамматов исемен йөрөткән Башҡорт ҡала гимназияһында кабинет-музей асыу өсөн әҙерлек тә бер нисә йыл элек башланды. Музей асыу идеяһын да әсәйем күтәргәйне.

Әлбиттә, бөтә был эштәр бик үк күҙгә күренмәгән һымаҡ, ләкин эшләп тә йөрөгәс - мин үҙем табип, баш табип урынбаҫары булараҡ, сәғәт 8-ән 17-гә тиклем эштәмен - барыһына ла ваҡыт етмәүе һиҙелә. Шулай булһа ла, төрлө әмәлдәрен табып, өлгөрөргә тырышам - төндәр бар бит әле. Ярҙам ҡулын һуҙған кешеләр ҙә булды, мин уларға бик рәхмәтлемен.

Ҡыҙҙарым да минең ярҙамсыларым. Өлкән ҡыҙым Әйшә Мәскәүҙә уҡып йөрөһә лә, олатаһының көндәлектәренән өҙөктәр ятлап, видео төшөрҙө, бәләкәй ҡыҙым йырлырға ярата - олатаһының яратҡан йырҙарын "Илсе Ғайса" менән "Һандуғас"ты өйрәнеп сығыш яһай. Милли әҙәбиәт музейы өсөн "Аҡлан" ҡасабаһында урынлашҡан дачаның макетын эшләгәндә лә ҡыҙҙарым ярҙам итте - бер ай эсендә эшләп бөтөрҙөк.

Яныбай Хамматов ейәнсәре булыу…



**Олатайың Яныбай Хамматовҡа ҡайһы сифаттарың менән оҡшағанһың йә оҡшарға тырышаһың?**

- Олатайым бик әҙәпле, батыр йөрәкле, тура һүҙле, намыҫлы, уңған, маҡсатына өлгәшә белгән шәхес ине. Эшһөйәр, йыйнаҡ, тәртип яратҡан олатай булды. Биргән вәғәҙәһен үтәй, бер ваҡытта ла һуңламай, үҙенә ҡарата талапсан ине. Миненсә, миңә шул кимәлгә үҫергә лә үҫергә әле.

**Башҡорт яҙыусыһы Яныбай Хамматовтың рухи эстафетаһын, туған телен, һеҙ, уның вариҫтары, лайыҡлы дауам итәһегеҙ. Нисек уйлайһың, бындай тоғролоҡтоң асылы нимәлә?**

- Ҡайһы саҡта, икенсе бер яҙыусыларҙың ейән-ейәнсәрҙәренә ҡарап, олатайым менән булған был көслө бәйләнештең сәбәбен аңларға тырышам. Әсәйем берҙән-бер ҡыҙы ине, мин - берҙән-бер ейәнсәре. Беҙҙең ғаилә бәләкәй булһа ла, олатайымдың шатлыҡтарын һәм ауырлыҡтарын уртаҡлашып йәшәнек. Ул бик асыҡ кеше ине, ҡатынына, ғаиләһенә йөрәген асып, бар хистәрен һөйләп бирә ине. Шул мөхиттә үҫеп, олатайым менән бала саҡтан яҡын аралашып, әлбиттә уның васыяттарын үтәүҙе үҙемдең бурысым тип алғанмын. Бәлки, ағай-апайҙарым булһа, бер-беребеҙгә һылтанып, ышанып, олатайым менән бәйләнеш өҙөлөр ине. Олатайым минең менән бәләкәйҙән үк күп шөғөлләнде - әкиәттәр һөйләне, шахмат, шашка уйнатты, дачала йәшәгәндә күп нәмәгә өйрәтте - бесән сабырға, мейес яғырға, утын бысырға, урманда йөрөгәндә ҡоштар тауышын танырға, хатта бадминтон уйнарға ла ул өйрәтте. Бик хәстәрле олатай булды - мәктәпкә оҙатып, ҡаршы ала ине. Хатта мин университетта уҡыған саҡта, аяҡтары һыҙлаһа ла, таяҡҡа таянып булһа ла, мин һуңлап ҡайтҡанда, туҡталышҡа барып, ҡаршы ала ине. Әлбиттә, былар онотоорлоҡ түгел.

**Фидания өләсәйең менән әсәйең Гүзәл олатайығыҙ рухына үтә лә тоғро булдылар, был бигерәк тә милли рух мәсьәләһенә ҡағыла. Быны тик иргә һәм атайға ҡарата булған ихтирам һәм һөйөү хисе менән генә аңлатып буламы?**

- Миненсә, олатайымдың ниндәйҙер көслө энергетикаһы булғандыр, был көс яҡын кешеләренә күсеп, уларҙы илһамландырып торғандыр. Өләсәйем олатайымдың күпселек романдарын рус теленә тәржемә иткән, ул эшләгән подстрочниктарҙы Мәскәү әҙәбиәтселәре эшкәртеп, рус телендә баҫтыралар. "Мине аңлаған берҙән-бер кеше - ул минең ҡатыным. Мин уның менән бөтә нәмә хаҡында ла уртаҡлашам, бөтәһе менән дә бүлешәм, унан минең бер ниндәй ҙә серем юҡ. Ул аҡыллы кәңәшсем дә. Ҡайһы саҡ, мин унһыҙ яҙыусы була алмаҫ инем, тип тә уйлап ҡуям. Ҡатыным - минең намыҫым", - тип яҙа олатай көндәлегендә.

Олатайым да бик ышаныслы, өләсәйемә тоғро, ярҙамсыл ир булды. Эсмәне, тартманы. Кәрәк булһа, өләсәйемдең өйгә ҡайтыуын көтмәне, әйберен үҙе ямап ала, иҙәндәрен һөртөп, ашарға бешереп көтә ине. Хатта ҡамыр баҫып, һалма киҫә торғайны.

**✓ Олатай ысын көрәшсе ине - ҡыҙыу һәм ҡайнар йөрәкле, дөрөҫлөктө яҡлап, дәрәжәләргә иғтибар итмәй, фекерен йәшермәй күҙгә бәреп әйтә ине. "Эсем боша" тигәнен йыш ҡына ишетә торғайным.**



Туған халҡына тоғролоғо, туған халҡы өсөн янып-көйөп йәшәүе, әлбиттә, ғаиләһенә лә йоғонто яһаны - өләсәйем яртылаш татар, яртылаш башҡорт булһа ла, татар телендә һөйләшһә лә, бар булмышы менән башҡорт рухлы булды. Башҡорттарҙы гел яҡлап йөрөнө. Ҡайһы саҡта ситтән ҡарағанда бик ҡыҙыҡ күренә ине. Бигерәк тә 90-сы йылдарҙағы сиктәр ҙә, телдәр ҙә асылған мәлдә, берәй сиратта торғанда башҡорттарҙы кемдер әрләгәнен ишетеп ҡалһа, һары сәсле, күк күҙле апайҙың саф татар телендә башҡорттарҙы яҡларға ташланыуы күптәрҙе аптырата ине.

**Беҙ, уҙған быуаттың һикһәненсе йылдарында әҙәби ижадҡа килгән йәш быуын, Яныбай ағайҙы үтә лә талапсан һәм тура һүҙле кеше итеп белдек. Уның был сифаттарын кисереүе һеҙгә ауыр булманымы?**

- Олатайымдың холҡо еңел түгел ине һәм ул шуны, ике йөҙләнеп, йәшереп йөрөмәне. Принципиаль һәм талапсан ине - башҡаларға ғына түгел, иң беренсе нәүбәттә - үҙенә ҡарата. Ундайҙар, әлбиттә, йыуаш булмай. Минән йыш ҡына: "Ғаиләлә берҙән-бер бала булғас, иркәләтеп үҫтергәндәрҙер һине?" - тип һорайҙар. Бер яҡтан ҡарағанда, ысынлап та, миңә иғтибар күп булды, ләкин икенсе яҡтан, олатайым да, өләсәйем дә бик талапсан булдылар. Тәртипкә булған талаптар бик юғары ине. Бала саҡта, миңә быны һатып алығыҙ, тегене алығыҙ, тигән уй башҡа ла килмәй ине. Уйынсыҡтарҙы, әйберҙәрҙе һаҡлап ҡулланырға, боҙмаҫҡа тырыштым. Олатайымдың иң яратмағаны - ижад иткәндә, эшләп ултырғанда бүлдереүҙәре. Шуны мин һәйбәт белә инем, шуға күрә, олатайым өҫтәл артында ултырғанда шып-шым йөрөнөм, хатта ишекте шығырҙатып асмаҫҡа тырыштым. Шул ғәҙәт әлеге көндә лә ҡалған - ғаиләлә берәй кем эшләп ултырғанда, имтихандарға әҙерләнгәндә, өйҙә тынлыҡ булырға тейеш.

**Психологтар саф күңелле, изге йөнле кешеләр үсал, талапсан булыусан, тиҙәр. Олатайыңдың нескәлеккә бирелгән сантименттарына шаһит булғаның иҫеңдәме?**

- Олатай ысын көрәшсе ине - ҡыҙыу һәм ҡайнар йөрәкле, дөрөҫлөктө яҡлап, дәрәжәләргә иғтибар итмәй, фекерен йәшермәй күҙгә бәреп әйтә ине. Шулай булыуына ҡарамаҫтан, балаларса ихлас, нескә күңелле, асыҡ йөрәкле, тойғоларға бирелеүсән ине, тиҙ тәшенкелеккә төшеп, ҡайһы саҡта юҡ өсөн дә өҙгөләнә торғайны. "Эсем боша" тигәнен йыш ҡына ишетә торғайным. Ә инде эҫ бошорғос нәмәләр йыш килеп сыға торғайны. Әҫәрҙәре гел ҡыйынлыҡ менән, төрлө кәртәләр аша үткәрелеп баҫылып сыға ине, шуға һәр берәһе өсөн ҡайғырып, борсолоп йөрөнө... Шатланһа, шатлана ине - шарҡылдап, үҙе әйтмешләй, эс тырнап, рәхәтләнеп көлә торғайны. Ҡыҙыҡ, йәнле итеп һөйләй торғайны - кешеләрҙеең ҡыланыштарын шәп итеп һүрәтләй белде. Артистлыҡ һәләте лә бар ине унда.

Үҙе эшһөйәр булғас, эшсән, белемгә ынтылған кешеләрҙе ныҡ ихтирам итте, уларға ҡулынан килгәнсе ярҙам итте. Талантлы кешеләрҙе ныҡ хөрмәт итте. Шуға күрәләр, көнләшеү тигән нәмә ят ине уға. Ҡәләмдәштәрҙең уңыштарына ихлас шатлана торғайны. Үҙе араҡы эсмәгәс, эсеп йөрөгән талантлы ҡәләмдәштәре, бигерәк тә йәш яҙыусылар өсөн бик ҡайғыра, йәлләй ине, әгәтләп тә, хатта: "Араҡы эсеп, талантыңды бөтөрәһең бит, яҙыр өсөн асыҡ баш кәрәк!"- тип әрләп тә ала ине.

**Егерме беренсе быуатта йәшәгән кеше булараҡ, олатайың яҙған әҫәрҙәрҙең заманға ярашлы әһәмиәтен һин нимәлә күрәһең, уларҙың көнүҙәк асылы нимәгә ҡайтып ҡала тип иҫәпләйһең?**

- Замандар үҙгәрһә лә, рухи хазиналар үҙгәрмәй - тыуған яғына, халҡына, тәбиғәтенә булған мөнәсәбәт мәңгелек. Тарихи романдар һәр саҡ кәрәк, тип уйлайым. "Көсөм бар саҡта тарихи романдар яҙыуҙан туҡтаһам, башҡорт халҡына хыянатсылыҡ ҡыласаҡмын. Минең бурыс - алыҫ үткәндәрҙе хәҙерге быуын кешеләренә кире ҡайтарыу...", - тип яҙҙы ул бы хаҡта.

Уның барлыҡ әҫәрҙәре лә үҙенсәлекле, һутлы, саф башҡорт телендә яҙылыуы менән дә ҡәҙерле.

Миненсә, был һорауға яуапты олатайым "Кара яу" романына инеш һүҙендә үҙе килтерә: "Алыҫ үткәндәрҙе өйрәнмәй-белмәй тороп, ғәзиз халҡыңдың ысын патриоты булыу мөмкин түгел икәнен һәр башҡорт аңлаһын, ҡанына һеңдерһен ине... "

**"Тәбиғәт балаларҙа ял итә, ейән-ейәнсәрҙәрҙә, бүләр-бүләсәрҙәрҙә йәшәй", тигән анлау бар. Ҡыҙҙарың Әйшә менән Нәйлә олатайың менән өләсәйеңдең ҡайһы сифаттарын ҡабатлай?**

- Икеһенең дә ижад эшенә һәләте бар - күберәк ҡул эштәре, һүрәт төшөрөү килеп сыға. Найлә олатайым, әсәйем һымаҡ йырларға ярата, гитарала уйнай. Әммә ижад эшен төп һөнәр итеп һайламаҫтар, тип уйлайым. Хобби булып ҡалыр. Әйшә ғилем менән мауыға, Найлә табип булам, ти.

Ләкин кем генә булһалар ҙа, киләсәктә нимә менән шөғөлләнһәләр ҙә, ҡайҙа ғына йәшәһәләр ҙә, улар өсөн иң беренсе талап - туған телде белеү, үҙеңдең кем икәнлегеңде онотмау. Был олатайымдың төп васыяты, һәм беҙ уны үтәргә тырышабыҙ. Туған тел - беҙҙе алыҫ быуаттар менән, ата-бабаларыбыҙ менән бәйләгән, берләштергән бик нәҙек еп. Уны өҙөүе бик еңел.

**Хәҙер яһалма интеллект заманы. Интернет аша олатайың менән аралашырға тура килһә, уның менән нимә хаҡында әңгәмәләшер инең?**

- Олатайым менән бергә йәшәп үҫкәс, уның менән күп аралаштыҡ. Ләкин һуңғы ваҡытта, әсәйем менән өләсәйем киткәс, уның архивтарын ҡарап ултырғанда күп һорауҙар килеп сыға. Мәсәлән, фотолар күп, ләкин ниндәй йылда төшөүе, фотола кемдәр икәне билдәле түгел - бик үкенес. Ҡайһы саҡта: "Олатай, нишләп яҙып ҡуймағанһың икән?" - тип мыжып та алам.

Шулай уҡ әҫәрҙәрен уҡығанда төп геройҙарҙың прототиптары кем булғанын белге килә. Белгәнемдән, "Бөртөкләп йыйыла алтын" романындағы Ғайзулла образы - дуҫы Файзулла, ә Ҡолсобай образы - Муса Мортазин. Муса Мортазин тураһында ул йәштән уҡ яҙырға хыялланған, ләкин уның исемен асыҡ итеп телгә алырға ярамағас, икенсе исем менән күрһәткән. Олатайымдың китеүенә быйыл 25 йыл була, ләкин мин һаман уның менән эске диалог алып барам. Шул арала мин үткәндәрҙе барлап, ҡиммәттәрҙе яңынан баһалайым.

**Яныбай Хамматовтың ейәнсәре булыу һинең өсөн ғорурлыҡмы, әллә яуаплылыҡмы? Мин Яныбай Хамматовтың ейәнсәре бит әле, тип ниндәй ғәмәлдәреңде намыҫ менән башҡарғаның йә башҡарыуҙан тыйылып ҡалғаның бар?**

- Бала саҡтан мин ҙур яуаплылыҡ һиҙҙем, беренсе тапҡыр шуны балалар баҡсаһында тойҙом - урыҫ баҡсаһына йөрөһәм дә, олатайымдың яҙыусы булғанын белделәр. Бер ваҡыт тәрбиәсе оятҡа ҡалдырып: "Сама внучка писателя, а не может запомнить название растения сансевиерия"! Нишләптер ошо иҫтә ҡалған - бик оят булғандыр. Мин 20-се башҡорт ҡала мәктәбендә уҡыным, унда олатайымды тиҫтерҙәрем дә, уҡытыусылар ҙа яҡшы белә ине - был миңә, әлбиттә, яуаплылыҡ өҫтәне. Тәртип буйынса ла, уҡыу буйынса ла.

Янып Хамматов минең өсөн иң беренсе нәүбәттә олатай булып ҡала - хәстәрлекле, изге, яҡын кеше. Уның менән бергә ғүмеремдең 22 йылын бергә үткәргәнемә бик бәхетлемен. Уның алдында минең бурысым күп - сығарылмаған әҫәрҙәрен нәшергә әҙерләргә, әсәйем тәржемә итә башлаған автобиографик әҫәрҙең өсөнсө китабын рус теленә тәржемә итеп бөтөрөргә, архивын рәткә килтерергә... "Бөртөкләп йыйыла алтын" пенталогияһы бер ҡасан да берләштереп баҫылып сыҡҡаны юҡ, шуны эшләргә ине... Әлбиттә, был эштәр юбилей йылында ғына эшләнгән эштәр түгел. Яныбай Хамматовтың әҙәби мираҫын эшкәртер өсөн ваҡыт күп кәрәк, мин өлгөрмәһәм дә, ҡыҙҙарым дауам итәсәк, тип ышанам.

**Йөкмәткеле һәм ҡыҙыҡлы әңгәмәң өсөн ҙур рәхмәт, Алһыу Әнүәр ҡыҙы!**

Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ
әҙерләне.

КҮРКӘМ ҒӘҘӘТТӘР

# МАҠТАРҒА ҺӘМ...

## маҡтағанды тыңларға өйрән

**Кешене маҡтау күңелле лә, файҙалы ла. Һин быны эшләй алаһыңмы? Юҡ? Улайһа өйрән! Кемдең генә үҙе тураһында йылы һүҙ ишеткеһе килмәй икән. Үкенескә күрә, беҙҙең барыбыҙ ҙа комплимент әйтә белмәйбеҙ шул. Ә күптәр уны бөтөнләй артыҡ тип һанай һәм ярамһаҡланыу менән бутай. Был дөрөҫ түгел...**

● Үҙенең ниндәйҙер ыңғай сифаттары йәки һәләте, йә булмаһа яңы күлдәге тураһында маҡтау һүҙҙәре ишетеү һәр кемдең күңеленә май булып яғыла. Ошондай күркәм ғәҙәрештәргә иғтибар итмәй ҡалырға ярамай. Ә комплимент - һиңә иғтибар бүлеүҙәрҙең, һинең улар араһында булыуыңды һәм лайыҡлы баһаланыуыңды белдергән билдә.

● Йылы һүҙҙәр - яҡшы мөнәсәбәт күрһәткесе. Был комплиментты ялағайланыуҙан айыра: уның нигеҙендә кешегә яҡшылыҡ эшләү теләге ята, ә хәйлә ҡорорға тырышыу түгел.

● Комплимент әйткән кешегә был әңгәмәне ялғап алып китеү йәки үҙенең яҡшы эмоциялары менән бүлешеү мөмкинлеге бирә.

● Үҙеңдең башҡалар менән һоҡланыуыңды белдерергә өйрәнеп, һин үҙ-үҙеңә ышанысты арттыраһың. Юҡҡа ғына комплимент эшләй белеүсе кеше уларҙы ҡабул итә лә белә бит.

● Комплимент кәйеф рецебы ла. Кемгәләр матур һүҙ әйтеп, һин әһәмәсенә лә яҡшылыҡ эшләйһең, шулай уҡ үҙеңдең күңелеңде күтәрәһең. Маҡтау сәнғәтенә нисек өйрәнергә?

***Комплимент яһауҙың беренсе шарты - ихласлыҡ!*** Әгәр кешене маҡтарға теләһәң, был сәбәп һиңә ысынлап та оҡшарға тейеш. Ҡайһы бер арттырып ебәреүҙәр килешмәй, шулай уҡ алдашырға ла ярамай. Ярҙамсыл кешегә "Һин фәрештә!" тип әйтергә мөмкин, ләкин изгелегенә шикләнгән кешегә был һүҙҙәрҙе әйтмәүең яҡшыраҡ.

***Икенсе шарт - комплименттарҙы урынлы ҡулланыу.*** Урынлы ҡулланылған һоҡланыуҙың шатлыҡ алып килеүе икеле, ә, киреһенсә, кешене ярһытырға мөмкин. Күҙ алдына килтереп ҡара: һинең эшең күп, башыңды ла ҡалҡыта алмай, ҡағыҙ эштәре менән булышаһың. Шул ваҡыт янына әхирәтең килеп, һинең прическаңдың иҫ киткес матур булыуы тураһында әйтә. Был комплимент һине шул тиклем ҡыуандырыр инеме?

***Өсөнсө шарты - комплименттың үҙенсәлекле булыуы.*** Тәжрибәле күңел әүрәтеүселәрҙең шундай ҡағиҙәһе бар: матур ҡыҙҙы аҡылы, ә аҡыллы ҡыҙҙы матурлығы өсөн маҡта. Бер төрлө комплименттар туйҙыра. Тауышыңның иҫ киткес матур булыуы тураһында көн һайын ишетеп тороусы йырсыға үҙенең бешеренеү һәләтлектәре тураһында ишетеү нығыраҡ күңеленә ятыр ине. Ә кем дә булһа оҫта тегенсәлә шиғри һәләттәр барлығына иғтибар итһә, уға шул тиклем ҡыуаныс буласаҡ.

***Дүртенсе мөһим һыҙат - ҡыҫҡалыҡ.*** Уҙған быуаттағы аристократтарҙың ҡабарынҡы маҡтау телмәрҙәрен ҡалдыр - улар был сәнғәткә бала саҡтан өйрәнгән. Бигерәк оҙон комплимент яһағанда һинең фекерҙәрең таралыуы, уйҙарың сыуалыуы ихтимал.

***Бишенсе - бер мәғәнәгә эйә булһын.*** Ишеткәс тә быны маҡтау һүҙеме, әллә кәмһетеү һүҙе булдымы икәнлеген айырып булмаған ике мәғәнәгә эйә ләкаптар бар. Һәм хатта бер ҡалыпҡа һалынған: "Ҡалай һин бөгөн матур күренәһең!" - комплименты ла, "Бөгөн генә шулай күренәмме икән?" тигән һорауҙы тыуҙырырға сәбәп булыуы ихтимал. Шуға күрә, "Матурһың!" тигән кеүек һүҙҙәрҙе ҡулланыу күпкә уңайлыраҡ булыр. Бәйләнергә урын ҡалмай.

***Шаяртып һәм етди.*** Үҙенең һоҡланыуын кеше туранан-тура белдерергә мөмкин. Йәғни, һин үҙеңә оҡшағанды нисек бар, шулай әйтәһең. Шулай ҙа быңдай комплименттар, әгәр һин әһәмәсеңде насар беләһең икән, урынһыҙ булыр, ул һинең һүҙҙәреңде ялағайланыу тип ҡабул итеүе ихтимал. Ә һоҡланыуҙы ситләтеп әйтеү кешенең үҙе тураһында түгел, ә һинең уға ҡарата мөнәсәбәтеңде белдерә. Үҙеңдең етәксеңде "иң яҡшы етәксе" тип әйтергә уңайһыҙланаһыңмы? Улайһа, уның ҡулы аҫтында эшләүе нисек еңел икәнлеген әйт. Шаян комплименттарҙы хатта иң оялсан кешеләр ҙә еңел ҡабул итә. Йылмайып ҡына: "Ниндәй ҡош шулай матур һайрай? Ә был беҙҙең Гөлкәй моңлана икән!" - тип әйт, шунда уҡ әхирәтеңдең күңеле күтәрелер. Һөйләмеңә бер аҙ хупламау ҙа ҡушып ебәр, кисҡен ҡапма-ҡаршылыҡта һинең маҡтау һүҙҙәрең тағы ла сағыуыраҡ яңғыраясаҡ: "Бөгөн һин ғәҙәттәгесә түгел, ә күпкә яҡшыраҡ күренәһең!"

Комплимент эшләй белеү генә түгел, уларҙы ҡабул итә белеү ҙә мөһим. Һин кемдәлер маҡтағанда ул яуап итеп уңайһыҙлана йәки аҡлана башлаһа, һиңә рәхәт булыр инеме? Улай итергә ярамай. Рәхмәт белдер. Комплименттарҙы йылмайыу менән яуап биреүселәргә әйтеү күңеллерәк бит.

Дилә ХАЖИӘҠБӘРОВА әҙерләне.

*ФӘҺЕМ, ҺАБАҠ*

# ХАҠ ТӘҒӘЛӘ ЯҘҒАН ЯҘМЫШ...

– Тормошто ныҡ яратам мин! - ти 1941 йылда Йылайыр районы Мәҡсүт ауылында Шаһишәриф менән Хөппөниса Такаловтар ғаиләһендә тәүге бала булып донъяға ауаз һалған Мәҙәлифә апай. Ҡартлыҡ билдәләре һис тә беленмәгән ап-аҡ нурлы йөҙөндә, был һүҙҙәр әйтелмәһә лә, уның тормошто, йәшәүҙе, тирә-яғындағыларҙы шул ҡәҙәрем ныҡ яратҡанлығы сағылып, яҡтырып күренеп торған кеүек. Әммә апайҙың киләһе һүҙҙәре мине бөҙлө һыуға ҡойондороп-сумдырып алғандай, тәнде ҡурыштырып үтте:

- Ләкин был яҡты донъяға мин тыуырға тейеш булмағанмындыр, күрәһең, - ти ул бер ни булмағандай һүҙен дауам итеп. - Сөнки кескенә сабый сағымда уҡ мине үҙ әсәм үлемгә дусар иткән. Бәләкәс кенә, сибек кенә булып етлекмәй тыуған баланы, йәғни мине, 5 айлыҡ сағымда, алам-һолам иҫке сепрәккә төрөп, ҡырға алып сығып киткән. Өңрәйеп торған бурһыҡ ояһына тыҡҡан да, өҫтөн тупраҡ менән күмеп, көтөп торған. "Тыҙылдаһа - алырмын, тыҙылдамаһа ҡалыр. Ҡайҙа ятып серемәгән был йоморткa", - тип уйлаған. Әммә мин, тыпырсынып ятҡанмын- ятҡанмын да, ҡулға алыусы булмағанғалыр инде, саҡ-саҡ ҡына ишетелерлек итеп тауыш биргәнмен. Сыйылдағанымды ишетеп, әсәм мине кире өңдән тырнап алған һәм өйгә алып ҡайтып, урындыҡҡа ташлаған. "Атаһы һуғышта йөрөй, әллә ҡайта, әллә юҡ. Был баланы мин яңғыҙ кеше итә алмайым, ҡараһаң, үҙең ҡара, ҡарамаһаң, юҡ ит", - тип мине иренең әсәһенә - ҡәйнәһенә ҡалдырған да, башы һуҡҡан яҡҡа сығып киткән. Шулай итеп, мин Әлифә өләсәмдең ҡуйынында ятып ҡалғанмын. Ҡартатамдың иҫке күлдәк итәгенә, өләсәмдең иҫке яулығына төрөләп, уның йылы ҡуйынында ятып ҡына ҙурайғанмын. Өләсәмә шул ҡәҙәре ныҡ өйрәнгәнмен, әсенгәнмен, миңә 5 йәштәр тирәһендә ул үлеп киткәс, уға сытырман йәбешкән ҡулдарымды ысҡындырып ала алмай бер булғандар...

Был ваҡытта һуғыш бөткән, атайым яраланып, алдараҡ ҡайтҡайнымы икән, ул икенсе ҡатынға өйләнгәйне. Атайым ауыр яу юлын кавалерия дивизияһында үткән. Ат уйнатып сығып киттек һуғышҡа, тип һөйләгәнен иҫләйем. Яраһы ҡаты булғандыр, йоҡлай алмай, ҡысҡырып ятҡан саҡтары ла була торғайны. Снаряд ярсығы уның үксәһен умырып алып киткән ине. Сатанлап булһа ла йөрөп, бар эште эшләне, ныҡ эшлекле, шәпле ҡарт булды ул... Өләсәмде ерләгәс, атамдар мине үҙҙәренә алып ҡайттылар. Атайым менән Мәрфуға апайым урталарына алып йоҡлатҡандарын иҫләйем...

* * *

Бала сағымда, атай һуғышта саҡта, етем тип йәлләгәндәрме икән, Мәҡсүт ауылының инәйҙәре мине ныҡ ҡараны. Урамда осратһалар, икмәк тоттороп китерҙәр ине. Кәнсир тотоп, уларға йомошҡа йөрөгәнемде лә иҫләйем. Бер саҡ Тайба инәйем етәкләп кенә Ҡыпсаҡ ауылына алып барҙы. Кемдәрҙәләр бер йоҡлап ҡайттыҡ. Атайым һораған була икән: "Шунан, ҡыҙым, ҡунаҡта оҡшанымы? Тағы бараһыңмы?" Ә мин: "Юҡ, бармайым. Унда ла йортон, бында ла йортон, ишек төбөндә лә йортон", - тигәнмен. Йортон тигәнем, һарыҡ тиреһен эшкәртеп эшләгән тиртун (тире тун) булған икән. Кеше ныҡ ярлы, етешмәй йәшәне, шул тиртундарҙы түшәп йоҡлай инеләр. Инәйҙәрҙең итәгендә генә, ҡәҙерле генә бала булып йөрөнөм. Мәҡсүт, Ҡашҡар, Иҫкужа ауылдарында йөрөп үтте минең сабый сағым. Иҫкужала атайымдың бер туған апаһы Фәтхиә инәйем йәшәне. Шуны нығыраҡ иҫләйем. Иҫкужа тауы буйлатып еләккә алып йөрөр ине. "Матур ғына кейәүгә бар инде, Аллаһы бойорһа, бәхетең булһын", - тип теләк теләгәне хәтерҙә.

Ғаиләбеҙ менән Юлдыбай ауылына күскәс, мин беренсе класҡа уҡырға барҙым. "Атайыңдың исеме кем?" тип һорайҙар мәктәптә, белмәйем, "Атай", тим. "Әсәйеңдеке кем?" "Әсәйем юҡ шул минең", тим. Таңатаров олатай, Нураева Нурия, Фәйрушина Маһруй тигән уҡытыусылар уҡытты. Ул ваҡытта атайым менән апайҙың уртаҡ балалары ла бар ине. Шуларҙы ҡарайым, көнө буйына ҡул менән тирмән тартам. Арып китһәм, тирмәндең тотҡаһына тотоноп, серем итеп алам.

Йәшәүе лә ауыр, юҡсыллыҡ заманы ине шул. Башҡа ғаиләләр ҙә асыҡҡандыр инде... Атай менән Мәрфуға апай балаларға талапсан булдылар, эш менән баҫып үҫтерҙеләр. Апай үҙе лә эшкә шул ҡәҙәрем шәп, көслө, булдыҡлы ине, емертеп эшләне. Аш-һыуға ла ныҡ оҫта, әрһеҙ булды. Беҙҙе лә бер минутҡа ла буш ултыртып ҡуймаҫ ине. Һеңлеләрем Мәрзиә, Гөлшат, Роза, берҙән-бер ҡустым Хәлит бергә үҫтек...

Бер көн атамдар ҡунаҡ саҡырҙылар. Ике яҡлы өй, уртала солан. Мин бәләкәй яҡта сәңгелдәктәге сабыйҙы бәүетеп торам. Әлдә ебе серек булды, әллә мин көс менән аҫылынылыныңҡырап бәүеттемме - бауы өҙөләп китеп, сәңгелдәк ауып төштө һәм сабый үлде лә ҡуйҙы. Сания исемле һеңлем ине. Былай ҙа артыҡ тамаҡ булып йөрөгәнмен инде, сабыйҙың үлемендә мин ғәйепле булдым да ҡуйҙым... Ашау ҙа эләкмәй, кейем дә туҙҙы, ҡәҙер бөттө, уҡыу ҡайғыһы китте. Етенде лә төртөндө булып йөрөп ятам шунда. Ныҡ асыҡҡанмындыр инде, иҫке ағас мәктәптең икенсе ҡатына менеп, "Асыҡтым!" тип ҡысҡырып, буялмаған иҙәнгә "Асыҡтым!" тип яҙып бөткәнмен. Уҡыуға бара алһам, барам, бармағанда бармай ҙа ҡуям. Шулай итеп, илке-һалҡы йөрөп, өсөнсө класта күсмәй ҡалдым да ҡуйҙым. Шунан мәктәпте ташланым.

Уҡыуҙы ташлап, өй, йорт эше менән генә булып йәшәп ятам. Шунан мине октябрь айында Орскийға мал ҡыуырға ебәрҙе лә ҡуйҙылар. Һынташтан Әхмәтйән, Мәхәмәтйән олатам, күршенән Разия инәм, апайымдың һеңлеһе Мәрхәбә апай, мин, йәйәүләп, бер ай барҙыҡ мал ҡыуып. Ҡайҙа етте, шунда туҡтап, ял итәбеҙ, әскәрт төбөндә тон үткәрәбеҙ. Шулай әскәрт төбөндә йоҡлағанда минең ҡулым тумбыҡҡан да ҡуйған, шешеп китте... Ҡайны бер ауылдарҙа изге күнелле кешеләр булһа, өйгә индерәләр, иҙәндә булһа ла, йылыла ятып йоҡлайбыҙ. Көнө буйы малды ашата-ашата яйлап ҡыуалап барабыҙ. Шунда бер ерҙә ҡаҙаҡтар төштө бит минең арттан: "Был ҡыҙҙы беҙгә ҡалдырығыҙ. Ҡыҙ урынына нимә һораһағыҙ ҙа бирәбеҙ", - тип өгөтләйҙәр минең юлдаштарымды. Олатамдар мине йәшереп, эттәрен ырылдатып һөсләтеп, таяҡтарын шартлатып, сыбыртҡыларын шыжлатып, тегеләрҙе ҡыуып, мине алып ҡалдылар. Ашарға юҡ. Һыйыр быҙаулаһа, быҙауын һатабыҙ, урынына кәрәк-яраҡ, ашамлыҡ алабыҙ. Шулайтып, мең этлек менән Орскийға барып еттек. Аҡса биргәндәрме икән, күстәнәскә ярты кило колбаса, бер бәләкәй генә һауытта ҡурсаҡ алғанмын. Шулайтып, имен-һау ҡайтып еттек...

* * *

1957 йылда Самарскийҙан Юлдыбайға училищены күсерҙеләр. Уҡыусыларына ятаҡ булмағанмы икән, әллә бөтөнөһөнә лә урын етмәгәнме, фатирға тараттылар. Ҡыш көнө, декабрь айы ине. Иҫкужалағы Фәтхиә өләсәмдең килене, Нурислам ағамдыҡы, бәпәй тапты. Тәүге балалары. Мине бәпәй ҡарашырға, ярҙам итешергә, һыу ташырға тип алып ҡайтып киттеләр. Маннаф олатам ныҡ өлкән ине инде, Фәтхиә өләсәм һәйбәт, аҡыллы кеше булды. Шунда йәшәп, өй тирәһендә ярҙам итешеп йөрөгән ваҡытта бер көндө Байназаров Әбдрәхмән ағай килеп инде. "Мәҙәлифә, һине алып ҡайтырға килдем", - ти. "Минең бер быймам табанланмаған", - тейем. "Табанланмаһа ла алып ҡайтам. Атайың да, еңгәйең дә, һине һәм олатайымды алып ҡайтырға ҡушты", - тип алып ҡайтып китте. Ҡайтһам, Мәрзиә һеңлем: "Апай, һине кейәүгә бирергә йөрөйбөҙ, кейәүгә бирергә йөрөйбөҙ",- тип һикерәндеге сыға. Өйҙә анда һалма йәйеүле, бында һалма йәйеүле ята. Аһ-аһ, тинем дә, тышҡа сығып, ҡапҡа тышына сығып торһам, ҡурше Зөлхизә инәй: "Мәҙәлифә, һеҙҙә бер әкәмәт бар әле ул, бер әкәмәт бар. Йүгерәләр, оҙон тиртун кейгән бабай күренә", - ти. Бына ике хәбәр булды бит инде. Шулай аптыранып тора инем, эргәмә ике әхирәтем килде - Гөлбаныу менән Гөлйемеш. Мин уларға әле ишеткән хәбәрҙәрҙе әйттем. "Шулай тиҙәрсе! Ул кейәү тигәнен күргәнем юҡ, кемдер? Ҡалайтырға икән?" - тием. Гөлбаныу "Әйҙә, йәшенәйек" тине. Әллә ҡайҙа барып йәшендек. Әммә үгәй әсәйемдең бер туған һеңлеһе Мәрхәбә апай мине эҙләп табып, етәкләп алып ҡайтты. Ҡыҙҙар ҙа миңә эйәргән. Ҡайтып еткәйнек, ҡапҡаның бер тимеренә тотондом да, инмәйем. Ысҡындыра алмайҙар. Эй өгөтләйҙәр: "Баймаҡ һынлы ерҙән ҡайны була торған өлкән бабай килгән. Инмәһәң, беҙгә ояты ни тора, әйҙә, ин", - тиҙәр, нимә тип әйтергә лә һүҙ таба алмайым: "Әйҙә бер, әйҙә бер", - тип тик торам. Тегеләр ҡыр быуынға төшкәс, "Ярай ҙа!" тип ҡысҡырып ебәрҙем. Шуны ғына көткәндәй, Байназаров Айнулла ағай ҡоро яһау менән мылтыҡтан һауаға атты ла ебәрҙе. Ҡыҙҙар сырылдашып, йүгерешеп ҡайтып киттеләр. Ә мине бер өйгә алып барҙылар ҙа бикләнеләр. Шунан егетте индереп, икәүебеҙҙе бикләп ҡалдырҙылар. Шулайтып ҡауыштыҡ буласаҡ ирем менән. Атамдарға килеп йөрөгәндәрендә өсөһө лә хөкүмәт биргән бер иш кейемдән булғас, кемеһе минең кейәү икәнен дә айырып ҡарағаным юҡ ине. Ошонда саҡ тәүгә ҡалҡып ҡарап, ниндәйерәк кешe икәнен күрҙем буласаҡ хәләл ефетемдең. Кешегә иғтибар биреп, ҡалҡып ҡарамай ҙа инем шул. Ул ғүмер итәсәк ирем Зиннәтулла Дәүләтшин Баймаҡ районы Икенсе Этҡол ауылынан ине...

Шулайтып, 1957 йылдың декабрь аҙағында никах уҡыттыҡ, ғинуарҙа икәүләп кенә барып, ЗАГС-ҡа яҙылып ҡайттыҡ. Шулай бер нисә көн кейәүләп, ҡунаҡтан-ҡунаҡҡа йөрөгәс, ул ҡайтып китте. Мине килеп оҙатып алырға тейеш инеләр. Бына ғинуар үтте, февраль үтте, ә минең кейәүем юҡ. Күрше-тирәләр, инәйҙәр аптырашып һөйләшә башланы: "Әрәм итте был йәш ҡыҙҙы, ташланы, килмәҫ инде", - тигәндәрен ишетәм. Мин дә көтөп төңөлдөм...

* * *

Март башланды. Бер саҡ тышта, тупһала баҫып торһам, ҡар бураны туҙҙырып санаһы ат килеп туҡтаны. Зиннәтулла ҡул биреп күреште лә, әллә ниндәй йәшниктәр тотоп, соланға индереп ултырта башланы. Ул саҡта ҡайҙа инде ҡосаҡлашыу, һөйөшөү, ул да бер оялсан, баҙнатһыҙ булғандыр инде. Унан атына ултырҙы ла кире елдереп сығып китте. Был ҡайҙа булды, тип иҫебеҙ китеп торабыҙ. Бәктиһәң, кемдәрҙә ятып уҡығандар, Этколдағы иптәштәре күстәнәс ебәргән икән, шуларҙы таратып йөрөгән. Хәҙер был мине оҙатып алырға килгән. Сана егелгән ике атта киттек Этколға. Бер атта Зиннәтулла менән мин, икенсеһендә атай менән апай, Байназаров Муса ағай менән Гөлсирә еңгәм бер атта Баймаҡ, Таулыҡай аша килеп төштөк Икенсе Этколға. Бабайым миңә юлда һөйләп килә: "Беҙҙең өйҙөң иҙәне юҡ, ер иҙән. Балсыҡты таҫҡа ғына иҙәбеҙ ҙә һылап сығабыҙ. Кипкәнсе көтөп ултырыр кәрәк, сөнки аяҡҡа йәбешә. Картуф тип әйтеп ҡуйма, оятҡа ҡалырһың, беҙҙә уны ҡолоҡа тип әйтәләр", - ти. Аныһын өйрәтә, быныһын өйрәтә. Мин бер ауыҙ һүҙ ҡатмайым, тыңлап тик киләм.

Ошо әле йәшәгән урамға килеп индек. Мунсалай ғына өй, ҡайным-ҡәйнәм,



***✓ Мине, әлбиттә, Мөзәлифә апайҙың үҙ әсәһе менән нимә булғаны ҡыҙыҡһындырҙы. Әсәһе Хөппөниса менән осраша ул һәм һуңғы көндәренә тиклем аралашып йәшәйҙәр.***



менән өлкән ике ҡайынһеңлем, Зиннәтулла менән мин алты кеше йәшәй башланыҡ. Бәләкәй генә ике тәҙрә бергә ҡушып эшләнгән. Ҡорғаны юҡ, гәзитте шәл сите шикелле ҡырҡып семәрләп, өҫтән йәбештереп ҡуйғандар, аҫтан, ярай, пәрҙәһе бар. Бөтәнөбеҙ бер урындыҡта теҙелешеп ятып йоҡлайбыҙ, беҙҙе шаршау менән генә бүлеп ҡуйҙылар. Шулай йонсоу ғына йәшәгәндәр. Сәйҙе шаршау артынан ғына эсерәләр, ике сынаяҡ яһап бирәләр. Өсөнсөгә эскең килһә лә, юҡ инде.

Кейәүем Зиннәтулла 12 йәшкә минән өлкән ине. Олпат кәүҙәле, күрекле генә ине үҙе. Енел холоҡло, осҡалаҡ түгел, һалҡынса, етди. Армияға тиклем Ғәлимә исемле ҡыҙҙы көләш итеп алған булған. Был армияла өс йыл хеҙмәт итеп ҡайтҡансы ҡыҙы тыуған. Армиянан ҡайтҡас, әсәләре Ғәлимәне киренән алдырмағандар ҙа ҡуйғандар. Әсәһе, апалары, һеңлеләре ныҡ уҫал инеләр. Ғүмер буйы бер урамда йәшәнек тәүге ҡатыны менән. Ғәлимә апай, уның әсәһе Ишбикә инәй, 6 йәшлек ҡыҙҙары бар ине мин килгәндә. Баяғы ҡыҙ: "Атайым алып ҡайтҡан апайҙы күргем килә",- тип килә лә килә икән. Быны минә күрһәтмәй генә ҡыуып ҡайтарып торғандар. Бер мәл нисек итһә иттек, шулай бер тап булыштыҡ был бала менән. Һүҙсән генә Зәкиә исемле ҡыҙыҡай ине. Ә бер ҡасан да килеп, әрләшеп, һүҙләшеп йөрөмәнеләр ...

* * *

Килен булып төшкән ерҙә ҡолас йәйеп ҡаршы алмайҙар Мөзәлифә апайҙы. Бигерәк тә ҡәйнәһе менән бер ҡайынһеңлеһе йәш ҡыҙҙы ситнәтә, ауыр һүҙ әйтеп рәнйетә. Ҡайныһы ғына яҡлаша киленен. Башҡалар ситнәткәндә мине гел яҡлашып, йомшаҡ һүҙен әйткән ҡайнымды: "Аһ, бына ҡайҙа ул ҡайны менән Шәүрә килен!"- тип һүҙгә ҡалдырҙылар. Мин быны нимә аңлатҡанын да, Шәүрә килен йырының асылын да белмәйем. Ә ҡайным уйланып йөрөгәндер инде, күрәһең. Бер көн килеп минең арҡамдан һөйҙә: "Килен, һин йәшһең, бирешмә! Нимә генә тиһәләр ҙә бирешмә. Килер бер көн, бына тигән ҡатын булып хөрмәттә ултырырһың!"- тине лә, аҙ-маҙ кейемен бер киндер тоҡҡа тултырып, сыҡты ла китте. Шул китеүҙән кире әйләнеп ҡайтманы, ныҡ үҙәгенә үткән булғандыр инде уҫал, яһил ҡатыны. Мәтем тигән ауыл бар ине, шунда Бибей тигән (Бибиәсмә булдымы икән, Бибиғәйшәме, кемдер, гел Бибей тип йөрөттөләр) бер ҡатынға өйләнеп, бик матур йәшәнеләр ҙә киттеләр.

- Хәҙерге килендәр ундай мөғәмәләгә риза булып тормаҫтар ине, ташлап ҡайтыр ҙа китерҙәр ине. Ни өсөн ҡайтып китмәнең? Үҙ әсәйең булмаға, үгәй әсәй менән атайың ҡаты булғанға ҡайтмағанһыңдыр, шуға түҙеп йәшәгәнһеңдер?- тип һорайым апайҙан.

- Сей тирегә ут ҡапмай! Ҡайтып та ҡайҙа бараһың? Бер уттан икенсе утҡа ингәнгә генә бирешмәгәнмендер... Хәйер, бер тапҡыр ҡайтып ҡараным ул мин... Ҡышҡы һыуыҡ көн. Үҙегемә үткән булғандыр ине, Зиннәтулла эштә саҡта ҡайтып китергә булдым. Сөнки ир-аттан ҡыҙғанып, минә ҡул да күтәргеләй башланы, ҡунаҡ-мажарҙан да ҡайтып киткеләнек шул арҡала. Ҡайны әбейгә сығып китте бит инде, ҡәйнәм Сибайҙа ҡыҙында бала ҡараша, минең ҙур улым Таңатарҙы ла үҙе менән алып китте, ә ир эштә. Шул Таңатарымды ныҡ яраттылар бөтәһе лә, минең ҡулыма ла эләкмәне, унда ла алып китәләр, бында ла алып китәләр. Ә унан ике йәшкә кесе Әскәтемде үҙ итмәнеләр нишләптер. Бер ҡайынһеңлем генә яратты, башҡалары кеҫәмә һалып алып килгән бала һымаҡ артыҡ күрҙеләр. Икмәк тотторһам, ҡәйнәм ҡулынан икмәген тартып ала ла ҡуя, үтеп барһа, этә төртөп илатып китә. Баланды ҡаҡһалар, үҙенде ҡаҡҡанға ҡарағанда ла ҡыйын, уның өсөн йөрәк өҙөлә... "Ошо ҡәйнәм берәй ваҡыт, Әҫкәт, тип, шул баланың ҡулына ҡарап, күрергә зар-интизар булып ултырһа икән", - тип уйланым. Үҙенә әйтмәнем, эстән генә уйланым... Ир ҡаға, баламды ла артыҡ күрәләр... Ҡайтып китергә ниәтләнем. Әҫкәтемде күтәрҙем дә юлға сыҡтым. Бер ағайҙарҙың атына ултырып, Үрнәккә тиклем барып, төшөп ҡалдым. Ныҡ һыуыҡ, тышта тороп түҙеп булмай. Йылынып сығырға тип оло юлға яҡын ғына ултырған өйгә индем. Бер апай кеше өсдөрт балаһы менән йәшәп ята икән. Ике матур ғына малай өйгә утын ташый, берәүһе сәңгелдәктә ята. Баяғы апай әллә минең ингәнде яратманы, эй әрләй балаларын, эй әрләй. "Һеҙҙе көтҡәнсе, суҫҡа бәрәстәрҙе көтһәм, яҡшыраҡ булыр ине! Һатып аҡсаһын алыр инем, суҫҡа бәрәстәренән күберәк файҙа күрер инем!"- тип ҡарғап-ҡарғап әрләй. Теге малайҙар өндәшмәй генә утын ташып тик йөрөй. Мин машина күренһә, йүгереп сыға да ҡул күтәрәм. Шулай ҙа бер машина алды. Бер ир менән ҡатын Баймаҡҡа ошо апайға утын тейәп алып китеп баралар икән. Минең артабан Йылайыр яғына барырымды белгәс, апай ыуаланып алып китте. "Бынау һыуыҡта, ҡискә ҡарай, мин һине ҡайҙа сығарып ебәрәйем! Юҡ, йөрәгем етмәй улайтырға! Әйҙә, минә барып йоҡла ла, иртәнсәк автобусҡа сығырһың!"- тип алып ҡайтып, ашатып, йоҡларға һалды. Бар бит ул ерҙә изге күңелле кешеләр!..

Ул ваҡытта атайымдар киренән Мәксүткә күсеп ҡайтып йәшәп яталар ине. Мин Юлдыбайға, үгәй әсәмдең һеңлеһе Мәрхәбә апайҙарға килеп төштөм. Мәрхәбә апай пекарняла эшләй ине. Юлдыбайҙа йәшәй башланым, пекарняға барып та ярҙам итәм, өйөндә лә булышам. Мәрхәбә апайға рәхмәт, кире ҡаҡманы, әрләмәне, өйөндә лә, күңелендә лә урын табылды. Зиннәтулла: "Йөрөмәһен, ҡайтһын! Ике баланы етем итмәһен!"- тип, кеше аша сәләм әйтә лә ебәрә, әйтә лә ебәрә. Үҙе килеп алмай. Шулайтып өсдүрт ай йәшәгәс, Зиннәтулла: "Ҡайт, балаларҙы һыуындырма, етем итмә!" - тигәс, кире ҡайттым Эткөлгә. Бикештә эшләп йөрөй ине, ҡаршы алды. Ныҡ үҙһүҙле, тәкәббер ине, үҙе килеп алманы барыбер...

* * *

Бер саҡ магазинға инһәм, теге ваҡыт йылынып сығырға ингән апай тора. Әллә нисек иҫәр кеше кеүек һөйләнә, башы эшләмәгәндәй тойола. Баҡтиһәң, үҙҙәре һуғыш һуйышырға киткән саҡта өйҙәре янып китеп, балалары янып үлгән икән. Бына бит ул һүҙҙең көсө! Әсә ҡарғышы! "Һеҙҙе көтҡәнсе, суҫҡа бәрәстәре көтһәм, яҡшыраҡ булыр ине!" - тип әйткәненә үкенгәндер ҙә бит... Балалар ҡайғыһынан аҡылдан яҙып йөрөгән икән бисара...

Ҡәйнәмдә, Әҫкәткә зар-интизар булып ултырһын, тип уйлағаным да юш килде. Ауырып түшәккә яткас, гел генә Әҫкәтте һорап ятты. Ә Әҫкәт ул ваҡытта Мәксүттә ҡартаталарында ҡунаҡта ине. "Шул бала күренмәй, асығып, һыуһап йөрөмәйме икән?"- тип һораны ла ятты ҡәйнәм. Бәлки, элек рәнйеткәндәре иҫенә төшөп, күңеленә урын таба алмағандыр инде, кем белә...

Килен булып барғандың икенсе йылына мәктәпкә эшкә төштөм. Зиннәтулланың ике туған ағаһы Дәүләтшин Айнулла ҡайнаға мәктәптә завхоз ине, йыйыштырыусы итеп эшкә алды. Үҙебеҙ көйәнтәләп һыу ташыйбыҙ, утын ярабыҙ, бысабыҙ, мейесен яғабыҙ. Мин йәш бит инде, тәнәфес булһа, балалар менән шаярам, баҫтырышып уйнайбыҙ. Йәйгеһен мәктәптең атына бесән эшләргә сыҡтыҡ. Бесәндән һуң мәктәптең нигеҙен тыштан һыланыҡ. Ферманан колода менән һыйыр тиҙәге барып алып килəбеҙ ҙә, балсыҡ менән ҡуша баҫып, һылайбыҙ. "Ҡыҙған ныҡ итеп ташлап һуғығыҙ, әтеү балсығығыҙ йәбешмәй, кире ҡойолоп тора", - тип Айнулла ҡайнаға өйрәтеп йөрөй. Шулайтып эшләп йөрөп, тәүге улым донъяға килде. Ул ваҡытта ҡәйнәмдең бер ҡыҙы Сибайға кейәүгә сығып, игеҙәк балалары булғайны, шул балаларҙы ҡарашырға китте. Өйҙә мин, Зиннәтулла, балам - өсәү генә йәшәп ятабыҙ. Элек ҡатындар бәпеслəгәс, декрет ялында ултырыу тигән нәмә булманы бит инде, киренән шундуҡ эшкә сыҡтым. Баланы ҡайтып ҡына имеҙәм дә, кире эшкә йүгерәм. Ултыра башлағайны, түнәрәк тимер таҫҡа ултыртам да, тирә-яғын яҫтыҡ менән ҡамап, эшкә китәм. Бер ваҡыт ҡараһам, улымдың елкәһе көмөрө кеүек. Фельдшерға алып барып күрһәткәйнем, Түбәгә дауаханаға апарырға ҡушты. Түбәлә ҡаранылар ҙа, ҡаты ергә, таҡтаға һалып йоҡлатығыҙ, бирешмәй ул, тип ҡайтарҙылар. Мәктәптән эштән сығырға тура килде. Эргәлә генә почта ине, шунда эшкә төштөм. Бында ике генә мейес яғырға, Люция тигән ҡатын менән оҙаҡ йылдар бергә эшләнек. Унынсы балам тыуғанда ла шунда эшләй инем. Шунан почта яңы һалынған клубҡа, алыҫҡа күсте. Мине ауылдың мәҙәниәт йортона йыйыштырыусы итеп эшкә саҡырҙылар. Риза булдым, клубта башкөллө эшкә сумдым. Кемдәр генә килмәһен, ниндәй генә байрам булмаһын, ҡаҙанымды һөйрәп мин йөрөнөм. Башҡалар ыңғайына йырланым да, бейенем дә. Шулай итеп сәхнәгә сыҡтым. Район һабантуйҙарында юғары ҡунаҡтарҙы һыйланым, Президент Рәхимовты ла һыйларға насип булды. Бала саҡтан йырланым мин, оҙон халыҡ йырҙарын да йырлар ҙа йөрөр инем...

* * *

Шулай беҙ Зиннәтулла менән 55 йыл бергә йәшәнек. Бабайым алдынғы механизатор булды, ауыл советы депутаты итеп тә һайланды. Элек эш кешеһенә хөрмәт тә булды бит. Алдынғы комбайнер тип быны ул ергә лә, был ергә лә ял йорттарына ебәрәләр. Башҡортостанда ла, Рәсәй буйынса ла төрлө ерҙәрҙә ял итеп ҡайта торғайны. Бер ҙә мине үҙе менән алып барманы. Ҡайны бер ир-ат ҡатыны менән йөрөй торғайны. Балалар күмәк булғас, мин дә ныҡышып тормаһам алып бар тип, уларҙы ҡалайтып ҡалдырып китәһен?! Хаҡлы ялға сыҡҡас та йәнә биш йыл балалар баҡсаһында төнгө ҡарауылсы булып эшләп, шунан ғына пенсияға сыҡтым.

Хәләл ефетем Зиннәтулла Дәүләшин менән бөтәһе 10 балаға ғүмер бүләк иттек. Улдарым - Сәғәҙей, Таңатар, Әҫкәт, Хөрмәт, Рафил, Фәнил, Ғәлийән, ҡыҙҙарым - Миңсылыу, Миндинур, Фәниә. Быуыным сылбыры оҙон. Егерме ейәнейәнсәрем булһа, егерме бер бүлә-бүләсәләрем бар. Иң ҙур бүләм - Илдар улым армия сафында хеҙмәт итә, иң бәләкәс бүләсәмә - Ләйлә ҡыҙыма 8 ай. Улдарымдың өсәүһе күптән гүр эйәһе. Баш балам - Сәғәҙей - тыуғас та мәрхүм булды, Фәнилемә йәш тирәһендә күҙ тейеп үлде. 27 йәшендә баҡыйлыҡҡа күскән улым Рафилым бигерәк тә йәл. Шул хәтлем шәптең-шәбе бала ине. Әфәлә электрикка уҡыны, унан Йылайыр совхоз-техникумында механикка уҡып йөрөй ине. Сәхнәнән төшмәй, йырлай, бейей, эй гармунда һыҙҙырып уйнай! Бөтән ҡыҙҙар Рафил тип үлеп торҙо... Әллә шулай шәплегенә көнләшкәндәрме егеттәр, ятағына инеп, иҙгәнсә тукмап сыҡҡандар. Шунан ныҡлап мандый алманы бахырҡайым. Аяҡҡа баҫты, эшкә төштө, гараж мөдире лә булып эшләне. Тик йәлап-йәлап насарланды. Түшәккә ятты. Минең ҡулымда китеп барҙы. Күҙен йомғансы һөйләшеп ятты, көңөштәрен бирҙе...

...Бала ҡайғыларын да сабыр аҡыл менән күндәм күтәрә оло йөрәкле Мөзәлифә апай. Хәҙер өс улым да аталары янында инде, тип йыуана...Түҙемлек менән күтәрә ул тормош һынауҙарын. Күҙҙәре көн яҡтыһын күрмәүенә лә өс йылдан ашып киткән Мөзәлифә апайҙың. Шул сабырлыҡ менән көн итә ул. Бергә йәшәгән төпсөк улы Ғәлийән менән Мәҙинә килененә рәхмәттәр уҡып ултыра. Улар инде үҙҙәре 5 балаға атай-әсәй булғандар. Мине, әлбиттә, Мөзәлифә апайҙың үҙ әсәһе менән нимә булғаны ҡыҙыҡһындырҙы. Осрашҡанмы ул үҙен яҡты донъяға килтергән кеше менән, юҡмы?

Әсәһе Хөппөниса менән осраша һәм һуңғы көндәренә тиклем аралашып йәшәйҙәр. Сабыйын ҡәйнәһе ҡулына тотторып, башы һуҡҡан яҡҡа сығып киткәс, Мөзәлифә апайҙың әсәһе Силәбе яғына барып сыға. Шунда бер ҡаҙаҡ ирекәйҙең бисәһе үлеп, алты бала менән тол ҡалған икән. Һуғышта яраланып, контузия алып ҡайтҡан инвалид ирҙе йәлләйме, алты баланымы - үҙенең берҙән-бер ғәзиз балаһын йәлләмәй ташлаған Хөппөниса ошо ҡаҙаҡ балаларына әсәйҙәрен алыштыра. Юлдыбайҙа йәшәгән саҡтарында әсәһе менән бер һеңлеһе ниндәйҙер бер байрамғамы, һабантуйғамы ҡайтлар. "Әсәйең ҡайтҡан, һине урлап алып китеп бармаһын", - тип иҫкәртәләр ауылдаштары. Әсәһе йыш ҡына Мөзәлифәне урлап алып китмәк булып тырышҡан була, шуға күрә ҡыҙыҡай әхирәте менән Һаҡмар буйындағы бер ҡаяла соҡорҙа ҡасып ултыра. Кейәүгә сыҡҡас та, әсәһе ҡыҙына бер нисә тапҡыр килеп китә, үҙе менән китергә өгөтләй. Бик ыҙалап йәшәйһен, тегендә тормош яҡшы, тиһә лә, инде ир ҡатыны булған Мөзәлифә әсәһенә эйәреп китмәй. Бала саҡта ташлап киткәнгә үпкәһе булғандырмы, яңы ғаиләһе алдындағы яуаплылыҡмы - уны үҙе әле лә әйтә, аңлата алмай Мөзәлифә апай. Әсәһе мәрхүм булғас та, уның ҡаҙаҡ балалары менән ҡатышалар, әле лә аралашып, күрешеп, ҡусҭәнәстәр ебәршеп торалар. "Ул балалар әсәйемде ныҡ яратты, хөрмәт итте. Шуға мине лә үҙ туғандарылай күреп яҡын иттеләр, - ти әңгәмәсем. Әсәһе мәрхүм булғас, ауылдарына ла саҡырып торалар. - Әсәйемдең исеме ауыр булғанғамылыр, әллә баргас та үҙе шулай тип таныштырғанмы икән, уны Хөппөниса тип түгел, Галя тип йөрөттөләр. "Беҙҙең мама Галя", - тип өҙөлөп торҙолар."

Күҙҙәре ҡояш яҡтыһын күрмәһә лә, тормошто яратып ҡабул итә, ябай ғына нәмәләрҙән дә шатлыҡ таба белгән әңгәмәсем миндә тик һоҡланыу тойғолары ғына уятты. "Әлхәмдулиллаһи шөкөр, тип ҡыуанып ултырам. Ат башын ҡапҡама бәйләп, хәлемде белергә туғандарым килеп тора, яңғыҙ түгелмен. Балаларым бөхетле! Дүрт улым, өс ҡыҙым мин тип өҙөлөп тора, күрше-күләнем, ауылдаштарым һәйбәт. Тәүҙә минең өсөн ныҡ ҡаты булған апайым - үгәй әсәйем дә торабара мине алға ҡуйҙы, һеңлеләремә өлгө итеп әйтә ине, ҡунаҡ саҡырһа, түргә ултыртты. Уның да, мине ныҡ рәнйеткән ҡәйнәмдең дә, ҡайынһеңлеләрем, бикәмдәремдең дә аҙаҡтан ихтирамын яуланым. Эшем менән яраным, тырышлығым менән хөрмәт ҡаҙандым, Аллаһыма шөкөр. Бөгөн кеше алдында йөҙөм яҡты, намыҫым таҙа. Бабай менән йәшәүебеҙҙең 55 йыллығын матур итеп клубта үткәрҙеләр, бүләктәр бирҙеләр. Әле лә юбилейҙарҙа ҡотлап, байрамдың түренә саҡырып торалар... Бөтәнөһөнән дә риза булып, рәхмәтле булып шатланып ултырам", - ти ҡәнәғәтлек менән күпте күргән, күпте кисергән оло йөрәкле Мөзәлифә Шаһишәриф ҡыҙы Дәүләтшина. Ысын мәғәнәһендәге аҡ күңелле ағинәйгә ныҡлы һаулыҡ, балаларының бәхетенә ҡыуанып, ихтирамына күмелеп, йән һәм тән тыныслығында бәхетле ҡартлыҡ кисерергә насип булһын!

**Зөлфирә ҠАҘАҠБАЕВА.**
**Йылайыр районы.**

✓ Һыуҙың церкарийҙар кеүек паразиттар менән зарарланыу ихтималлығы һәр ваҡыт бар. Ул паразиттарҙы бигерәк тә аҡмаған һыуҙа һәм ҡаҙ-өйрәк күп булған ерҙә эләктерергә мөмкин.



ИНТЕРНЕТТАН



# КҮҢЕЛҺЕҘЕН УЙЛАМА

■ Тормошта булған ниндәйҙер уңышһыҙлыҡты даими рәүештә иҫкә төшөрөп тороу насар эҙемтәләргә килтереүе ихтимал. Ливерпуль университеты ғалимдары раҫлауынса, был турала иҫкә төшөрөп, үҙеңде "ашаһаң", психикаға зыян килә. 32,8 мең кеше араһында үткәрелгән һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, уңышһыҙлығын онота алмаусылар депрессия һәм башҡа хәүеф тойғоларын кисергән. Ғөмүмән, бәхетле булыу өсөн тормоштағы күңелһеҙ ваҡиғаларҙы мотлаҡ оноторға кәрәк. Төрлө осорҙа алған ыңғай тәжрибә, уңыштар үҙеңде бәхетле тойорға мөмкинлек биреүсе факторҙар, шуға ла улар тураһында йышыраҡ уйлап, кәйефеңде күтәреп алыу дөрөҫ буласаҡ.

■ Япония ғалимдары ҡайһы бер еҫтәрҙең кешенең сәләмәтлегенә ыңғай йоғонто яһауын, хатта ҡандың химик составын үҙгәртергә һәләтле булыуын раҫлаған. Мәҫәлән, стресс ваҡытында үҙенә оҡшаған эфир майының еҫе көсөргәнештән арындыра, тынысландыра, депрессиянан ҡотҡара. Бер төркөм ғалимдар үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, лимон, манго, ала миләүшә еҫе тап ошо сифаттарға эйә.

■ Көнсығыш Финляндия университеты ғалимдары көрпәнән таҙартылмаған ондан бешерелгән икмәктең файҙалы яҡтарын асыҡлаған. Ул ҡандағы шәкәрҙе түбәнәйтеп, икенсе типтағы диабет үҫеше хәүефен юҡҡа сығара. Ҡара икмәк инсулинға реакцияны ла яҡшырта, ә аҡ икмәктең сәләмәт кешеләргә лә файҙаһы бөтөнләй юк тиерлек. Көрпәле икмәк метаболизмға яҡшы йоғонто яһай, шуға ла ул диабеттан һаҡлаусы иң яҡшы сара тип табылған. Икмәктең был төрө ябығырға теләүселәргә лә ярҙам итә. Көнөнә бер нисә киҫәк икмәк ауырлыҡты нормала тотасаҡ, организмдағы майҙарҙан да ҡотҡарасаҡ.

■ Ғалимдар раҫлауынса, һәр кем 100 йәшкә тиклем йәшәй ала. Американың Джорджия штаты университетында ғүмерҙе оҙайтыу ысулдарын өйрәнеү буйынса ғилми эш алып барыла. Ғалимдар 2001-2009 йылдар арауығында 100 йәш һәм унан да олораҡ 240 кешене тикшереп, ғүмер оҙайлығына тәьҫир итеүсе психологик һәм социаль факторҙарҙы асыҡлаған. Геронтология институты директоры һәм тикшеренеүҙәр авторы Леонард Пун белдереүенсә, оҙаҡ йәшәргә теләүселәргә тормошто тик ыңғай яҡтан ҡабул итергә кәңәш итә. Был - оҙағыраҡ йәшәүҙең иң мөһим факторы.

■ Стресс ваҡытында ҡәһүә эсеү ҡатын-ҡыҙҙарға яҡшы тәьҫир итә. Ә бына ир-егеттәр бындай осраҡта үҙенең мейе әүҙемлеге тиҙләгән әкренәйтә генә, тип раҫлай Бөйөк Британия белгестәре. Independent News анығлауынса, был тикшеренеүҙәр барышында асыҡланған. Унда ҡатнашыусыларҙы ике төркөмгә бүлеп, береһе ябай, икенсеһенә кофеины булмаған ҡәһүә эсергә тәҡдим иткәндәр. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, ябай ҡәһүә эсеүсе гүзәл заттарҙың мейе әүҙемлеге кофеинһыҙ ҡәһүә эсеүсе ханымдарҙыҡына ҡарағанда күпкә яҡшырған. Ә ир-егеттәр, киреһенсә, мәсьәләләрҙе ауырыраҡ һәм яйыраҡ сискән, мәғлүмәтте лә хәтерендә насарыраҡ ҡалдырған.

БАШ ҠАЛАМ

**Ҙур ҡалалар янында урынлашҡан шәхси йортлы райондар көндән-көн үҫешә. Өфө эргәһен генә алып ҡарағанда ла, был күренеш яҡшы күренә: баш ҡалаға ҡараған райондарҙа ла, Өфө районына ингән ауыл-ҡасабаларҙа ла күркәм йорттар ҡалҡа тора, яңынан-яңы урамдар барлыҡҡа килә, халыҡ һаны артҡандан-арта. Шәхси йортта йәшәүсе һәр кем үҙенең белемәһен төҙөк тотоу менән бер рәттән, уны төрләндереп матурлау яғын да күҙ уңынан ысҡындырмай. Урам буйлап үтеү - үҙе бер эстетик ләззәт бирә: төрлө ағастар, әллә күпме төрлө сәскәләр күҙҙең яуын алып ултыра. Кемдер биләмәһен йәшелләндереүҙе үҙе ҡулдары менән башҡарһа, икенселәр был эште үҙ эшенең оҫталары булған профессионалдарға ышанып тапшыра.**
**Әлеге мәлдә баш ҡалала йәшәгән Баймаҡ егете, кәләше менән дүрт бала тәрбиәләүсе Фидан МӘЗИТОВ ландшафт дизайны һәм төҙөкләндереү эше менән шөғөлләнгән оҫта, шәхси эшҡыуар. Был өлкәләге үҙенсәлектәр, эш нескәлектәре менән бүлеште Фидан Фирғәт улы.**

# ӨФӨ ЯНЫНДАҒЫ АУЫЛДАР ҘА...

## зауыҡ һәм матурлыҡ сығанағы



- Был өлкәлә мин 12 йылдан артыҡ эшләйем. Эйе, ландшафт дизайны, тигән төшөнсә һуңғы ваҡыттарҙа ғына телгә алына башлаһа ла, был өлкә күптән үҫешә, ҙур уңыштар ҡаҙанған белгестәр ҙә етерлек Өфөлә, Башҡортостанда. Мин тәүге 6 йылда ошондай белгестәрҙең командаһында эшләнем, һәр береһе үҙ эшенең оҫтаһы булған кешеләргә ҡарап, эш тәжрибәһе тупланым, клиенттарҙың ихтыяждарын тиҙ һәм яҡшы аңларға өйрәндем. Ғөмүмән, был йылдар минә ҙур һөнәри мәктәп булды.

Кеше һәр ваҡыт үҫергә, нимәгәләр ынтылырға тейеш. Шуға күрә мин кемгәләр эшләүҙән туҡтап, үҙаллы эш башланым. Баҡсаларҙы, шәхси йорт биләмәләрен тәртипкә килтереү, газонды һәм үләнде ҡырҡыу, ҡыуаҡтарҙы тәрбиәләү, емеш ағастарын формалап киҫеү, биләмәләрҙе тигеҙләү һәм башҡа ошондай хеҙмәттәр тәҡдим иттем.

Клиенттар базам йылдан-йыл үҫте, заказдар ҙа күбәйҙе. Күпмелер ваҡыттан һуң мин үҙ командама профессиональ белгестәр йыя башланым. Әлеге көндә командала 17 кеше эшләй, уларҙың һәр береһе оҫта белгес. Яҡын киләсәктә уларҙың һанын 30-ға тиклем арттырырға ниәтләйем. Был йылдар эсендә беҙгә даими мөрәжәғәт иткән шәхси кешеләр, компаниялар күбәйҙе. Шәхси йорттарҙа ғына түгел, ә Өфө ҡалаһында ла йәшелләндереү һәм төҙөкләндереү эштәрен башҡарабыҙ. Үҙ эшебеҙгә намыҫлы ҡарау һәм уны яратып башҡарыу клиенттар базаһының артыуына булышлыҡ итә, тип уйлайым.

Яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшеү өсөн клиенттар менән эшләү процесы яҡшы ойошторолған булырға тейеш. Мин Өфөнөң алдынғы өс ландшафт дизайнерҙар конторлары менән әүҙем хеҙмәттәшлек итәм. Улар эшләгән проекттың һәр бер этабы ентекләп тикшерелгәндән, заказ биреүсе уны ҡарап раҫлағандан һуң, бөтә башҡарыласаҡ эштәр өсөн яуаплылар билдәләнгәс кенә эшкә тотнабыҙ. Мәҫәлән, биләмәлә ниндәй брусчатка һалынырға, ҡайҙа һәм нисек һыу һиптереү ҡоролмалары (автополив) урынлаштырырға һәм башҡа эштәр тәүҙән үк билдәләнә. Команданың һәр бер ағзаһы үҙ эшен белә, улар бер-береһенә ҡамасауламай һәм һуңғы һөҙөмтә юғары сифатлы булһын өсөн тырыша. Бер башҡарылған эште яңынан эшләргә кәрәк булмаҫлыҡ итеп, намыҫлы эшләйбеҙ. Бөтә эш әҙмә-эҙлекле башҡарыла. Был беҙгә тиҙ ҙә, матур ҙа, сифатлы ла итеп үҙ эшебеҙҙе эшләргә мөмкинлек бирә.

Шулай уҡ миҙгелдең ниндәй булыуына ҡарап та бурыстарҙы аныҡ бүләм. Мәҫәлән, март һәм апрель айҙарында емеш ағастарын ҡырҡып, тәрбиәләп, төрлө ҡоротҡостарҙан һәм ауырыуҙарҙан ҡотолдороу өсөн профилактик эшкәртеү менән шөғөлләнәбеҙ. Был осорҙа шулай уҡ газондарҙы аэрациялау һәм ашлама менән туҡландырыу ҙа башҡарыла.

Йәй айҙарында эшмәкәрлегебеҙ күберәк ылыҫлы ағастар менән эшләүгә йүнәлтелә. Уларҙы ла шулай уҡ тәрбиәләү, ҡоро ботаҡтарын ҡырҡыу, формалаштырыу һәм туҡландырыу мөһим.

Көҙ - ҡыуаҡ һәм ағастарҙы, газонды ашлау һәм ҡышҡа әҙерләү мәле. Күп йыллыҡ үҫемлектәрҙе һыуыҡтан һаҡлау өсөн сифатлы итеп ябыу, сәскәләрҙе ҡырҡып ташлап, биләмәне икенсе йылға әҙерләү, уныш йыйыу кеүек эштәр осоро ла ул көҙ.

Ҡышын иһә командаһын һәр ағзаһы белемен камиллаштырыу менән шөғөлләнә, әүҙем уҡый, төрлө ҡалаларҙа семинар һәм оҫталыҡ дәрестәрендә ҡатнаша. Был беҙгә ландшафт дизайны һәм йәшелләндереү өлкәһендәге һуңғы тенденцияларҙы һәм технологияларҙы белергә ярҙам итә. Әгәр ҙә һәр кем үҙ һөнәрен яҡшы аңлаһа һәм уны тормошҡа ашырыу өстөндә әүҙем эшләһә, командала эшләй белһә - был эшмәкәрлекте уңышлы ғына түгел, ә мауыҡтырғыс һәм перспективалы итә. Бер туҡтамай уҡыу, һөнәри үҫешкә ынтылыш беҙҙең команданың оҙайлы һәм уңышлы эшләүенә булышлыҡ итәсәк, тигән фекерҙәмен. Шуға күрә был йәһәттән командалағы һәр кемде мин һәр яҡлап алға әйҙәп торам, уларға белемдәрен камиллаштырыуға ынтылыш бирәм.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Белгестәр белдереүенсә, бөгөнгө мәлдә тәбиғәт ҡалаларға килә. Ҙур мегаполистарҙағы йәшел утрауҙарҙың күбәйеүе, һис шикһеҙ, яҡшы күренеш, сөнки был йәшеллек, матурлыҡ, саф һауа. Өфөнөң дә Рәсәйҙең иң йәшел ҡалаларының береһе исемен һаҡлап килеүендә баш ҡала тирәләй урынлашҡан зауыҡлы һәм матур биләмәле шәхси йорттарҙың һәм был матурлыҡты булдырыуға ҙур көс һәм тырышлыҡ һалған Фидан Мәзитов кеүек һөнәрмәндәрҙең дә роле бар, әлбиттә.**

**Гөлназ МАНАПОВА.**

ИҪКӘРТӘБЕҘ!

# ҺЫУ ИНГӘНДӘ...



**Аҡмаған һыу яткылыктарында һыу инеү хәүефле икәнен барығыҙ ҙа беләме икән?**

**Шуны белеү кәрәк:** һыуҙың церкарийҙар кеүек паразиттар менән зарарланыу ихтималлығы һәр ваҡыт бар. Ул паразиттарҙы бигерәк тә аҡмаған һыуҙа һәм ҡаҙ-өйрәк күп булған ерҙә эләктерергә мөмкин.

**Төп билдәләре:** ҡысыныу, ҡыҙарыу, ваҡ ҡыҙыл бөртөксәләр. Ҡайһы берҙә температура күтәрелеүе, йөҙ бөҙолоуы, ҡоро йүтәл булыуы ихтимал.

Бер-ике аҙна эсендә билдәләр юғала, ләкин тире пигментацияһы 3 аҙнаға тиклем һаҡланырға мөмкин.

**Церкариоздан һаҡланыу өсөн:**
- Рөхсәт ителгән урындарҙа ғына һыу инегеҙ.
- Һыу үҫемлеге күп булған, ҡош йыйылған урындарҙан һаҡланығыҙ.
- Һыу инер алдынан тирегә вазелин нигеҙендәге репеллент, крем йә май һөртөгөҙ.
- Һыуҙан сыҡҡас, душ инегеҙ йәки тәнегеҙҙе ҡаты таҫтамал менән һөртөгөҙ, кейемегеҙҙе алмаштырығыҙ. Үҙаллы дауаланмағыҙ, тәүге билдәләр булһа, табипҡа мөрәжәғәт итегеҙ.

✓ *Борон буҙаға бөтөнләй сүпрә ҡушмағандар. Шәкәрҙе лә аҙаҡ төменсә һалырға мөмкин. Буҙаны күпертеүсе төп ингредиент ул - эс майы. Һарыҡ-көҙәнекен дә ҡулланырға була, мин башлыса эре малдыҡын һалам.*



ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# ӘБЙӘЛИЛ БУҘАҺЫНА НИ ЕТӘ!

**Нимәһе нимә: буҙа ҡойоу буйынса оҫталыкта әбйәлилдәргә тиңләшеүселәр юҡтыр. Беҙҙең төбәктә борондан килгән был эсемлекте әҙерләүҙең традицион үҙенсәлектәре һаҡланып ҡалған. Буҙа ҡойоу оҫталарын һәр ауылда осратырға була. Һабантуйҙарҙа, төрлө байрамдарҙа милли аш-һыуҙан һығылып торған табындар түрендә күпереп торған буҙа ла лайыҡлы урын биләй.**



Район үҙәге Асҡарҙа йәшәүсе Әминә Яҡупова ана шул Әбйәлил буҙаһының оҫтаһы ла инде. Урта йәштәрҙәге ҡатын боронғоса ысул менән буҙа ҡойоу серҙәренә бәләкәйҙән әсәһенән күреп өйрәнеп үҫкән.

- Әсәйем Ғәлимә Лоҡманова Амангилде ауылында йәшәй. Беҙ бәләкәй саҡта ул гелән буҙа ҡойҙо. Ғаиләбеҙ өсөн дә, заказға ла. Ул был эшкә үҙенең әсәһенән өйрәнгән. Әсәйемдең буҙаһын ауыҙ иткәндәр гелән "тәмле" тип маҡтап эсә торғайны. Ҡул араһына ингәс, беҙ ҙә уға ярҙамлашып үҫтек. Тик берәй ваҡыт үҙем буҙа ҡойоу оҫтабикәһе булып китермен тип һис тә уйламағайным. Анализдар организмымда шәкәр һәм холестерин кимәленең юғары булыуын күрһәтте. 40 йәшкә лә етмәйенсә, үҙемде сирле кеше итеп ҡабул итергә теләмәнем. Әлеге күрһәткестәрҙең икеһе лә дөрөҫ туҡланмауҙың һөҙөмтәһе икәнен аңлай инем. Дарыуҙарҙың икенсе ағзаларға зыян килтерәсәген күҙаллап, халыҡ медицинаһына мөрәжәғәт иттем. Һоло кәсәленең файҙаһы тураһында уҡығас, кинәт башыма һуҡты - был бит беҙҙенсә буҙа була! Шунан бирле буҙанан өҙөлмәйем. Үҙемдең ныҡ-ғайыма ғаиләмде: иремде, өс баламды шифалы һәм туҡлыҡлы эсемлеккә "ултырттым". Талҡандан да өҙөлмәйем, - тип һөйләй Әминә Мәүлит ҡыҙы.

- Батшалар һыйындай тел йоторлоҡ тәмле ниғмәттәрҙе әҙерләүгә ете дингеҙ аръяғы ингредиенттары талап ителмәй, - ти Әминә Мәүлит ҡыҙы. - Буҙаға һоло, "Геркулес" ярмаһы, туң май (һыйыр малының эс майы) һәм һыу ғына алынһа, талҡанға бойҙайҙан башҡа бер нимә лә кәрәкмәй. Юҡ, яңылышам: ҡаҙан янында бейеп торорлоҡ тилберлек, тырышлыҡ һәм түҙемлек зарур. Рецепттары ябай ҙа, эше күп, хатта ҡатмарлы ла.

"Геркулес" ярмаһына ҡәҙимге һолоно тарттырып ҡушам. Буҙаны 50 литрлыҡ кәстрүлдә ҡайнатам. Масса кәстрүлдең төбөнә йәбешеп көймәһен, тейөрлө булмаһын өсөн даими рәүештә болғатып, һапырып торорға кәрәк. Ҡайнап сыҡҡас, оҙаҡ итеп бешерәм. Шул саҡта 50 литрға яҡынса 100 грамм иҫке менән әҙ генә туң май ҡушам. Күптәр туң майҙы маргарин, магазин ҡаймағы менән алмаштыра һәм буҙа әсемәй тип аптырай. Шунан сүпрә, шәкәр һалып әсетергә маташалар. Ә борон буҙаға бөтөнләй сүпрә ҡушмағандар. Шәкәрҙе лә аҙаҡ төменсә һалырға мөмкин. Буҙаны күпертеүсе төп ингредиент ул - эс майы. Һарыҡ-көҙәнекен дә ҡулланырға була, мин башлыса эре малдыҡын һалам. Бешеп сыҡҡан массаны әселәй генә һөҙөргә кәрәк. Бер тәүлектән буҙа әҙер ҙә була. Эсемлекте шешәләргә ҡойоп, ярлыҡтар йәбештереп, етештереү датаһын яҙып, магазиндарға сығарабыҙ. Тормош иптәшем, балаларым ярҙам итә. Аллаға шөкөр, буҙаға һорау бар, - ти хужабикә.

Талҡан - Башҡортостанда хәҙерге ваҡытта бигүк эксклюзив тәғәм тип әйтерлек түгел. Магазиндарҙа талҡан ононоң бер нисә төрлөһөн осратырға була - "Балтатау" (Баймаҡ), "Байрамғол" (Учалы), ейәнсуралар иһә үҙҙәренең Ибрай брендын булдырҙы. Ә ниңә Әбйәлил талҡаның да булдырмаҫҡа? Ошо һорауҙы үҙҙәренә биргән Яҡуповтар ғаиләһе талҡан етештереүҙе лә йәйгә һалған.

Ҡурмасты ихатала әүеҫлек аҫтындағы мейестә ҡыҙҙыралар (Әбйәлилдә ҡурыуҙы ҡыҙҙырыу тип әйтәләр). Һәр эшкә оҫта тормош иптәше Илгиз Нәдип улы тимерҙән махсус мейес эшләгән. Ҡышҡыһын да бойҙайҙы шунда ҡуралар. Әлбиттә, ҡурмас ҡыҙҙырыуға тиклем елгәреү, йыуыу кеүек мәшәҡәттәре лә бар әле уның. Магнитогорскиҙа һаҡ хеҙмәткәре булып график буйынса эшләгән Илгиз ялға сыҡҡанында ҡатынына көн оҙоно тышта тороп бер тоҡ ҡурмас ҡыҙҙырып бирә.

- Башта мейесте утын яға торған итеп эшләгәйнем. Утын бәрәкәтһеҙ китә башлағас, газ горелкаһына күсерҙем, - ти булдыҡлы хужа.

- Әлдә Илгиздең ҡулынан килмәгән эш юҡ. Магазин ем тартҡысын үҙгәртеп-ҡороп, талҡан тартыу өсөн ваҡ иләкле итеп эшләп бирҙе, - тип һөйөнә ҡатыны.

Үҙҙәре етештергән продукция сифатына бик яуаплы ҡарай Әминә. Буҙа һәм талҡанды айыҡ туй, ижәп (никах туйы), юбилей тантаналары, аят аштары өсөн заказ буйынса эшләтеп алыусылар ҙа байтаҡ. Һорау буйынса Әминә талҡанды майшәкәр менән болғап, матур формаға килтереп эшләп тә бирә. Матурлыҡты күрә белгәндәргә зауыҡлы, татлы тәмде тойғандар өсөн тел йотор-лоҡ талҡан-буҙаны минә лә фермер Айтуған Фәттәховтың "Башҡорт милли аш-һыу йорто" кафе-ресторанында уҙған бер байрам сараһында ауыҙ итергә яҙҙы. Ысынлап та, бик ныҡ тәмле-е-е! Әйткәндәй, Фәттәховтар Яҡуповтарҙы үҙҙәренең магазинына өсөн продукциялар-ҙы ҡуйыу буйынса хеҙмәттәшлеккә лә саҡырған.

**Гөлнара КҮСӘРБАЕВА.**

---

УҢЫШ ҠАҘАН



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

**Утыҙ һигеҙенсе хат "Баҡса һәм парктар"**

Кешегә күп осраҡта тик парк ҡына бүләк итән тағы бер өлкә бар. Был тарихи ваҡыт, хәтирәләр һәм шиғри ассоциациялар өлкәһе.

Тарихи хәтирәләр һәм шиғри ассоциациялар - парктарҙа һәм баҡсаларҙа тәбиғәтте кеше рәүешенә индергән, уның асылын һәм үҙенсәлеген тәшкил иткән нәмәләр. Парктар унда әле булған нәмәләр менән генә түгел, элек булғандары менән дә ҡиммәтле. Уларҙа асылған ваҡыт перспективаһы, күреү перспективаһы кеүек үк, мөһим. "Воспоминания в Царском селе" - үҙенең тәүге шиғырҙарының иң яҡшыһын Пушкин шулай тип атай бит.

Үткәндәргә ҡараш ике төрлө булыуы ихтимал: ниндәйҙер бер тамашаға, театрға, сығышҡа, декорацияға һәм документҡа ҡараш. Беренсе ҡараш үткәндәрҙе күҙ алдына баҫтырып күрһәтергә тырыша. Икенсеһе үткәндәрҙе өлөшләтә булһа ла һаҡларға тырыша. Тәүгеһе өсөн парк йәки баҡсаның, уның теге йәки был осорҙағы күренешенең күҙ менән күрерлек образын тыуҙырыуы мөһим. Икенсеһе өсөн ваҡыт дәлилдәре, документтар булыуы мөһим. Үткәндәргә булған беренсе мөнәсәбәт аллеялағы барлыҡ иҫке ағастарҙы ҡырҡып ташлап, яңыларын ултыртыуҙы талап итә: аллея шулай булған. Икенсе мөнәсәбәт ҡатмарлыраҡ: бөтә иҫке ағастарҙы һаҡлап ҡалырға, уларҙың ғүмерен оҙайтырға һәм ҡоғондары урынына йәш үҫентеләр ултыртырға. Йөҙәрләгән йәш йүкә араһында ултырған ике-өс ҡыуышланып бөткән йүкә дәлилләйәсәк: был нәҡ шул аллея, бына улар - шуға шаһит ағастар. Ә йәш ағастар тураһында хәстәрлек күрергә кәрәкмәй: улар тиҙ үҫә һәм аллея тиҙҙән элекке хәленә ҡайтасаҡ.

Әммә үткәндәргә ҡарата былдай ике төрлө ҡараштың тағы бер ҙур айырмаһы бар. Беренсеһе талап итәсәк: тик бер генә дәүер - парктың барлыҡҡа килтергән йәки уның гөрләп сәскә атҡан, йәки ниндәйҙер бер мөһим осоро ғына кәрәк. Икенсеһе әйтәсәк: бөтә дәүерҙәр ҙә йәшәһен, улар барыһы ла теге йәки был сәбәптән мөһим, парктың тотош ғүмере ҡәҙерле, төрлө дәүерҙәр һәм ошо урынды данлаған төрлө шағирҙар тураһында хәтирәләр ҡиммәтле, тиәсәк, һәм реставрациянан тергеҙеү түгел, ә һаҡлап ҡалыуҙы талап итәсәк.

Эйе, һеҙ мине дөрөҫ аңланығыҙ: мин боронғо әйберҙәргә ҡарата мөнәсәбәттәрҙең икенсеһенә өҫтөнлөк бирәм. Һәм икенсе мөнәсәбәт кинерәк, түҙемлерәк һәм һағыраҡ булғаны, мин-минлегә әҙерәк һәм тәбиғәткә күберәк урын ҡалдырғаны, иғтибарлы кешене хөрмәт менән артҡа сигенергә мәжбүр иткәне өсөн генә түгел, уның шулай уҡ кешенән көслөрәк күҙ алдына килтереү һәләтен, ижади әүҙемлекте талап иткәне өсөн дә. Сәнғәт ҡомарҡыһы күҙ алдына баҫтырып ҡарап булғанда, ижадсыһы менән бергә ижад иткәнендә, тарихи ассоциациялар менән башҡарылғанда ғына тулы.

**Дмитрий ЛИХАЧЕВ.**
**(Аҙағы).**

---

# БАЛАЛАРҘЫ ҺАҠЛАҒЫҘ!



**Йәйге йылы көндәрҙә балалар һәм өлкәндәр ял парктарына юллана, унда күп һанлы һәм төрлө-төрлө күңелле аттракциондар һәм каруселдәрҙә күңел аса.**

Ял минуттары күңелһеҙ тамамланмаһын өсөн хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен теүәл үтәргә кәрәк, тип белдерә белгестәр. Улар араһында йәш һәм ауырлыҡ буйынса сикләүҙәргә иғтибар итергә, медицина күрһәтмәләрен иҫәпкә алырға кәрәк. Бер ҡасан да ҡайыштарҙы ысҡындырмаҫҡа, ултырғыстарҙан күтәрелмәскә, ситкә эйелеп, аттракциондың хәрәкәтсән өлөштәренә ҡағылырға ярамағанлығын балаларға ҡат-ҡат аңлатыу мотлаҡ. Шулай уҡ ололар үҙҙәре лә быны һәр саҡ теүәл үтәргә бурыслы.

Теге йәки был аттракционға ултырыр алдынан ауыҙға кәнфит ҡапмаҫҡа йәки башҡа аҙыҡ ашамаҫҡа, төрлө уйынсыҡ, эсемлектәрҙе ҡалдырып торорға кәрәк. Батут һәм һауа тултырылған төрлө аттракциондарҙа балалар һаны сикле булырға тейеш.

Миҙгел асылыр алдынан үткәрелгән тикшереүҙәр һөҙөмтәһендә 2025 йылда 426 йәйге аттракциондың 9-ында төрлө етешһеҙлектәр табылған һәм уларҙы эшләтеү тыйылған.

Балалар һаулығы һәм ғүмере өсөн яуаплы булыуыбыҙҙы онотмайыҡ. Әгәр ҙә ниндәйҙер аттракцион шикле күренһә, ниндәйҙер етешһеҙлектәр күҙгә күренеп торғанда бер ҡасан да балаларҙы унда ебәрмәҫкә кәрәк. Шуны ла иҫтә тотоғоҙ: аттракционға килеүсе һәр кем рәсми теркәлеү тураһындағы документты талап итә ала.

Бөгөнгә көндә Башҡортостанда 547 аттракцион, шул иҫәптән 124 ҡышҡы аттракцион теркәлгән һәм дәүләт иҫәбенә ҡуйылған. Шуларҙың 236-һы юғары хәүефле техника (RB1), 253-ө - уртаса (RB2), 48-е түбәнгегә ҡарай (RB3).

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# МОҢДАРЫҢ КҮП...



**Ебәрәйем йырлап, китһен генә шаулап,
Арыған аттар ҙа туктап ял алһын.
Моңлоһо бар ирҙең, моңһоҙо бар,
Моңһоҙ ҙа ир-ат йоҡонан уянһын.
Ниндәй ябайлыҡ, поэтик йәһәттән ниндәй камиллыҡ! Халҡыбыҙҙың бәҫе-төҫө, тормошобоҙҙоң йәме-ҡото булырҙай йырҙар әүәлдән бихисап ижад ителгән. Башҡорттар - борон-борондан шағир һәм яугир халыҡ. Уның бөтөн тарихы, үҙенсәлекле йырлы-моңло энциклопедияһы боронғо йырҙарында асыҡ сағыла. Ил батырҙарын, саф мөхәббәтте, тыуған төйәкте данлаған оҙон көйҙәр, героик марштар, йола таҡмаҡтары, һамаҡлап әйтештәр - һәммәһе лә юҡҡа ғына классика тип нарыҡланмай. Ана шулар аһәңе аша сал тарих, гүйә, телгә килә лә баһа! "Урал", "Азамат", "Томан", "Сибай", "Шәүрә", "Зөлхизә","Уйыл" һәм башҡа бик күп һоҡланғыс йырҙарҙы аманат итеп ҡалдырған ата-бабаларыбыҙға рәхмәттәр яуһын! Ә бөгөнгө һәм киләсәк быуын ошо изге аманатты күҙ ҡараһылай һаҡлаһын, моңланһын, йырлап йәшәһен ине...**

**(Яҙыусы Сабир ШӘРИПОВтың 1992 йыл нәшер ителгән "Башҡорттоң 100 йыры" йыйынтығына баш һүҙенән).**




**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА төҙөнө.**

**23-сө һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Бейек. Бөтмәне. Рәсми. Сабыр. Барам. Алайғыр. Һағынып. Аямай. Асырға. Друид. Оло. Баҫма. Тефи. Ғәле. Ралли. Аҫаба. Оран. Нараяма. Әминә. Абынмаҫ. Аманшин.

**Вертикаль буйынса:** Һандуғас. Сәғиҙулла. Нардуған. Башы. Аллаға. Рапат. Батыр. Омега. Яранан. Сойорғоттом. Ракка. Креки. Бра. Бирнә. Яуға. Атым. Май. Алиһә.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*

## М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**20 июнь "Йәш йөрәктәр"** (Ф. Бурнаш, Ф. Ғарипов), музыкаль комедия. 12+

**24 июнь "Бөйрәкәй"** (Т. Ғарипова, А. Абушахманов, инсц. А. Ишбулдина), драма. 16+

**26 июнь "Яратам, тип әйтеп өлгөрмәнем"** (Г. Ғиззәтуллина, А.Абушахманов), кинодрама. 12+

## М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**20 июнь "Седина в бороду или невеста из Имеретии..."** (Б. Рацер, В. Константинов, М. Күлбаев), музыкаль комедия. 12+

**25 июнь "Бер ғүмер етмәй икән..."** (М. Ҡунафин, Р. Хакимов), ватансылыҡ тураһында драматик поэма. 16+

**26 июнь "Спасите Леньку!"** (М. Икрамова, М. Күлбаев), драма. 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**20 июнь "Последний уход под рок-н-ролл"** (В. Денисов), комедия. 19:00. 16+

**21 июнь "Кукольная кухня".** (Н. Беззубова, А. Верхоземский), интерактив уйын-спектакль. 12:00 һәм 15:00. 0+

**22 июнь "Чем пахнут одуванчики"** (В.Щербакова). 12:00 һәм 15:00. 0+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**20 июнь "Бишкә тиклем һанайым"** (Н. Бартенев), әкиәт. 11:00. 0+

**21 июнь "Светофория - волшебная страна"**, (Б. Хәйбуллин), мауыҡтырғыс юл ҡағиҙәләре. 6+

## Сибай концерт-театр берекмәһе

**20 июнь "Саптар"** бейеү ансамбеленең юбилей концерты. 12+

**25 июнь "Бер ғүмер етмәй икән..."** (М. Ҡунафин, Р. Хакимов), ватансылыҡ тураһында драматик поэма. 12+

## БР Милли музейы

**22 июнь** Яҙыусы Т.В. Барминскаяның **"Баба-яга"** китабы презентацияһы. 15:00. 6+

**"Бөйөк Ватан һуғышы"** (реж. Р. Кармен), фильм. 16:00. 12+

*ЙӘШЕЛ ДАУА*

# ВИТАМИН ЕТЕШМӘҮҘӘН

- 1 ҡалаҡ ваҡланған гөлйемеш һәм миләш емешенә 200 мл ҡайнар һыу ҡойоп, 4 сәғәт төнәтергә һәм көнөнә 3 тапҡыр 100 миллилитрлап эсергә.
- 2 ҡалаҡ ҡарағатҡа ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә. Көн дауамында шуны эсеп бөтөргә. Яҙғыһын ҡарағаттың йәш һабаҡтарын ваҡлап турап сәй эшләп эсеү ҙә организм өсөн файҙалы.
- 60 г миләш, 10 г ҡурай еләге емештәрен һәм 5 г ҡарағат япрағын алып ҡушырға. Йыйылманың бер ҡалағына ярты литр һыу ҡойоп, 10 минут ҡайнатырға һәм ауыҙын яҡшы ябып төнәтергә. Витамин етешмәүҙән 120 мл итеп көнөнә 3 тапҡыр эсергә.
- Витамин етешмәгәнлектән хәлһеҙләнеү осрағында киптерелгән бөтнөк, мәтрүшкә, кейәү үләне (чабрец), һары мәтрүшкә үләндәрен, ҡурай еләге сәскәһе һәм өлөрмәгән емештәрен, миләш, ҡарағат (бөрөһө, япрағы, емеше), еләкте (япрағы, емеше) тигеҙ нисбәттә алып, сәй бешерергә. 240 мл итеп, көнөнә 3 тапҡыр эсергә.

МӘҘӘНИ МАЙҘАН

# КҮҢЕЛДӘРҘӘ - САЛАУАТ РУХЫ

**Башҡортостан яҙыусылары 16 июндә Салауат Юлаевтың тыуыуына 271 йыл тулыу уңайынан милли герой һәм шағир-импровизатор һәйкәленә сәскәләр һалды. Ҡурайсы Айҙар Байтимеров бөйөк батырға арналған халыҡ көйҙәрен уйнап ишеттерҙе.**

"Салауат рухы" әҙәби-музыкаль акцияһы Яҙыусылар союзының тәҙәкләнделгән бинаһында - тәүҙә "Өфө йүкәләре" скверында, һуңынан тамаша залында дауам итте. Башҡортостандың халыҡ шағиры Ҡәҙим Аралбай Яҙыусылар союзы рәйесе урынбаҫары Тәнзилә Дәүләтбирҙина, шағирә һәм журналист Гөлдәриә Йосопова Палдискиға сәфәр тураһында хәтирәләре менән уртаҡлашты. "Мин Салауат темаһы менән 1960 йылдарҙан бирле шөғөлләнәм, - тип һөйләне Ҡәҙим Аралбай. - 1964 йылда, 1-се курсты тамамлағандан һуң, буласаҡ ғалим Мирас Иҙелбаев менән Салауат мәмерйәһенә барҙыҡ. Уның уй-фекерҙәрен һәм хис-тойғоларын ныҡ аңлау өсөн беҙ хатта фонарик менән 100 метр тәрәнлеккә төштөк. Салауат районына экспедиция онотолмаҫ тәьҫораттар ҡалдырҙы. Һуңынан Мирас, яугир һәм шағирҙың тормошон, ижадын ентекле өйрәнеп, Салауат тураһында монография яҙҙы. Ә мин 1970 йылдарҙа "Батыр яраһы" поэмаһын яҙҙым, һуңынан уның нигеҙендә композитор Морат Әхмәтовтың ораторияһы өсөн либретто ижад иттем. Уны хор һәм симфоник оркестр башҡарҙы. 1997 йылда беҙ батырҙың һуңғы төйәгенә - Палдискиға барып ҡайттыҡ. Шунда скульптор Тамара Нечаева яһаған Салауат Юлаев бюсын ҡабаттан ҡуйҙылар. Сәфәрҙән һуң мин "Рогервик", "Маяк", "Салауат ҡылысы" һәм башҡа шиғырҙарҙан торған шәлкем ижад иттем".

Йәш авторҙар Заһиҙә Мусина һәм Фәһим Әхмәров Салауат Юлаевтың шиғырҙарын уҡыны. Филология фәндәре кандидаты Гөлсәсәк Саламатова театр сәнғәтендә Салауат образы хаҡында һөйләне. Салауат батырға сикһеҙ һөйөү һәм ихтирам менән һуғарылған матур кисә, шиғырҙар, уның тормош юлы тураһында фекер алышыу Салауат Юлаев һәр яҙыусының күңелендә йәшәүен һәм уларҙы яңы әҫәрҙәргә илһамландырыуын күрһәтте.

**Ләйлә АРАЛБАЕВА.**

# БАТЫРЫБЫҘҒА - ҺӘЙКӘЛ

**"Салауат йыйыны - 2025" Республика фольклор байрамы үткән көндәрҙә Салауат районында, милли батырыбыҙ төйәгендә, Салауат Юлаевҡа һәйкәл асылды.**




Ул Өфөнөң төп биҙәге булған атлы статуяның күсермәһе булып тора. Монументҡа "Салауат Юлаев (1754-1800) - башҡорт халҡының милли геройы" тигән яҙыу ҡуйылған. "Башҡорт халҡының милли геройы Салауат Юлаевҡа һәйкәл асыу тантанаһы үтте. Ул Салауат районына ингән ерҙә ҡуйылған. Салауат Юлаев - республикабыҙ символы, хәтеребеҙҙә ул мәңгегә хоҡуҡ һәм азатлыҡ өсөн көрәшсе булып ҡаласаҡ. Яҡташыбыҙҙың рухы беҙҙең йөрәктәрҙә йәшәһен һәм тыуған ил хаҡына изге эштәр башҡарырға рухландырһын!" - тип яҙҙы район башлығы Марс Кашапов социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

# ГРОЗНЫЙҒА БАРАЛАР

**Мостай Кәримдең "Ҡара һыуҙар" поэмаһы буйынса башҡорт спектакле Грозный ҡалаһында фестивалдә күрһәтеләсәк. Уны Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры сәхнәләштерә.**

Рәсәй театр эшмәкәрҙәре союзы милли театрҙарҙың "Федерация" VI Бөтә Рәсәй фестивалендә ҡатнашасаҡ театрҙар исемлеген баҫтырҙы. Афишала Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән, шул иҫәптән Башҡортостандан, Марий Эл, Саха (Якутия), Татарстан, Мордовия, Хакасия, Чечня һәм башҡа төбәктәрҙән 11 спектакль теркәлгән.

Фестиваль 21-29 сентябрҙә Грозныйҙа үтә. 2025 йылда Чечняның баш ҡалаһы Рәсәйҙең мәҙәни баш ҡалаһы тип иғлан ителгән.

# ӘЙҘӘГЕҘ...

**Башҡортостанда йәшәүселәрҙе федераль онлайн-кинотеатр өсөн яңы сериалда төшөргә саҡыралар.**

Фильм 12 июлдән 30 сентябргә тиклем Белорет районында төшөрөлә. Белорет районы хакимиәте хәбәр итеүенсә, проектта билдәле йондоҙҙар ҡатнаша. Уларҙың исемдәре әлегә сер итеп һаҡлана. Ойоштороусылар күмәк сәхнәлә ҡатнашырға теләгән район халҡына мөрәжәғәт итә. Уларға рус ауылы халҡы ролен башҡарыу өсөн 20-40 йәшлек ирегеттәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар кәрәк. Эш хаҡы түләнә.

# ЙӘШТӘР БАЙРАМ ИТӘ

**Йәштәрҙе 28 июндә Өфөлә Ағиҙел йылғаһы буйында "Торатау" Конгресс-холы амфитеатры янында сағыу сара көтә.**

Рәсәй йәштәре көнөнә арналған концертта Elman, BABY Ti, Марат Яруллин һәм Inst Rinna сығыш яһаясаҡ. Социаль селтәрҙәрҙә Башҡортостандың йәштәр сәйәсәте министры Вито Сабиров хәбәр итеүенсә, йәштәр өсөн VR-зона һәм төрлө уйындар, билдәле блогерҙар һәм иң яҡшы артистар менән осрашыу, аниме-косплей зонаһы, автотауыш һәм тюнинг күргәҙмәһе, фәнни слэм һәм йәштәр маркеты буласаҡ. Сара 15:00 сәғәттә башлана, унда ҡатнашыу бушлай. Байрамды республиканың Йәштәр сәйәсәте министрлығы 14-35 йәштәге уҡыусылар, студенттар, сығарылыш уҡыусылары һәм хеҙмәтсән йәштәр өсөн ойоштора.

ТЕЛҺӨЙӘР

# ТҮҢӘРӘК ЛӘҒӘЛИ

**Ғүмер буйы ниндәй байлыҡ тупларға мөмкин? Әлбиттә, тел байлығын. Үҙебеҙҙең хәтер-зиһен банкындағы хазинаға инфляция ла, санкция ла ҡурҡыныс түгел. Шул банкка йәнә бер нисә гене һүҙ өҫтәйбеҙ.**

**Лапы.** Һай ергә тығылып ятҡан бүрәнә өйөмөн "лапы" тиҙәр. Йылға бөгөлөн лапы ҡаплаған. *Лапыны ҡутарыу. Ауған ағас-ботаҡтар, ташҡындан ҡалған сүп-сар өйөмөнә ҡарата ла "лапы" һүҙе ҡулланыла. Дауыл йыҡҡан ағастар лапы булып ята. Йылға тирәһен лапынан таҙартыу.*

**Лапылау.** "Лапылау" - "болартыу" тигән һүҙҙең синонимы. *Миндек бәйләгәндә, ишек алды лапыланған. Бүтән лапыламай эшләгеҙ.*

**Лыу.** "Лыу" ул - һыу өҫтөндә йүгереп йөрөгән оҙон ботло себен. *Тын һыу өҫтөндә лыу уйнай.*

**Лыу йылы.** Ун ике йыллыҡ мөсәлдең бишенсе, йәғни, аждаһа йылын, лыу йылы тип тә йөрөтәләр. *Лыу йылында тыуғандар. Лыу йылына халыҡ юрамышы.*

**Ләғән.** "Ләғән" - еҙ тасты белдергән һүҙ. *Ләғәнгә һыу ҡойоу. Боронғо ләғән.*

**Ләғәли.** Һауыт-һаба монаятын белдергән тағы бер һүҙ. *"Ләғәли" тиһәк, самауыр батмусы күҙ алдына баҫһын. Түңәрәк ләғәли. Ләғәлигә сынаяҡтар теҙелгән.*

**Шулай итеп, телебеҙҙе сит-ят һүҙҙәр менән лапыламайыҡ, аралашыу өсөн туған лөғәтебеҙ мөмкинлеге сикһеҙ.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡикәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БҮРЕК КЕЙГӘНДЕҢ...

## барыһы ла батыр түгел

Әхлаҡты камиллаштырыуҙың сере шунда: һәр көнөңдө ғүмереңдең һуңғы көнө һымаҡ йәшә - тулҡынланма, ҡурҡма, ҡыланма.

**(Марк Аврелий).**

Дөрөҫөн әйткәндә, никах - ул яуызлыҡ, ләкин һәр кемгә кәрәкле яуызлыҡ.

**(Сократ).**

Намыҫлы, әммә ҡыҫҡа ғүмер оятһыҙ, әммә оҙон ғүмерҙән өҫтөн тора.

**(Эпиктет).**

Еңә алмаған ҡаршылыҡҡа ҡаршы сыҡма.

**(Аттила).**

Никах - йоланың яртыһы ғына, ҡалған яртыһы - түҙемлек.

**(Махома).**

Бер урындан икенсе урынға күсеп йөрөп үҙ-үҙеңдән ҡасып булмай.

**(Эрнест Хемингуэй).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Хөрмәтле Уҡытыусым, - тип мөрәжәғәт итә бер ваҡыт уҡыусыһы Уҡытыусыһына, - мин тормошта үҙ маҡсатыңа өлгәшеүҙең ун принцибы бар тип ишеттем, тик улар тураһында бер ни ҙә белмәйем.**

**- Мин ул принциптарға һине өйрәтә алмайым, - тип яуаплай Уҡытыусы. - Әммә ул принциптарға өйрәтә ала торған кешеләрҙе беләм...**

**- Кемдәр һуң улар? - тип һорай уҡыусы.**

**- Тәүге өс принципҡа һине бала, ҡалған етәүһенә уғры өйрәтә аласаҡ, - ти Уҡытыусы аптырап ҡалған уҡыусыһына. - Эйе, беренсенән, баланан һин һис ниндәй сәбәпһеҙ ҡыуанырға, икенсенән, бер минут та тик ултырмаҫҡа, өсөнсөнән, теләгәнеңде ҡысҡырып һәм ныҡышмалы талап итергә өйрәнерһең.**

**- Ярай, хөрмәтле Уҡытыусым,- ти уҡыусы,- ә уғры мине нимәгә өйрәтә ала һуң?**

**- Беренсенән, эшеңде йәшерен эшләргә, икенсенән, әгәр эшеңде бер төн эсендә тамамламаһаң, уны икенсе төндә лә дауам итергә, өсөнсөнән, бер юлда йөрөгән дуҫтарыңды һәм иптәштәреңде хөрмәт итергә, дүртенсенән, маҡсатыңа өлгәшеү өсөн ғүмереңде лә бирергә, бишенсенән, бар булған нәмәңде ябай ғына булһа ла яңыға алмаштырырға ҡурҡмаҫҡа, алтынсынан, бер ниндәй ҡаршылыҡтар алдында ла ҡаушап ҡалмаҫҡа, етенсенән, үҙ эшеңә тоғро ҡалырға өйрәтер".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
19 июнь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 2857
Заказ - 1155

1 582218 911006 25024